ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 сентябрь (һарысай) 2015

№37 (663)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аҙаштырыусы саҡырыуҙарға...**

йәштәребеҙ юлыҡмаһын



5

**Зыяраттарығыҙҙы киңәйтегеҙ...**

Эскелек беҙҙе еңә бара, еңә бара түгелме?



6,13

**Эштән кеше ҡурҡамы?**

Йәки Ҡатын-ҡыҙ иҫендәге ил хәстәре тураһында бер кәлимә



8-9

**Йыландарҙың...**

ҡылыҡ-тәбиғәтен беләйек



12

**ТВ-программа** 14

***Туған телеңә һөйөү булмай тороп, үҙ ватаныңдың илһөйәре булыу мөмкин түгел. Үҙ туған теленә битарафтар - ҡырағайҙар улар. Ҡырағай ғына түгел, ә асылы менән зарарлылар ҙа, сөнки уларҙың туған телгә битарафлығы үҙ халҡының үткәненә, хәҙергеһенә һәм киләсәгенә лә тулыһынса битараф булыуҙы аңлата.***

***Константин Паустовский, танылған рус яҙыусыһы.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ил хужалығын күтәреү өсөн хеҙмәттән башҡа сара юк, тигән фекер менән килешәһегеҙме?

***Вилур ӘХМӘТОВ, иҡтисад фәндәре кандидаты, БДУ-ның Сибай институты доценты:*** Килешәм, әлбиттә. Һәр кем үҙ урынында үҙ бурысын еренә еткереп башҡарырға тейеш, шунда ғына алға китеш булаһаҡ. Тик бына эш урындарына килгәндә, ҡыйынлыҡтар бар һәм быңдай хәл бер кемгә лә сер түгел. Эш - ул йәшәйешебеҙҙең төп сығанағы, ләкин күптәр хәҙер эшләмәйенсә ятырға ла өйрәнеп китте. Эшләргә теләге булғандар йыш ҡына йәшәгән урындары буйынса эш таба алмайынса аптырағас, Себер тарафтарына юллана. Ундайҙар ҙа бик күп беҙҙә хәҙер. Уйлап ҡараһаң, күпме эшсе көс сит төбәктәрҙе күтәреүгә китеп тора, ә бит үҙебеҙҙән дә артмаҫ ине улар. Шулай ҙа билдәләп китеү кәрәктер, тием: һуңғы йылдарҙа Урал аръяғы райондарын иҡтисади үҫтереүҙең комплекслы программаһын тормошҡа ашырыу барышында төбәктә бер ни тиклем алға китеш күҙәтелә, тип әйтергә була. Һәр хәлдә, ошо хаҡта 22 августа Сибайҙа булып үткән кәңәшмәлә республика Башлығы Р. Хәмитов та: "... 8 мең эш урыны булдырылды. Төп капиталға инвестиция күләме 50 млрд һумдан артып китте", - тип билдәләне. Бынан тыш, ауыл хужалығын үҫтереүгә 2 млрд. һум самаһы аҡса һалынған. "Эш башлаусы фермер", "Ғаилә малсылыҡ фермаһы", "500 ферма" грант программаларында ҡатнашыусылар һанының артыуы тап шуға бәйле булғандыр ҙа, күрәһең. Сибай элеваторында тәүлегенә 300 тонна он етештереүгә иҫәпләнгән яңы тирмән эшләй башлауы ла байтаҡ эшсе ҡулдар йәлеп иткәндер. Тимәк, эш юҡ, тип ҡул ҡаушырып ултырырға йә ғаиләнде, донъяңды ташлап, ситкә сығып китерҙән алда, урындағы резервтарҙы һәм мөмкинлектәреңде барлап ҡарарға, бик булмаһа, халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәрендә яңы һөнәр үҙләштереп, үҙ эшеңде асыу, күп нәмәне "таҙа ҡағыҙҙан" башлап ебәреүҙән ҡурҡырға кәрәкмәйҙер ул. Кесе эшҡыуарлыҡ төрҙәре менән шөғөлләнеү өсөн ауыл ерендә мөмкинлектәр бик күп бит: ваҡ мал йә ҡаҙ үҫтерәһеңме, йылҡы аҫырап, ҡымыҙ, ҡаҙылыҡ етештерәһеңме, йәшелсәселек менән шөғөлләнәһеңме, икмәк, кондитер ризыҡтар бешереп һатыуға сығараһыңмы - фәҡәт маҡсат һәм шәхси уңғанлыҡ сифаттары ғына кәрәк. Хәҙер ҡул оҫталығы талап иткән халыҡ кәсепселеге шөғөлө бик хуплана: кемдер шәл бәйләй, кейеҙ баҫа, балаҫ һуға, сынъяһау итеп мебель эшләй, бура бурай, мунса һала һ.б. - бөткәнме ни ауыл ерендә эш! Үҙ төбәгебеҙҙе үҙебеҙ күтәрмәһәк, ситтән килеп беҙҙең тормошто яҡшыртмаҫ берәү ҙә. Ситтән килгәндең "әтнәкәләре" күп булыуын да онотоорға ярамаҫ. Еребеҙҙе иңләрҙәр, урман-йылғаларыбыҙға хужа булырҙар - рөхсәтһеҙ эйәләп һыу эскән, елək-емеш йыйған өсөн дә штраф түләргә тура килмәгәйе. Шуға күрә лә үҙ төбәгебеҙҙе күтәрерҙәй, урындағы иҡтисадты үҫтереүҙә таяныс булырҙай үҙ инвесторҙарыбыҙҙы әҙерләү һәм үҫтереү бурысы тора бөгөн төбәк етәкселеге алдында.

(Дауамы 2-се биттә).

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙЫМ

# ГӘЗИТ ҺҮҘЕ...

## тәрбиәләһен

**Бөгөнгө заманда кеше китап уҡыймы, тигәндәргә йәлләп ҡарайым мин. Йәнәһе, мәғлүмәт быуатында йәшәйҙәр, шуға ла яңылыҡтарҙы тиҙерәк тапшырыу мөмкинлегенә эйә булған интернеттан ғына уҡыйҙар. Белгең килһә, уҡыу мәғлүмәт кенә бирмәй, ул хәтерҙе үҫтерә һәм, иң мөһиме, һине тәрбиәләй. Шуға ла бик китап уҡырға ваҡытың булмаһа, гәзит уҡы, тигән кәңәш бирә йөрөйөм эргә-тирәләгеләргә. Бар матбуғат баҫмаларын уҡырға өлгөрмәйһең икән, "Киске Өфө"нө генә булһа ла уҡы, уның биттәрендәге мәғлүмәт бер ҡасан да иҫкермәй, улар ана шул тәрбиәүи йүнәлештә булыуы менән дә ҡиммәт.**

(Дауамы 2-се биттә).



12+

## "КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙЫМ

# ГӘЗИТ ҺҮҘЕ... тәрбиәләһен

(Башы 1-се биттә).

Психологтар әйтеүенсә, кешенең психикаһы шул тиклем һығылмалы. Әммә интернет киңлектәрендә бер туҡтауһыҙ яңырып торған мәғлүмәт шундай ҙур күләмдә, кеше хатта уларҙың ҡайһыһы яҡшы, ҡайһыһы насар икәнен аңлап та, уларҙы үҙләштереп тә өлгөрмәй. Интернеттан уҡыйым бит мин, апай, тип мине тынысландырған йәштәргә шуны әйтер инем: ул уҡыуығыҙ уҡыуға һаналмай инде ул! Ҡандыр кеше яҙма уйлап тапҡан, уҡырға өйрәнгән, йәғни, аңы камиллашҡан, үҫкән. Хәҙер һеҙ көнө-төнө интернетта ултырып, аңығыҙҙы кирегә көйләйһегеҙ. Шуға ла уҡыу мәҙәниәтен ҡайтарырға кәрәк беҙгә.

Ғөмүмән, уҡыу процесы һинең күңелендә ҡәнәғәтлек тойғолары уятырға тейеш. Билдәле, мәғлүмәт төрлө була, "Киске Өфө" уларҙың йөрәкте йылыта, киләсәккә өмөт уята торғандарын ғына һөйләүе менән оҡшай. Халҡыбыҙҙың тарихына ҡағылһынмы ул, бөгөнгө заманыбыҙҙың алдынғы ҡарашлы кешеләре, матур йәштәребеҙ менән таныштырһынмы - һәр береһенән әллә күпме фәһем алырға була. Яңы сыҡҡан законларға аңлатмалар, күп һорауҙарға яуап биреүе өсөн дә үҙ итәм уны. Төрлө яҡтарҙан йыйылған лаҡаптарҙы уҡып, уларҙа йор һүҙле халҡымды таныйым, яҡшы хикәйәләрҙе лә көтөп алам, "Диалог" менән "Монолог" рубрикаһын бигерәк яратам. Әҙәбиәт йылында билдәле яҙыусыларыбыҙҙы гәзит битендә күреп шатландым һуңғы осорҙа, уларҙың шундай сетерекле һорауҙарға ла тәрән яуаптар биреүенә аптырап бөтә алмайым. Йолаларыбыҙға ҡағылған мәҡәләләрҙе уҡып, ҡасандыр ишеткән, әммә онотола төшкән белемдәремде лә яңынан тергеҙә башланым. Һәр хәлдә, "Киске Өфө"лә үҙемә кәрәк булған мәғлүмәт кенә табам, шуның өсөн дә уны юғары баһалайым. Һәм ошо мәғлүмәткә йәштәребеҙ ҙә эйә булһын ине, тип теләйем.

**Дилбәр ХӘКИМОВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ил хужалығын күтәреү өсөн хеҙмәттән башҡа сара юҡ, тигән фекер менән килешәһегеҙме?

(Башы 1-се биттә).

***Рәзинә НАСИРОВА, Өфө ҡалаһы Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәге директоры:*** Эш юҡ та, эш юҡ, тип зарланырға өйрәнеп бөттөк, ә бына беҙҙең ҡарамаҡтағы һандар бөтөнләй киреһен һөйләй: эш биреүселәрҙең беҙҙең мәшғүллек үҙәге органдарына ебәргән мәғлүмәттәре буйынса йыл башында баш ҡалала барлығы 8 853 вакансия булһа, август айына ҡарата был һан 9 979-ға барып баҫты. Эш урындары бар ул, эшләргә ынтылып торыусы бик юҡ. Хеҙмәт баҙарында бөгөн иң күп талап ителгән эшсе һөнәрҙәрҙән 534 ярҙамсы эшсе, 516 эшсе, 394 водитель, 243 урам һепереүсе, 239 ташсы, 240 йыйыштырыусы, 216 ашнаҡсы, 206 электр монтажсыһы, 180 бетонсы, 156 балта оҫтаһы, 161 һаҡ хеҙмәткәре, 154 кондуктор, 99 хәрби хеҙмәткәр, 62 уҡытыусы, 49 инженер, 47 мастер, 31 бухгалтер, 31 диспетчер урындары буш. Быйылғы йылдың апрелендә теркәлгән эшһеҙлек кимәле 1,29 проценттан йәй айҙарында бер аҙ кәмене һәм әле 1,26 процент билдәһендә тотороҡланды. Август аҙағына ҡала мәшғүллек үҙәгенең район филиалдарында иҫәпкә алынған эшһеҙҙәр һаны барлығы 7091 кеше тәшкил итте. Беҙҙең Үҙәккә эш эҙләп мөрәжәғәт итеүсе граждандарҙың 18,7 проценты быйылғы тәүге ярты йыллыҡта ойошма йә предприятие ябылыу йәки эшләгән урындарында штат ҡыҫҡартыуҙар сәбәпле эштән бушатылған кешеләрҙән тора. Иҫәпкә алынған эш эҙләүселәрҙең 22,3 проценты - 30 йәшкә тиклемге йәштәр, 10,7 проценты - 55 йәштән өлкәндәр, 5,6 проценты - инвалидтар һәм 0,3 проценты ата-әсәһе ҡарауынан мәхрүм балалар һәм етемдәр. Йыл башынан алып 12 818 кешегә эш табырға ярҙам иттек. Шул уҡ ваҡытта эшһеҙҙәр иҫәбенән 1 114 кеше һөнәргә өйрәнеү һәм өҫтәмә һөнәри белем алыу өсөн уҡырға ебәрелде. Әйткәндәй, Бөтөн Рәсәйҙәге кеүек уҡ, баш ҡалабыҙ Өфөлә лә дүртенсе йыл инде декрет отпускыһы осоронда һөнәргә өйрәтеү һәм өҫтәмә һөнәри белем биреү программаһы эшләп килә. Эшләргә теләгән кеше туранан-тура беҙҙең Үҙәккә мөрәжәғәт итә ала йә булмаһа буш эш урындары буйынса үткәрелгән йәрминкәләргә килеп тә күңеленә яткан һөнәр һайлай ала. Йыл башынан беҙ ана шундай 89 йәрминкә үткәрҙек. Унда 1096 эш биреүсе 18311 вакансия хаҡында мәғлүмәт бирҙе. Һеҙҙмтәлә йәрминкәлә ҡатнашҡан 22 меңдән ашыу кешенең 5 меңгә яҡыны эшкә саҡырылды.

***Фәтих МУЛЛАҒОЛОВ, хеҙмәт ветераны:*** Яңыраҡ ҡына "АиФ" гәзитендә билдәле режиссер Николай Губенко менән әңгәмәне уҡығайным. Шул мәҡәләнең һәр һүҙе аҫтына ҡулымды ҡуйырға әҙермен: бик тә ғәҙел, тура һүҙле шәхес икән ул. Уның һымаҡ дөрөҫөн ярып һалыусылар күп түгел бөгөн. Илебеҙҙе һаҡлап алып ҡалайыҡ, тинәк, эшләргә, эшләргә һәм эшләргә кәрәк, ти ул. Ысынлап та, ҡырағай баҙар эш кешеһе ҡулынан унын эшен - йәшәү сығанағын тартып алды. Ваҡытында был хәлде төҙәтеү буйынса бер ни ҙә эшләнмәне. Һөҙөмтәлә эшләргә теләмәгән тотош бер ҡатлам барлыҡҡа килде илебеҙҙә. Осраҡлы кәсеп, пенсионер ата-әсәһе иҫәбенә, балалар һәм эшһеҙлек пособиеһына көн күрә күбеһе. Н.Губенко шундай бер ғибрәтле миҫал килтерә: илдә барлығы 2,5 млн. һаҡ хеҙмәткәре иҫәпләнә икән. Әҙмәүерҙәй ир-егеттәр банктарҙы, олигархтар офистарын, ювелир магазиндарын һәм башҡа объекттарҙы ҡарауыллай, йәғни арыбире йөрөштөргөләп, рациянан һөйләшеп, көнбағыш сиртеп көн уҙғара. Ә бына шуларҙы ысын эшкә ҡушҡанда, тип ҡыҙыға режиссер. 2,5 миллион ир-егет - ул бит ҙур ғына дәүләттең ике армияһына торошло көс! Юғиһә, ти ул, Рәсәйҙең баҫыу-ҡырҙарын әрәмә, ҡый үләне баҫты. Ә бына ут күршебеҙ Беларусь Республикаһында эш ҡайнай: баҫыуҙары сәселгән, урылған, һөрөлгән; бына тигән уңыш ала улар, малсылыҡ үҫешкән. Белоруста рҙың һөт ризыҡтары донъя кимәлендә танылыу алған. Әйткәндәй, яңыраҡ телевизорҙан да күрһәтәләр хатта: Лукашенко үҙ баҡсаһында ҡарбуз, ҡауын үҫтерә, улы менән яңыраҡ 18 сотый ерҙән 70 тоҡ картуф йыйып алып, уны балалар һәм ҡарттар йорттарына оҙатты, тип тә яҙҙылар. Был фактты кемдәрҙер мыҫҡыллап көлөү объекты ла итте, ләкин факт факт булып ҡалды һәм күптәргә өлгө күрһәтте. Беҙҙең ил етәкселегенә хәҙер граждандарында, бигерәк тә йәш быуын аңында хеҙмәткә һөйөү уятыу өсөн бик күп көс һалырға тура киләсәк (ғөмүмән, бындай маҡсат ҡуйыла ҡалһа инде). Минеңсә, мәктәптәрҙә хеҙмәт дәрестәрен тергеҙеп, йәйге хеҙмәт-ял лагерҙары эшен дә кире ҡайтарырға кәрәктер, тигән фекерҙәмен, юғиһә, яҡын киләсәктә илебеҙ халҡы тотошлайы менән ҡулланыусылар йәмғиәтенә әүерелеүе ихтимал. АҠШ менән Европаның Рәсәйгә ҡарата санкциялары хәҙер енде һыҙғанып, үҙебеҙгә үҙебеҙ үҫтереп һәм етештереп ашарға мәжбүр итәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ ЙӘМӘҒӘТ!



**1 сентябрҙән 2016 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы рәсми рәүештә старт алды. Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Яңы хаҡтар шулай: "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһы - 545 һум 76 тин, 50673 индекслыһы (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 575 һум 76 тин.**

Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Шулай итеп, сентябрҙә 2016 йылдың беренсе ярты йыллығына яҙылыу тураһындағы квитанцияларын ебәргән уҡыусыларыбыҙ **Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры", "Антология поэзии Башкортостана", Гөлнур Яҡуповнаның "Ҡатындар", Шәүрә Шәкуровaның "Өфө вокзалы", башҡортса "Дини календарь", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Ҡоралды Көстәренең Генераль штабы начальнигы урынбаҫары, генерал-лейтенант Василий Тонкошкуров менән осрашты. Яҡтар Башҡортостан биләмәһендә 7 сентябрҙә Үҙәк хәрби округта башланған "Үҙәк-2015" стратегик уҡыуҙар уҙғарыу барышын тикшерҙе.

✓Янғын йәһәтенән хәүефле миҙгел башланғандан алып Башҡортостанда 32 урман янғыны сыҡты, уларҙың дөйөм майҙаны 100 гектарҙан ашҡан. 2 сентябрҙә Башҡортостан Хөкүмәте 15 майҙан янғынға ҡаршы индерелгән махсус режимды өлөшләтә ғәмәлдән сығарҙы. Был урман янғындарына бәйле хәлдең тотороҡланыуына һәм түбән класлы янғын хәүефе урынлашыуға бәйле. Әммә был Әбйәлил, Баймаҡ, Ейәнсура, Йылайыр һәм Хәйбулла районларына ҡағылмай.

✓Башҡортостанда республика Дәүләт Йыйылышы депутаттары Ҡытайҙың Цзянси провинцияһы парламенты делегацияһы менән осрашты. Сәфәрҙең маҡсаты - Цзянси провинцияһы менән Башҡортостан араһында дуҫтарса мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү, төбәктәрҙең хеҙмәттәшлек өлкәләрен киңәйтеү, парламент-ара бәйләнештәр булдырыу. Башҡортостан менән Цзянси провинцияһының бәйләнештәре 2013 йылдың майында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Волга буйы федераль округы делегацияһы составында Ҡытай Халыҡ Республикаһында булған саҡта башланды.

✓Башҡортостан хеҙмәт баҙарында көсөргәнешлекте кәметеү өсөн 218 миллион һум алаcаҡ. Аҡса республиканың алты предприятиеһына - "НефАЗ", "Искож", Мәләүездәге "Эколайн" асыҡ акционерҙар йәмғиәте, Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе, Учалы тегеү фабрикаһы һәм Белорет металлургия комбинатына ярҙам итеүгә йүнәлтеләсәк. Йәштәрҙең мәшғүллеген әүҙемләштереүгә 20 миллион һумдан ашыу бүленәсәк. Социаль проекттарын тормошҡа ашырыу өсөн ғариза биргән йәш эшҡыуарҙар 300 мең һум күләмендә грант алаcаҡ.

✓1 сентябрҙән 31 декабргә тиклем уҡыусыларға һәм көндөҙгө бүлектә белем алған студенттарға электричкала юл йөрөүгә 50 процентлы ташлама бирелә. Башҡортостан Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, 2015 йылдың 31 октябренә тиклем хеҙмәт ветерандары; 1941 йылдың 22 июненән 1945 йылдың 9 майына ҡәҙәр тылда эшләүселәр; сәйәси репрессияларҙан зыян күреүселәр һәм реабилитация үтеүселәр, хәрби пенсионерҙар һәм башҡа категорияға ҡараған граждандар өсөн ҡала яны поездарында юл йөрөүгә ташлама ҡаралған.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыйған, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҺӘР КЕМ ҮҘ УРЫНЫНДА...

## ҡулынан килгәнде эшләһен

**Сәлмән ЯРМУЛЛИН, "Аманат" балалар һәм үҫмерҙәр журналының баш мөхәррире:** Зыялы - ул шәхес. Ә тарихты, билдәле булыуынса, шәхестәр тыуҙыра. Мәҫәлән, ауыл ерендә берәү, әйҙәгеҙ, шәжәрә байрамы үткәрәйек, мәсет төҙөйөк, юлды төҙәтәйек, зыяратты кәртәләйек, йылға аша баҫма һалайыҡ һәм башҡалар тип ауылдаштарын, үҙенең абруйлы һүҙе менән күндереп, күтәреп, эйәртеп, дөйөм мәнфәғәттәр өсөн эште ойоштора ала икән - ул да шәхес, зыялы. Әлбиттә, һәр заман зыялыларҙың һүҙенә мохтаж. Шуның өсөн дә шәхестәрҙең ауыр осорҙа ғына түгел, тыныс ваҡытта ла халыҡты әйҙәүе, үҙ һүҙен ваҡытында әйтеп барыуы кәрәк. Бөгөн иһә эште, ерле-юҡҡа һөрәнләмәй, киләсәкте бер нисә тиҫтә йылға алдан күҙаллап, планлаштырып, дәүләттә хөкөм һөргән хоҡуҡ-ҡанундарҙың мөмкинлектәрен максималь файҙаланып, аҡыл һәм тырышлыҡ менән эштәр башҡара торған мәл. Мәҫәлән, бөгөн Рәсәйгә ҡарата иҡтисади санкциялар менән бәйле ауыл хужалығына иғтибар тағы ла арта, ауылда үҙ йортонда һалыу, үҙ эшенде асыу өсөн Хөкүмәт тарафынан ҡала кешеһенең төшөнә лә инмәгән льготалы субсидиялар бирелә. Шул уҡ ваҡытта дәүләт һуңғы осорҙа күмәкләп урамға сығып, санкцияһыҙ саралар үткәргән өсөн язаһын да арттырҙы. Шуға ла бөгөн, оҡшаһа ла, оҡшамаһа ла, алдыбыҙға килеп баҫҡан ысынбарлыҡ шарттарындағы хоҡуҡи базаға нигеҙләнеп эш итергә кәрәк. Белеп эш иткәндә, йоҡлап ятмағанда, аҡыл һәм белем көсө менән әллә күпме мәсьәләләрҙе хәл итергә була.

Алдарына халҡыбыҙ мәнфәғәтен ҡайғыртыу бурысы ҡуйып, лигитим һайланған вәкилдәребеҙ, ойошмалар, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты милләт авангардында барырға тейеш. Йәһүдтәрҙең шундай әйтеме бар: диуарға башың менән төкөп ауҙарырға маташма - диуар тороп ҡалыр, ә башың ватылыр, һин уны урап үт йәки көт, бер ваҡыт ул үҙе ауыр. Башты ташҡа ярыу ваҡыты үтте. Һәр беребеҙ өсөн һәр милләттәшебеҙҙең башы ҡәҙерле булырға тейеш. Күмәк булғанда һүҙебеҙ ҙә үтемлерәк буласаҡ.

Демократик дәүләттә күп мөһим мәсьәләләр һайлауҙар, тауыш биреүҙәр ярҙамында хәл ителә. Шуға күрә, башҡорт халҡына файҙа килтерә торған эштәрҙән ыңғай һөҙөмтә алыу өсөн беҙгә демографик хәлебеҙҙе яҡшыртыу, йәғни республикабыҙҙа бермә-бер күбәйеү зарур. Һәр башҡорт ғаиләһендә кәмендә өс бала тәрбиәләнергә тейеш. Халҡыбыҙҙың боронғо зыялылары бушҡа ғына: "Бер бала - юҡ бала, ике бала - бер бала", - тип әйтмәгән бит.

Һәр башҡорт үҙ урынында халҡы өсөн ҡулынан килгән нимәне лә булһа эшләргә тейеш. Мәҫәлән, һәр бер милләттәшебеҙ, хәмер эсеү һәм кешене һәләкәткә илтеүсе башҡа яман эштәрҙән тыйылып, иман юлына баҫа ала. Бының өсөн дә бөгөн дәүләтебеҙҙә бөтөн шарттар ҙа бар. Һәр беребеҙ айырым-айырым иманға ынтылһаҡ, дөйөм алғанда, бөтөн халыҡ иманлы булыр. Ә иманлы, Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтендәге халыҡты бер нәмә лә боҙа ла, юҡ итә лә алмай.

Динебеҙ ҙә бит донъя көтөүгә, аҡса эшләүгә, бай булыуға ҡаршы түгел. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм хатта: "Ожмахҡа йомарт бай инер, тәкәббер ярлы инмәҫ", - тигән. Гөрләтеп донъя көт, бай бул, әммә милләттәштәреңә ярҙам ҡулы һуҙырға онотма, йомарт бул. Бәйғәмбәребеҙ тағы ла: "Өйөгөҙҙө йәһүдтәр көнләшерлек итеп төҙөгөҙ", - тигән. Тимәк, тиңдәр араһында тиң булып йәшәү өсөн матди байлығың булыуы ла мөһим, ә быға тырышлыҡ һалырға кәрәк.

Һүҙемде бөйөк Әхмәтзәки Вәлидиҙең 1923 йылда халҡыбыҙға васыят итеп яҙылған "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты"нан өҙөк менән тамамлағым килә: "... Хәҙер мәмләкәтебеҙҙә бола һәм күтәрелештәргә юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Хәҙер ҡулығыҙҙан килгән ҡәҙәр әһәмиәт бирә торған мәсьәләләрегеҙ шулдыр:

1) Йәштәрҙең уҡыуы, уларҙан ғилем һәм техника белгестәрен әҙерләү;

2) ...Социализм аппаратында нығынып, милләткә шул юлда хеҙмәт итеү...

3) Дин һәм телебеҙҙе һаҡлауға ғәйрәт сарыф итеү.

Күренеүенсә, бынан 92 йыл элек яҙылған был мәсьәләләр бөгөн дә көнүҙәклеген юғалтмаған, киреһенсә, көндән-көн актуалләшә генә бара...

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

УҠЫП СЫҠТЫМ...

# КИНОҒА ЯРҘАМ КӘРӘК!

**"Киске Өфө"нөң 34-се һанында "Үҙ кинобыҙҙы күрге килә" тип исемләнгән мәҡәләне уҡығас, "Үәт бит әй, дөрөҫ яҙылған!" тигән фекергә килдем һәм үҙемдең дә уй-фекерҙәремде уҡыусыға еткерергә булдым.**

Иң тәүҙә тарихҡа бер аҙ күҙ һалайыҡ. Башҡортостанда профессиональ кино сәнғәте уҙған быуаттың 60-сы йылдарында үҫешә башлай (документаль фильмдар төшөрөүҙе һәм кинохрониканы күҙ уңында тотмайым). Ошо йылдарҙан алып Башҡортостан телевидениеһында уйын (игровой) фильмдары күпләп ижад ителде. Үҙенсәлекле сценарийҙар буйынса ла, әҙәби әҫәрҙәр нигеҙендә лә эшләнде был картиналар (киносылар "фильм" тип һөйләмәй, "картина", ти). Миҫалға танылған режиссерҙарыбыҙ Ә. Абдразаҡов ижад иткән "Алтын бөртөкләп йыйыла"ны, "Кинйә"не, Ә. Нурмөхәмәтовтың "Һарығолағын", элегерәк төшөрөлгән "Миҙал" һ.б. эштәрҙе килтерергә мөмкин. Бөгөн һүҙ уларҙың ижади кимәле (режиссер һәм оператор эшенең сифаты, артистарҙың уйнау оҫталығы) хаҡында бармай, уларҙың тәүгеләр икәнен иҫтән сығармайыҡ, "Афарин!" тип кенә әйтәйек. Һәр хәлдә, профессиональ кино сәнғәтенә юл һалынды, Башҡортостанда студия асыу өсөн нигеҙ булдырылды.

Ниһайәт, күп мәшәҡәттәр, бюрократик кәртәләр аша үтелеп, "Башҡортостан" киностудияһы ойошторолдо, республикала милли кинокартиналар төшөрөргә мөмкинлек тыуҙы. Әммә бөтәһе лә ал да гөл барманы шул. Киностудияға тейешле бина таба алмай аҙапландылар, яңылышмаһам, 25 йыл эсендә киносылар ундан ашыу урынер алыштырҙы. Профессиональ кино төшөрөү өсөн төҙөләсәк павильондар ("Гипрокино" институты эшләгәйне) эскизда ғына ҡалды, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта уҡып ҡайтҡан йәш белгестәргә иғтибар етмәгәс, уларҙың күбеһе төрлө тарафтарға таралып бөттө, студияның етәкселеге бер-бер артлы алыштырылды, иң мөһиме - аҡса етмәне.

Киностудия исем өсөн генә, күршеләрҙеке бар бит, беҙҙеке лә булһын, тигән ҡараштан сығып ҡына ойошторолдо микән ни, тип әйтергә генә ҡала хәҙер. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында, һуңғараҡ та ошондай ҡеүәтле республикала ижади эште тейешенсә алып барырлыҡ аҡса табырға мөмкин булғандыр бит. Хоккей, футбол командаларына таптылар ҙабаһа. Юҡ, хәл ителмәне был мәсьәлә, сифатлы картиналар төшөрөүгә, хеҙмәткәрҙәргә тейешле хеҙмәт хаҡы түләүгә, студияның матди-техник базаһын үҫтереүгә аҡсаны республика бюджетынан һығып-ҡыҫып ҡына бирҙеләр. Һөҙөмтә билдәле...

Мәҡәләнең авторы дөп-дөрөҫ яҙа, сейле-бешле фильмдар ҙа сыға студиянан. Фәлән фестивалдә ҡатнаштыҡ, шунса диплом алдыҡ, беренсе урын яуланыҡ, тип шапырыныу урынһыҙ был осраҡта. Етерлек аҡса булмағас, ижадсылар аҙ сығымлы ("малобюджетный" тиҙәр уны үҙҙәренсә) ҡыҫҡа метражлы фильмдар төшөрөргә, сығымдарҙы кәметеү өсөн урындағы театр артистарын йәлеп итергә мәжбүрҙәр, һөҙөмтәлә тейешле техник һәм художество кимәлгә өлгәшә алмайҙар...

Егерме биш йыллыҡ юбилей алдынан, ғәҙәттәгесә, шапыртып маҡтамай, проблемаларҙы барлағанға хөрмәтле киносылар үпкәләмәһен, милли кинобыҙҙың әлеге хәле, уның киләсәге өсөн борсолоуҙан былар. Бөтәһе лә хөрт түгел, әлбиттә, уңыштар-һөйөнөстәр ҙә бар. Йәш режиссер А. Аҫҡаровтың эштәрен ҡарап ғорурланабыҙ, В. Иҫәндәүләтованың фильмдары матур ғына килеп сыға, мультипликаторҙар уңышлы эшләй. Шулай ҙа киностудия хеҙмәткәрҙәренән, үҙаллы ижад иткән киносыларҙан беҙ күберәкте көтәбеҙ. Уларҙа теләк тә, көс тә, илһам да бар, дәүләт яғынан аныҡ ярҙам һәм теләктәшлек кенә етмәй кеүек, минеңсә.

Әйткәндәй, был яҙғандарҙан фәтеүә булһын өсөн нимә эшләргә кәрәк, тигән һорау тыуа. Минеңсә, Республика Башлығының кино сәнғәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән Указы, һис юғында, ошо юҫыҡтағы Хөкүмәт ҡарары ҡабул ителергә тейештер, тием. Шул осраҡта ғына ниндәйҙер һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин.

**Камил ШӘМСЕТДИНОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Сентябрҙә Башҡортостанда пенсия таратыу бер көнгә алдараҡ тамамланасаҡ. Ҡорбан байрамына бәйле республикала түләүҙәр 23 сентябрҙә тамамлана, тип аңлатма бирҙеләр Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә. Таратыу ваҡыты 24 сентябргә тура килгәндәр аҡсаларын бер көн алда аласаҡ.

✔ Берләштерелгән двигателдәр эшләү корпорацияһына ингән Өфө моторҙар эшләү берекмәһенең идарасы директоры итеп Евгений Семиваличенко тәғәйенләнде. Быға тиклем ул Өфө моторҙар эшләү берекмәһе идарасы директорының корпоратив һәм хоҡуҡи мәсьәләләр буйынса урынбаҫары вазифаһын биләне.

✔ Башҡортостанда аграрийҙар ике миллион тоннанан ашыу иген йыйып алған. Бөртөклөләр һәм ҡуҙаҡлылар 1186 мең гектарҙа сабылған (68 процент), 1155 мең гектарҙа (66 процент) һуғылған. Гектарынан уртаса уңыш 17,6 центнер булғанда 2031 мең тонна ашлыҡ һуғып алынған. Йылайыр, Краснокама, Стәрлебаш һәм Шаран райондарында 80 проценттан ашыу майҙандарҙа иген һуғылған. Саҡмағош һәм Мәләүез районы баҫыуҙарында юғары ундырышлылыҡ һаҡлана - бында әүәлгесә 28 һәм 27,7 центнер уңыш алына. Мәләүез һәм Стәрлетамаҡ райондарында 100 мең тоннанан ашыу ашлыҡ һуғылған.

✔ Башҡортостан аграрийҙарын "Алтын көҙ-2015" XVII Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһенә саҡыралар. Сара 8 октябрҙән 11-нә тиклем Мәскәүҙең "Крокус Экспо" күргәҙмәләр үҙәгендә уҙа. Ҡатнашыу өсөн ғаризалар 27 августан 1 октябргә тиклем ҡабул ителә. Былтырғы күргәҙмәлә Башҡортостан предприятиелары 442, шул иҫәптән 261 алтын, 106 көмөш һәм 75 бронза миҙалға лайыҡ булды.

✔ Башҡортостан юлдаш телеканалы яңғыҙҙар проблемаһына иғтибарын йүнәлтә. Шуға бәйле тиҙҙән көндөҙгө сәғәт 1-ҙә тура эфирҙа яңы тапшырыу башлана. Аҙна һайын "Бәхетнамә" сығарылыштарының береһе икенсе яртыңды эҙләү темаһына бағышланасаҡ. Проект авторҙары димселәрҙе йәлеп итергә ниәтләй. Ғаилә ҡороу өсөн кем менәндер танышырға теләүсе тамашасылар анкеталарын ебәрә ала. Тапшырыу үҙенсәлекле мәғлүмәт йыйыу үҙәге буласаҡ. Үҙ ишен эҙләүсе яңғыҙаҡтар телефон аша ғына бәйләнешкә сығасаҡ.

**"Башинформ"дан.**

## ЕТЕ РАЙОН

**Калинин районы.** Иносрта урам байрамдары үтте. Уны ойоштороуға урындағы Торлаҡ-эксплуатация участкалары, "Лидер" балалар һәм үҫмерҙәр клубтары тәрбиәләнеүселәре һәм педагогтары, "Берҙәм Рәсәй"ҙең Йәш гвардияһы ағзалары күп көс һалған. Күпселек халыҡтың байрам итергә һәм күршеләре менән аралашырға бөтөнләй тиерлек ваҡыты юҡ. Шуға ла бындай сара уҙғарыуға улар ҡуш ҡуллап ризалашҡан.

**Совет районы.** 13 сентябрҙә сәғәт ундан бергә тиклем Урмансылар паркында "Спортлы иртәнге аш" сараһы ойошторола. Программала күнегеүҙәр, тәмле һәм файҙалы аш, шулай уҡ балалар анимацияһы буласаҡ. Бындай сара беренсе тапҡыр ғына үткәрелмәй, 23 августа асыҡ һауала күнегеүҙәр эшләргә 100 активист килгән булған. Инеү - бушлай, бары тик 8-917-78-08-108 номеры буйынса теркәлеү үтергә кәрәк.

**Дим районы.** Ырымбур өлкәһенең Соль-Илецк ҡалаһында үткән волейбол буйынса халыҡ-ара турнирҙа райондың егеттәр командаһы алтын миҙал яулаған. Күрәһең, улар йәйге каникул ваҡытында ял итеп кенә ятмаған, ә үҙенең спорт оҫталығын камиллаштырған. Йәш спортсыларҙы ярышҡа юғары категориялы тренер С. Шубин әҙерләгән.

**Киров районы.** 12 сентябрҙә С. Аксаков исемендәге баҡсала сәғәт 12-нән алтыға тиклем Ҡабаҡ фестивале үтәсәк. Унда бай программа тәҡдим ителәсәк. Шулай уҡ "Халыҡ тин"е тип аталған ваҡ аҡса йыйыу мәрхәмәтлек акцияһы ла ойоштороласаҡ. Теләүселәр өйҙәрендә йыйылып киткән 10 тинлектәрҙән алып 10 һумлыҡтарға тиклем килтерә ала. Йыйылған аҡса "Семья" психологик-медицина-социаль үҙәге территорияһында урынлашҡан балалар уйын майҙансығын төҙөүгә йүнәлтеләсәк.

**Ленин районы.** Район мәктәптәренең Рәсәйҙең атҡаҙанған осоусы-һынаусыһы һәм космонавты Урал Солтанов исемендәге Халыҡ-ара йәйге аэрокосмик мәктәптә практикала булған уҡыусылары авиацияға бәйле профессия һайлаған. 2-се башҡорт лицейынан, 1-се һәм 128-се мәктәптәрҙән дүрт уҡыусы ӨДАТУ студенты булып киткән. Мәктәп техника менән яҡындан танышыу, белгестәр менән аралашыу мөмкинлеген биреп, һөнәр һайлауға этәргес булды, ти улар.

**Орджоникидзе районы.** 82-се лицейҙа "Уҡыу йорттарында финанс грамоталылығы көнө" Бөтә Рәсәй акцияһына ҡушылып, "Финанс грамоталылығы көнө" синыф дәрестәре үтте. Унда уҡыусылар ғына түгел, финанс өлкәһендә эшләүсе ата-әсәләр ҙә ҡатнашты. Балаларға аҡса, акция тураһында уйын формаһында аңлатһалар, урта синыфтарҙың иғтибарын "финанс пирамидалары" һәм нисек уларҙың ҡорбаны булмауға йүнәлткәндәр.

**Октябрь районы.** Районда коммуналь хеҙмәттәр буйынса бурыстары булған кешеләр менән осрашыу уҙғарылған. Бындай сараның маҡсаты -хеҙмәттәр өсөн түләү мәсьәләләрен көйләү. Күп ғаиләләрҙә коммуналь хеҙмәттәр "кеҫәгә һуға", шул сәбәпле бурыстар күбәйә, пеня арта, халыҡ торлаҡ өсөн түләүҙәрен көләмә артыуға зарлана. Ә бурыстарҙың йыйылыуы идара компанияларын ресурстар менән тәьмин итеүсе ойошмалар алдында бурыслы итеп ҡалдыра.

## ...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Бөгөн, йәғни 12 сентябрҙә, баш ҡаланың Якутов исемендәге паркында ҡала халҡы һәм ҡунаҡтар өсөн "Баллы төбәк" махсуслаштырылған бал йәрминкәһе эшләйәсәк. Өфө өсөн ғәҙәтигә әйләнгән был йәрминкәлә республикабыҙҙың иң баллы райондары умартасылары быйыл да үҙ тауарын тәҡдим итәсәк. Сарала балдың бер литрын уртаса 200-350 һумға, өс литрын - 1500-2000 һумға һатып алып буласаҡ. Был хаҡта журналистар менән осрашыуҙа БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Әмир Ишемғолов белдерҙе.**

# ТӘМЛЕ ЙӘРМИНКӘГӘ КИЛЕГЕҘ!



Әмир Миңлеәхмәт улы әйтеүенсә, бал йәрминкәһенә килеүселәргә бары тик сифатлы бал ғына тәҡдим итеlә. Балын һатырға теләк белдергән һәр умартасы, продукцияһын тейешле тикшереү үткәргәндән, белгестәрҙән рөхсәт алғандан һуң ғына һатыу майҙанына индерелә. Тимәк, йәрминкәлә алыпһатарҙар булмаясаҡ, тигән һүҙ. Һатып алыусылар өсөн дә уңайлы шарттар булдырыла: беренсенән, иң тәүге һатып алыусыларға ташламалар буласаҡ, һәр хужаның балын тәмләп ҡарау мөмкинлеге лә тыуҙырыласаҡ. Икенсенән, халыҡ үткән йылдарҙа ла йәрминкәлә ҡатнашҡан таныш умартасыларҙан бал ала аласаҡ. Бынан тыш, йылдағыса, кәштәләргә ҡуйылған балдың, бал, кәрәҙ, бал ҡорттары нигеҙендә эшләнгән файҙалы продукцияның да күнелгә ятҡанын һайлап алырға мөмкин буласаҡ. "Умартасылар бер-береһенән күп нәмәгә өйрәнә. Йәрминкәне инде нисә йыл үткәрәбеҙ - бында тәҡдим ителгән тауарҙың сифаты, һатыу нөктәләренең биҙәлеше йылдан-йыл яҡшыра ғына бара", - ти Ә. Ишемғолов. Әйткәндәй, Якутов паркында үткән йәрминкәлә Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге етештергән косметика тауарҙарын да һатып алырға, балдағы һыуҙың масса нисбәтен тикшертергә, балға органолептик баһа бирҙерергә, Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге белгестәренә үҙендә борсоған һорау менән мөрәжәғәт итергә мөмкин. Үҙәктең үҙенең һатыу нөктәһе лә эшләйәсәк. Ул ғына ла түгел, умартасылар араһында иң-иңдәрҙе билдәләргә лә йыйыуа ойоштороусылар. Иң шәп нәҙекәй бил үрсетеүселәрҙе "Иң яҡшы һатыу нөктәһе өсөн", "Үҙ районын иң тулы итеп күрһәткәне өсөн" һәм "Һатып алыусыларҙы ылыҡтырғаны өсөн" номинациялары буйынса асыҡлаласаҡтар.

Бал байрамында шулай уҡ билдәле сәхнә йондоҙҙары ҡатнашлығында сағыу концерт, бал темаһына арналған ярыштар ҡаралған.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Бөгөнгө кәңәшмәлә Әмир Ишемғоловтан: "Ни өсөн башҡорт балы иң шәбе һуң? Бының сере ниҙә?" - тип һорағас, белгес: "Беҙгә үҙҙәренең балын донъялағы иң яҡшы бал тип һанаған япон белгестәре килгәйне. Беҙ улар алдына бер ниндәй яҙыу-ниһеҙ генә тиҫтәнән ашыу илдең балын, шул иҫәптән башҡорт балын ҡуйҙыҡ. Улар тәме, составы буйынса иң сифатлы балды билдәләне. Һөҙөмтәлә, тәүге ике урынды Башҡортостан райондары балдары, өсөнсөнө япон балы алды. Был японДарҙы ныҡ аптыраште ҡалдырҙы", - тип яуап бирҙе. Кәңәшмә һуңынан хәбәрселәргә лә япон белгестәренә тәҡдим ителгән тәмле һынауҙы үтергә мөмкинлек бирҙеләр. Ҡыҫҡаһы, 12 сентябрь Якутов исемендәге паркка тәмле йәрминкәгә килегеҙ.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ.

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺАЛҠЫНДАРҒА ӘҘЕРБЕҘ

**Ошо хаҡта белдерҙе журналистар менән матбуғат конференцияһында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов.**

- Урындағы үҙидаралыҡтың яҡшы эшләүенең иң төп күрһәткесе - ул торлаҡ-коммуналь хужалыҡтарҙың һәм социаль өлкәнең ҡышты аварияларһыҙ үткәреүе, - тип башлап китте ул һүҙен. - Бөгөн йылылыҡ үҙәктәрен, инженер ҡоролмаларын әҙерләү алдан раҫланған графиктарға ярашлы бара, ремонт эштәренең 2015 йылдың 15 сентябрендә тамамланыуы көтөлә. Йәмғеһе 27,45 км тәшкил иткән йылылыҡ селтәрҙәренең 10,26 км өлөшөндә капиталь ремонт эшләнгән.

Салауат Хөсәйенов әйтеүенсә, ҡаланың йәшәйешен тәьмин итеү системалары көҙгө-ҡышҡы миҙгелде ҡаршылауға тулыһынса әҙер, әлеге мәлдә йылылыҡ системаларын таҙартылған һыу менән тултырыу бара.

Йылылыҡты һауа температураһы 5 тәүлек рәттән +8 градустан түбән торған хәлдә бирәсәктәр. Әйткәндәй, үҙ йорттарында йылылыҡты иртәрәк ебәреүҙәрен теләгән граждандар дөйөм йорт йыйылышы үткәреп, хәл итә ала. Ул сағында, әлбиттә, коммуналь түләүҙәр ҙә артасаҡ. Ә балалар баҡсаларына, дауаханаларға, балалар йорттарына, мәктәптәргә һәм башҡа социаль объекттарға йылы биреүҙе уларҙың етәкселәре, һауа температураһына ҡарамай, ғариза ярҙамында үҙҙәре лә хәл итә ала.

# ҒОРУРЛАНАБЫҘ

**Өфөнөң ике юғары уҡыу йорто RAEX ("Эксперт РА") агентлығының Рәсәйҙең иң яҡшы университеттары рейтингына инде.**

Өфө дәүләт нефть техник университеты "Техник, тәбиғи-фәнни йүнәлештәр һәм аныҡ фәндәр" өлкәһендә 50 иң яҡшы вуздар исемлегендә 28-се урынды биләне. Өҫтәүенә Өфө дәүләт нефть техник университеты былтырғы рейтинг менән сағыштырғанда ике баҫҡысҡа юғары күтәрелде.

Тағы ла бер уҡыу йорто - Башҡорт дәүләт университеты "Иҡтисад һәм идара итеү" өлкәһендә 50 иң яҡшы вуз исемлегендә - 44-се урында. 2014 йылда Башҡорт дәүләт университеты рейтингка индерелмәгән.

Рейтингтар 2012-2015 йылдарҙа "Эксперт РА" агентлығы үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусыларҙың юғары уҡыу йорттарын баһалау һөҙөмтәһен сағылдыра. Респонденттарҙың белем сифаты, вуз тамамлаусыларҙың хеҙмәт баҙарында талап ителеүе, шулай уҡ ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлегененең кимәле тураһында фекерҙәре иҫәпкә алынған. Һорау алыуҙарҙа академия һәм фәнни берләшмә, эш биреүсе компания вәкилдәре, студенттар һәм уҡыу йортон тамамлаусылар ҡатнашҡан. Респонденттарҙың дөйөм һаны 34 меңдән ашҡан.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә тағы ла бер музыкаль фонтан эшләй башлаясаҡ, был юлы иһә - ҡаланың төньяғында. Өфө дәүләт нефть техник университетының Йәштәр һайраһы янындағы фонтан реконструкцияланды: хәҙер ул тәслә һәм музыкаль. Был фонтан Черниковкала 60 йыл самаһы элек, 1956 йылда, барлыҡҡа килгән һәм тәүге көндәрҙән уҡ ҡала халҡының яратҡан урынына әйләнгән. Яҡын арала фонтан рәсми рәүештә асыласаҡ.

✓Ырымбур тамашасыһы башҡорт киноһын ҡараны. Кино гастролдәре Ырымбур өлкәһендә, "Башҡортостан" киностудияһына нигеҙ һалыусы Әмир Абдразаҡовтың тыуған төйәгендә ойошторолдо. Александровка районының Ҡәйепкол һәм Иҫәнгилде ауылдарында, Красногвардеец районының Үрге Ильяс һәм Юлдаш ауылдарында "Башҡортостан" киностудияһының фильмдары күрһәтелде. Ырымбур өлкәһендә шулай уҡ Айнур Асҡаровтың "Еңмеш" һәм "Әсә" фильмдары ла күрһәтелде.

✓Силәбелә башҡорт кейеменең атрибуттарын әҙерләү буйынса икенсе оҫталыҡ дәресе үтте. Ойоштороусылар булып Силәбе өлкәһенең Башҡорт йәштәре союзы ағзалары сығыш яһаны. Сараны Өфөнән килгән эксперттар: "Хазина" ҡул эше түңәрәгенең кураторы Хәмдиә Ҡунаҡколова менән этнограф, Республика халыҡ ижады үҙәгенең баш белгесе, Сәсәндәр үҙәге етәксеһе урынбаҫары Гөлгөнә Баймырҙина уҙғарҙы.

✓Башҡортостанда "Кан-кәрҙәштәргә - китап" акцияһы дауам итә. Ырымбур өлкәһендә башҡорт мәҙәниәте байрамы булды. Шағирә, Шәйехзада Бабич исемендәге премия лауреаты, "Башҡортостан" гәзитенең әҙәбиәт һәм мәҙәниәт бүлеге мөдире Лариса Абдуллина Ҡоролтайҙың урындағы башҡарма комитетына китаптар бүләк итте. Ырымбур башҡорттары Башҡортостан журналистарына рухи байлыҡ алып килгәндәре өсөн ихлас рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе.

✓Башҡорт дәүләт аграр университетының V курс студенты Александр Сергеев юниорҙар араһында пауэрлифтинг буйынса донъя беренселегендә көмөш миҙал яуланы. Ярыштар 1 сентябрҙән 6-на тиклем Чехияның баш ҡалаһы Прагала уҙа. Александр Сергеев аграр университетка уҡырға ингәс кенә пауэрлифтинг менән шөғөлләнә башлай һәм дүрт йыл эсендә юғары һөҙөмтәләргә өлгәшә. Спортсының тренеры - Башҡорт дәүләт аграр университетының физик тәрбиә биреү, спорт һәм туризм кафедраһының өлкән уҡытыусыһы Рузил Хәбибуллин.

✓ *Террористик ойошмаға килеүселәрҙе бер нисә категорияға бүлергә мөмкин. Беренселәре - һай белемле һәм бәләкәй, тотороҡһоҙ килемле кешеләр.*



КӨН ҠАҘАҒЫ

# АҘАШТЫРЫУСЫ САҠЫРЫУҘАРҒА...

## йәштәребеҙ юлыҡмаһын

**"Ислам дәүләте" тураһындағы хәбәрҙәр бер нисә йыл элек ишетелә башлағайны. Был террористик берләшмә әҙ генә ваҡыт эсендә үҙ сафтарына бөтә донъя буйлап кешеләр йәлеп итеү эшен киң йәйелдерҙе. Экстремистик характерҙағы материалдар 15 телгә тәржемә ителеп, видеохостинг, социаль селтәрҙәр, үҙҙәренең һәм берләшмәгә лояль мөнәсәбәттә булған ваҡытлы матбуғат саралары аша таратыла. Улар әленән-әле заманса технологияларҙы үҙләштерә һәм вербовкалау өсөн яңы форматтар эҙләй.**



Күптән түгел Египеттың дини бойороҡтар буйынса баш идаралағы хәбәр итеүенсә, "Ислам дәүләте" оҙаҡламай үҙ рәтенә яңы ағзалар вербовкалау стратегияһын үҙгәртеп, эшмәкәрлеген ғәрәп төбәгенән Кавказ, Үҙәк Азия һәм Индонезия тарафтарына күсерәсәк. Был районлар осраҡлы рәүештә һайланмаған. Берләшмәнең вербовкалаусыларына иҡтисади, социаль һәм мәҙәни өлкәлә "проблемалары" булған дәүләттәрҙә эшләү еңелерәк. Бындай тенденция, башлыса, Урта Азия республикалары - Ҡырғыҙстан һәм Тажикистанға - хас. Ә Ҡаҙағстан һәм Үзбәкстанда хәлдәр икенсе төрләрәк. СССР тарҡалғандан һуң был дәүләттәр етештереү ҡеүәттәренең бер аҙын ғына булһа ла һаҡлап ҡала һәм иҡтисади йәһәттән яңы реаль ысынбарлыҡҡа яраҡлаша алды. Унан тыш, улар Тажикистандағы кеүек оҙайлы хәрби конфликттарҙы һәм Ҡырғыҙстандағы һымаҡ сәйәси күтәрелештәрҙе урап үтеү мөмкинлеге тапты.

"Ислам дәүләте" террористик ойошмаһының "ғәҙел дәүләт" төҙөү идеяһы яңы ғына барлыҡҡа килмәгән. Асылда, "Ислам дәүләте" әлеге ваҡыттағы дәүләт ҡоролошона альтернатива тәҡдим итә һәм ул тик бер генә критерийға - "ғәҙеллеккә" таянасаҡ, тип бара. Халҡы булмаған дәүләт - дәүләт түгел, шуға ла "Ислам дәүләте" етәкселәре үҙҙәре рәтенә яңынан-яңы граждандар йыйыу эшмәкәрлеген киң йәйелдерә. Террористик ойошмаға килеүселәрҙе бер нисә категорияға бүлергә мөмкин. Беренселәре - һай белемле һәм бәләкәй, тотороҡһоҙ килемле кешеләр. Был төркөмгә ҡарағандар нәҡ ярлылыҡты әлеге дәүләттәрҙәге ғәҙелһеҙлек билдәһе тип һанай һәм улар өсөн берләшмә тәҡдим иткән идея ҡараңғы тоннелдең осонда күренгән яҡтылыҡҡа тиң. Үҙҙәренең әлеге хәленән күңелдәре ҡайтҡан һәм төшөнкөлөккә бирелгән был төркөм кешеләре "иман өсөн ыҙа сигеүсе" роленә риза була. Нәҡ улар "Ислам дәүләте" етәкселәре үлемдар сифатында ҡулланған радикалдар рәтен тулыландыра ла инде. Икенсе төркөмгә ҡарағандар ошондай уҡ "хәүефлеләр" рәтендә. Улар ҙа үҙҙәренең әлеге тормошо менән риза булмаған, эргәһендәге, илдәге, ғөмүмән, бөтә донъялағы хәлде үҙгәртергә теләүсе, тирә-яҡтағыларҙан күңеле ҡайтҡан, көс ҡулланырға яратыусы кешеләр. Шул уҡ ваҡытта улар йәмғиәттә бейек социаль урын биләүсе, белемле һәм тәү ҡарашҡа уңышлы кешеләр.

Вербовкаланыусыларҙың йәштәр менән эш итеү алымы башҡаларҙыҡынан ҡырҡа айырыла. Тормошта үҙҙәрен эҙләүсе һәм йәш көрсөгөн кисереүсе үҫмерҙәр һәм йәштәрҙең психологик үҙенсәлектәрен файҙалана улар. Икеләнеүсән йәштәр үҙҙәрен ниндәйҙер бер сәйәси, дини һәм башҡа социаль ойошма вәкиле сифатында "табырға" тырыша.

"Ислам дәүләте" эшмәкәрлеге менән бөтә донъя илдәре лә көрәш алып бара һәм үҙ граждандарын уның рәтенә барып эләгеүҙән араларға тырыша. Мәҫәлән, Рәсәй быйыл халыҡ араһында был берләшмә идеяһын пропагандалау менән көрәшеүсе ФСБ-ның махсус бүлеген булдырҙы. Үзбәкстанда, Тажикистанда ла ошо уҡ юҫыҡта эшмәкәрлек йәйелдерелә. Ҡаҙағстанда һәм Ҡырғыҙстанда, шулай уҡ Рәсәйҙә телефон аша консультатив ярҙам күрһәтеүсе "ҡыҙыу линия" эшләй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Махсус хеҙмәттәр мәғлүмәттәренә ярашлы, "Ислам дәүләте" сафында әлеге ваҡытта 2 мең тирәһе Рәсәй, 300-ҙән ашыу Ҡырғыҙстан, 200 тирәһе Үзбәкстан, 400-ҙән ашыу Тажикистан һәм Ҡаҙағстан граждандары бар. Күренеүенсә, мәсьәлә көндән-көн ҡатмарлаша һәм бөтә дәүләттәрҙең дә тиҙ арала ошо юҫыҡҡа иғтибарын тағы ла арттырыуҙы һәм үҙ граждандарын был ҡапҡандан һаҡлап ҡалыу юлын табыуҙы талап итә.**

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

ҺОРАУ - ЯУАП



# КАПИТАЛЬ РЕМОНТ...

## һорауҙар тыуҙыра

**"Күп фатирлы йорттарҙа йәшәгән һәм 80 йәше тулған пенсионерҙар капиталь ремонт өсөн взнос түләмәһә лә була, тип ишетеп ҡалғайным. Ошо турала ентекләберәк аңлатһағыҙ ине.**

**Илһам ЯХИН, Өфө ҡалаһы".**

- Ысынлап та, 80 йәште үткән пенсионерҙарҙы йорттоң капиталь ремонты өсөн һалым түләүҙән азат итеүҙәре ихтимал. РФ Торлаҡ кодексына төҙәтеү индереүҙе ҡараған закон проектын Дәүләт Думаһына "Ғәҙел Рәсәй" фракцияһы етәксеһе Сергей Миронов һәм уның урынбаҫары Олег Нилов тәҡдим итә. Әгәр ҙә ғаиләлә ир йә ҡатындың береһе 80 йәште үтһә, бындай ғаиләләр ҙә взнос түләмәүселәр төркөмөнә инеүе бар.

Һәр хәлдә, Рәсәй Федерацияһының Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы етәксеһе Михаил Мень был турала белдереп өлгөрҙө лә инде. Әҙерләнгән закон проекты буйынса өлкән йәштәге кешеләр үҙҙәренә күрһәтелеп өлгөрмәгән хеҙмәт өсөн түләмәйәсәк, тигән фекер нығына. "Вариҫтары булмаған яңғыҙ пенсионерҙар бөгөн үҙҙәренең былай ҙа ҙур булмаған пенсияларын капиталь ремонт өсөн түләп, үҙҙәренең фатирын тағы ла ҡиммәтләндерә, йәғни, былай ҙа дәүләткә ҡала торған торлаҡҡа аҡса түгә", - тигәйне Михаил Мень. Закон проектының аңлатмалы запискаһында әйтелеүенсә, әле ҡулланылған система пенсионерҙарға тура килмәй, "капиталь ремонт үткәреү ваҡыты 25-30 йылға ҡарала". Етмәһә, Сергей Миронов фекеренсә, былай ҙа яңғыҙ булған ҡарттарҙың елкәһенә өҫтәмә сығымдар һалып, дәүләт уларҙы социаль яҡлауҙан мәхрүм итә. "Властар граждандарҙың айырым категориялары өсөн өҫтәмә социаль ярҙам саралары күрһәтеү хоҡуғына эйә", ти депутаттар һәм пенсионерҙарҙың йәшәү кимәлен түбәнәйтмәҫ өсөн уларҙы взностан азат итергә тәҡдим индерә лә инде. Был тәҡдимде Дәүләт Думаһының Хеҙмәт, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эше буйынса комитеты ағзаһы, коммунист Сергей Юрченко ла яҡлай.

Шулай ҙа эксперттар был эштең ябай түгеллеген дә белдерә. 80 йәште үткән пенсионерҙарҙы льготалы категорияға индереп, уларҙың взносын дәүләт йә үҙе, йә йортта йәшәүсе башҡа граждандар түләргә тейеш була, ти улар. Әгәр ҙә икенсе вариант һайлана икән, йәмғәтселек референдумы үткәреп, халыҡтың фекерен һорарға мәжбүр буласаҡ депутаттар. Шуға ла был закон проектының һөҙөмтәһе тураһында ниҙер әйтергә иртәрәк. Тимәк, һеҙгә, 80 йәште үтеүегеҙгә ҡарамаҫтан, торлаҡ фондына капиталь ремонт өсөн түләргә тура киләсәк. Етмәһә, бында һүҙ яңғыҙ ҡарттар, йәғни фатирын ҡалдырыр вариҫтары - балалары, туғандары булмағандар тураһында бара. Әгәр ҙә үҙегеҙҙе бындай категорияға индермәйһегеҙ икән, ҡабул ителгән хәлдә лә, был закондың һеҙгә ҡағылмауы ла ихтимал.

**Ләйсән НАФИҠОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Псориаз

❖ Тәнде псориаздан таҙартыу өсөн 4 сей йомортҡаны болғатырға ла, 80 гр камфара майы, 200 гр ҡайын дегете, 200 мл спирт өҫтәргә. Һуңынан мамыҡ менән ауыртҡан урынға һөртөргә. Өс көндән һуң дегет һабыны менән йыуынырға һәм процедураны ҡабатларға. Бындай дауа ныҡ аҙып киткән псориазды ла 10-12 көн эсендә дауалай. Майҙы ҡараңғы быялалы һауытта һаҡларға.

## Ангина, киҙеүҙән

❖ Кем йыш киҙеүҙән, ангинанан, бронхиттан, гаймориттан, өҫкө тын юлдары шешеүе менән яфалана, уларға андыҙ (девясил) төнәтмәһе ярҙам итер. 150 гр кипкән андыҙға 500 мл-ға тиклем һыу менән иҙелгән 1,5 л медицина спиртын ҡойорға һәм 21 көн бүлмә температураһында ҡараңғы урында төнәтергә. 2 көн һайын болғатып торорға, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 30-ар тамсы ҡабул итергә. Төнәтмә бөткәнсе өҙмәйенсә эсергә.

❖ Ангинанан: 1 ҡалаҡ календула сәскәһен һәм шалфей үләнен ваҡлап, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Айырым һауытта 1 ҡалаҡ мәкә үләненә (бедренец) 1 стакан һыу ҡойоп, талғын утта 5 минут ҡайнатырға, һөҙөргә һәм календула төнәтмәһенә ҡушырға. Килеп сыҡҡан төнәтмә менән тамаҡты сайҡарға. Ул 3 этаптан тора. 2 тапҡыр тамаҡты сайҡатҡас, 3-сөһөн йоторға кәрәк. Бынан тыш, көнөнә бер тапҡыр картуф компресы эшләргә. Бының өсөн 3 картуфты ҡабығы менән бешереп, иҙеп, йылы көйөнә етен туҡымаға һалып, тамаҡты урарға һәм мамыҡ шәл бәйләп ҡуйырға. Башҡа йылы башлыҡ кейергә, уранып 2 сәғәт ятырға.

## Артрит

❖ Был сара артрит, артроз, быуындың башҡа сирҙәренән файҙалы. Кисен эмаль кәстрүлдә ярты стакан һырғанаҡ (облепиха) майын йылытырға, 2 ҡалаҡ бал, 1 ҡалаҡ ваҡланған диңгеҙ тоҙо өҫтәргә. Һыҙлаған урындарға был майҙы һөрткәс, өҫтөнә дегәнәк (лопух) япрағы, полиэтилен ҡаплап, йылы яулыҡ менән бәйләргә. Иртән торғас, компресты сисергә һәм тирене таҫтамал менән һөртөргә. Кисен тағы ла ҡабатларға. Һауыҡҡансы ошо ысул менән һыҙлаған урындарҙы дауалағыҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ТОРНА - бәхет ҡошо

**Торнаға ҡарата былдай ҡараштар "Хисам әкиәте"ндә лә сағыла. Ярлы Хисамдың баҫыуын ике йыл рәттән кемдер санға әйләндереп тапай. Өсөнсө йылына бер аҡһаҡалдың кәңәше буйынса бал әсетә лә, баҫыуҙың уртаһына кәритә ҡуйып, әсегән балды шунда ҡоя.**

Икенсе көнөнә килһә, ни күрә: һауыт тирәләй иҫерешкән торналар тәгәрәшеп ята. Хисам торналарҙың аяҡтарын бау менән бәйләп, бауҙың икенсе осон билбауына урап ҡуя һәм ауылға табан алып китә. Юлда торналар иҫенә килә һәм Хисамды ла үҙҙәре менән бергә һауаға күтәреп, осоп та китәләр. Күпмелер осҡандан һуң, торналар бер күлгә төшөргә була. Торналар тубы ергә яҡынайғас, Хисам ағас ботағын эләктереп, бауҙан ысҡына һәм ҡороған ағастың эсенә ҡолап төшә. Был ағастың олоно тулы бал икән. Шул ваҡытта урмансылар килеп, ҡороған ағасты бысып йыға. Ҡолаған ағас эсенән килеп сыҡҡан Хисамды күргәс, ҡурҡыштарынан улар ҡасып китә. Хисам уларҙың арбаһында ҡайтырға сыға. Һуңға ҡалып ҡайтып бара торғас, бер буш торған йортҡа йоҡларға инә. Төн уртаһында тауышҡа уянып китә, баҡтиһәң, ике бур аҡса бүлешә алмай талаша икән. Мейес башынан ташланған кирбескә бурҙар шул тиклем ҡурҡа, хатта аҡсаларын да алырға онотоп, сығып йүгерәләр. Хисам уларҙың аҡсаһын алып, ҡайтыр юлға сыға. Ошо аҡсалар ярҙамында ул унышын йыйып ала, яңы йорт һала. Шулай осраҡлы рәүештә торналарға эләгеп китеп, ул бәхетле йәшәй башлай.

Тикшеренеүселәрҙең иғтибарын Ғафури районының Яңғыҙҡайын ауылындағы бербереһенә ҡаршы осоп барған торналар һүрәте төшөрөлгән тәҙрәләр ҙә йәлеп итә. Был һүрәттәр йортта йәшәүселәрҙе бәлә-ҡазаларҙан, ауырыуҙарҙан һаҡлап тороға тейешлеге шикһеҙ. Былдай ышаныуҙар башҡа халыҡтарҙа ла осрай. Ҡытай, Корея, Япония халҡында үтә ҡыҙыҡлылары осрай. Улар өсөн торна - оҙаҡ йәшәү символы. Ҡытайҙарҙа, мәҫәлән, үлемһеҙ торна тигән төшөнсә бар, 160 йәшкә еткәс, уның тәне - аҡ, 1000 йәштә - йәшел, тағы ла 1000 йылдан һуң ҡараға әйләнә, тиҙәр.

Күп халыҡтарҙың фольклорында торнаға һунар тыйылһа ла, башҡорт эпос-әкиәттәре араһында быны киреһен раҫлағандары ла бар. "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосында Заятүләк торна һәм ҡаҙҙарға һунар итә. Һунарҙан ҡайтып, атаһы Сәмәр хан алдына ҡыр ҡаҙҙарын, торналарҙы һалғас, уның йөҙө яҡтырып китә. Бер әкиәттә шундай күренеш күҙ алдына баҫа: йорт хужаһының ҡатыны ҡамыр баҫа, ә уның эргәһендә йөнө йолҡолған торна түшкәһе ята.

Башҡорт халыҡ мәҡәлдәренең береһе шулай ҙа торна менән һаҡ ҡыланырға саҡыра: "Торна менән дуҫ булһаң, башыңдан ҡайғы китмәҫ". Тимәк, тотем ҡош булараҡ торнаға һунар итеү, уның итен ашау башҡорт халҡында барыбер ҙә тыйылған булған. Был ауыҙ-тел ижады өлгөләрендә лә, биҙәү сәнғәтендә лә асыҡ күренә. Сөнки торна ырыуҙың, араның, ғаиләнең һаҡсыһы һәм яҡлаусыһы булараҡ ҡабул ителгән.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ



# ЗЫЯРАТТАРЫҒЫҘҘЫ КИҢӘЙТЕГЕҘ...

## Эскелек беҙҙе еңә бара, еңә бара түгелме?

**Күптән түгел ауылым зыяратына инеп сығырға тура килде. Ҡәберлек тулған. Күп кенә ауылдаштарым, таныштарым, шап-шаҡтай, емереп донъя көтөрҙәй, балалар үҫтерерҙәй ир-егеттәр ята һыуыҡ ер ҡуйынында. Фотоһүрәттәре, исем-шәрифтәре генә ҡалған ҡәбер таштарында. Ә уларҙың яҡты донъяларҙы ҡалдырыу сәбәбе - эскелек.**

Ни булды һуң был донъяға? Төн урталарына тиклем урамда араҡы, һыра һемереп, һүгенеп ҡыҙҙар, егеттәр йөрөй. Улар 30 йәшкә тиклем спиртлы эсемлектәрҙән һаҡ булырға тейеш ине лә бит. Тик дошмандарҙың һәр төрлө замана телекоммуникациялары аша йәмғиәт ҡоролошон, рухи сәләмәтлекте емерергә өндәгән пропагандаһы ата-әсә, мәктәп тәрбиәһенән көслөрәк булып сыҡты. Сит ил йәмәғәтселеге лә Рәсәй дәүләтен емерергә тырышып ята. Уларҙың маҡсаты билдәле инде. Америка сенаторы У. Даллес 1949 йылда сенатта былай тип сығыш яһай: "... Беҙҙең төп маҡсатыбыҙ - СССР-ҙы тарҡатыу, унда йәшәгән халыҡтарҙы урыҫҡа һөсләтеү, иҡтисадын хәлһеҙләндереү. СССР халыҡтарын тик араҡы, тик эскелек, тәртипһеҙлек ярҙамында ғына еңеп буласаҡ. Ошо осраҡта ғына уларҙы тубыҡтарына теҙләндерә алабыҙ. Һуңынан тубыҡтарын яҙа алмаһындар өсөн барыһын да эшләйәсәкбеҙ". Ә инде АҠШ-тың экс-президенты Б. Клинтон посынан киткән саҡта шулай тип һөйөнсөләне: "... мин СССР-ҙы тарҡатыу бәхетенә ирешә алдым, инде тыныс күңел менән ялға китһәм дә була".

Дошманыңды еңгең килһә, уға араҡы эсер, ти көнсығыш әйтеме. Эйе, һәр төрлө телекоммуникациялар саралары аша формалашып та өлгөрмәгән йәш аңдарҙы рухи яҡтан ғәрипләйҙәр - уны беҙҙең ил ағалары күрмәй. "Тау халыҡтарына һеҙ ғәскәр ебәрмәгеҙ, араҡы ебәрегеҙ..." тигән Пестель тигән декабрист. Шул дөрөҫкә сыға бөгөн.

Илебеҙҙең һәр мөйөшөнә, һәр тарафҡа, һәр беребеҙгә, тыуған һәм хатта тыумаған сабыйға тиклем иҫәпләп, спиртлы эсемлек индереп тултырҙылар. Алкоголле эсемлек эсеүҙе нормаль, ғәҙәти күренеш тип күндерҙеләр. Шараптарҙы сағыу рекламалар аша таратырға рөхсәт ителде. Уның килеменән эшҡыуарҙар икешәр-өсәр ҡатлы өйҙәр һалды, ҡыйбатлы сит ил машиналары һатып алды. Ә хөкүмәт эскелек баҙарынан килгән килемдән пенсия, балалар пособиеһы түләй. Ошо хәл йән өшөткөс парадокс түгелме ни?

Тарихҡа күҙ һалайыҡ әле. 1742 йыл. Павел II яҙған йәшерен доктрина. "Спиртлы эсемлек илдәге халыҡ һанын көйләп тороусы иң көслө сара", тиелгән унда. Романовтарҙың тәүге быуыны хакимлыҡ иткән замандан халыҡҡа эскелек көсләп индерелгән. Хатта эсмәҫкә өндәүселәрҙе төрмәгә япҡандар, язалағандар. Халыҡ аңы формалаша башлағанға тиклем халыҡ һанын, һәр төрлө һуғыштар ойоштороп, көйләп кенә торғандар. Хәҙер иһә халыҡ һанын спиртлы эсемлектәрҙе күпләп етештереп, кибеттәргә таратып, рекламалар ойоштороп, эскелеккә ҡаршы көрәш алып барған кешеләрҙең ауыҙын томалап, төрлө емерткес, ғәҙелһеҙ реформалар үткәреп, йәмғиәтселекте көслө нервылар көсөргәнешендә тотоп көйләү күпкә һөҙөмтәлерәк булып сыҡты. Бөгөн Рәсәйҙә эскелек арҡаһында йыл һайын бер миллиондан артығыраҡ кеше үлеп тора.

Ғөмүмән, иң ҡурҡынысы шунда: атаһы ла, әсәһе лә эскән балаларҙың - 100, икеһенең береһе эскәндәренең - 70, туғандары ғына эскәндәренең 30 проценты эскелеккә тартыла. Был минең генә түгел, ә ғүмер буйы наркоманлыҡ проблемаларын тикшергән ғалимдар фекере. Был аксиома. Табиптарҙа бер әйтем бар: "Эскән ир үҙенең ейәненең бауырын һатып эсер булыр". Сөнки эскән атай спиртлы эсемлектәр ҡулланыуҙы гендар, күҙәнәктәр кимәлендә ғәҙәти хәлгә әүерелдерә һәм уҙ нәҫеленә ген көсһеҙлөгө, быуындан-быуынға күсә торған ауырыуҙар бүләк итә. Икенсе төрлө әйткәндә, эскелектә яралған баланың йүнә, рәте булмай.

Спиртлы эсемлек. Нимә ул? Этанол тип атала ул. Формулаһы - $C_2H_5OH$. Турбореактив самолеттар яғыулығы, химия сәнғәте сеймалы - ер йөҙөндә нимә серей, шул спирт булеп ҡалдыра. Ҡөмөшкә ҡайнатҡанда ла иң тәүҙә 77-78 градуслы этанол бүленә, унан юғарыраҡ температурала изобутил, пропил, амил, метанол спирттары бүленеп сыға. Уларҙан машиналар өсөн тормоз шыйыҡлығы, моторҙар һыуытыр өсөн шыйыҡлыҡ эшләйҙәр. Был спирттар быуға әйләнеү, яныу, шартлау һәләтенә эйә. Органик химияла иң ҡурҡыныс матдәләр иҫәбендә улар. Этанол наркотиктар реестрында теркәлгән. Унда шундай юлдар бар: "Иҫкәрмә: этил спирты тиҙ тоҡана торған тәҫһөҙ шыйыҡлыҡ, үҙенсәлекле еҫле, иң көслө наркотиктар иҫәбенә инә..." Һәм шунда уҡ: "...Наркотиктар араһында алкоголь - иң киң таралғаны. Көсө буйынса опий һәм гашиш унан һуң тора..."

Мәскәүҙә эскелек проблемалары менән шөғөлләнгән бер ғалимға интернет аша һорау бирҙем: "Алкоголде ризыҡ йә дарыу итеп ҡабул итәләр, быға һеҙ нисек ҡарайһығыҙ?"

- Әгәр алкоголь кешегә файҙалы булһа, алкоголь һөйөүселәр 25-30 йылға иртәрәк үлмәҫ ине. Спиртлы эсемлектәр ҡулланыусылар бер ҡасан да һау булмаҫ. Сөнки алкоголь - һыра, шарап, араҡы булһынмы, кеше организмында емергес эш алып бара, уның ресурстарын яндыра, - тигәйне ул. Артабан уның әйткәндәрен руссалап еткереү урынлыраҡ булыр:

- ...алкоголь - это наркотик, наркотический яд нервно-паралитического и нервно-токсического действия. Разве протоплазмический, внутриклеточный яд - алкоголь - может быть продуктом? Хотите жить - не пейте, вам что, в рот наливают?

- Ведь в магазине...

- Дорогие мои, а вот почему они расставлены в магазинах, догадайтесь сами...

Мин аңланым. Алкоголь баҙарында миллиардлап аҡса әйләнә. Уның килеме ярҙамында ил синыфҡа бүленә, пенсия, балалар аҡсаһы түләйҙәр. Хәтерегеҙгә һалып ҡуйығыҙ: араҡы баҙары башҡа ябылмаҫ өсөн асылған. Ул ил хужаларының йәшерен сәйәсәте генә түгел, ә сит илдәрҙең бөйөк Рәсәй дәүләте халыҡтарын үҙҙәренең түбән, ихтыяр көсһеҙ, ялҡау, рухи яҡтан ярлы итеү, кәмһетеү, бөтөрөү сәйәсәте. Эфтаназия ғәләмәте был. Спиртлы эсемлек әҙ генә миҡдарҙа ҡабул ителһә лә, кеше организмы барыбер уны ағыу тип таный һәм тиҙ арала унан ҡотолорға тырыша. Уны тарҡатыу, юҡҡа сығарыу өсөн алкоголдең үҙенән күпкә ағыулыраҡ, көслөрәк һеркә альдегидын, һеркә һелтеһен синтезлай. Алкоголдең кеше организмында һәр төрлө кимәлдә емергес эштәр алып барыуы тураһында табип-ғалимдар томлап-томлап китаптар яҙған. Тик... был өлкәлә асыштар эшләнә торған, ә кешеләр эскелектән күпләп ҡырыла тора.

**(Дауамы 13-сө биттә).**

*✓ Бер нисә карта төҙөлә: улар араһында ике нөсхәлә БАССР-ҙың ентекле этнографик картаһы, башҡорт ырыуҙары картаһы бар. Хеҙмәттәр араһында "Башҡа төрки халыҡтарҙа осрамаған башҡорт һүҙҙәре һүҙлеге" бар.*

*ХӘТЕРКИТАП*

# ТЫУҒАН ЯҠТЫ ӨЙРӘНЕҮ ТАРИХЫ

**Үткән быуаттың 20-30-сы йылдарында тыуған яҡты өйрәнеү дәүләт сәйәсәтененең мәҙәни-мәғариф өлкәһендәге мөһим йүнәлештәренең береһе булған. Яңы ойошторолған совет иленең автономия республикаларында, шул иҫәптән Башҡорт АССР-ында, тыуған яҡты өйрәнеү ойошмалары урындағы фәндәр академияһы функцияһын үтәгән. Шулай уҡ буласаҡ ғилми-тикшеренеү институттарына кадрҙар әҙерләүсе ойошма  ла булған ул.**



Тыуған яҡты өйрәнеү менән ҡыҙыҡһыныу Өфө интеллигенцияһында һәм ҡайһы бер чиновниктарҙа 19-сы быуаттың уртаһында барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, 1864 йылда Өфө губерна музейы асыла. Ә XX быуаттың 20-се йылдарында тыуған яҡты өйрәнеү эше башҡорттар һәм татарҙар араһында киң йәмәғәт хәрәкәтенә әүерелеп китә. Башҡортостанда ике тыуған яҡты өйрәнеү ойошмаһы барлыҡҡа килә: "Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте" һәм "Көньяҡ Уралды өйрәнеү йәмғиәте". 1924 йылда улар берләштерелеп "Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте" булып ҡала. Был ойошма Башҡортостандың Үҙәк башҡарма комитеты ҡарарына ярашлы, Мәғариф халыҡ комиссариаты эргәһендә Стәрлетамаҡ ҡалаһында (ул ваҡыттағы баш ҡалала) 1922 йылдың 16 февралендә "Башҡорттарҙың йәшәйешен, тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнеүсе ғилми йәмғиәт" исеме аҫтында барлыҡҡа килә. Йәмғиәт "башҡорт һәм татарҙарҙың бар ғилми көстәрен" берләштергән. 1922 йылдың авгусында ойошма башҡа учреждениелар менән яңы баш ҡалаға, Өфөгә күсә.

Йәмғиәткә Мәғариф халыҡ комиссариаты эргәһендә 1922 йылдың сентябрендә булдырылған Академик үҙәк идара иткән. Йәмғиәт үҙ сиратында Башҡорт үҙәк музейына (хәҙерге Милли музей) етәкселек иткән, бергәләшеп тыуған яҡты өйрәнеүҙе алып барған һәм икеһе лә 1926 йылға тиклем бер үк йортта урынлашҡан. Ике йыл эсендә тыуған яҡты өйрәнеүселәр бик ҙур һәм мөһим эштәр башҡарыуға өлгәшкән. Ойошторолған көндән алып "Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте" ағзалары даими рәүештә фәнни эштәрен баҫтыра башлай. 18,5 баҫма биттең яртыһы башҡортса, яртыһы рус телендә нәшер ителә. Йәмғиәт башҡорттар һәм башҡорт халҡының тарихы буйынса мәҡәләләр тупланған өс баҫма әҙерләй - "Мәғариф халыҡ комиссариаты эргәһендәге башҡорттарҙың йәшәйешен, тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнеүселәрҙең хеҙмәттәре" тип атала ул. Йәмғиәттең рәйесе Нуриәғзәм Таһировтың башҡорт халҡының рухи ҡомартҡыларын өйрәнеү буйынса ҡулланмалары, "Башҡорт әлифбаһы" китабы донъя күрә. Шулай уҡ Ғабдрахман Фәхретдиновтың "Башҡорттар бөтәме ни?" китабы баҫылып сыға. Бер нисә карта төҙөлә: улар араһында ике нөсхәлә БАССР-ҙың ентекле этнографик картаһы, башҡорт ырыуҙары картаһы бар. Хеҙмәттәр араһында "Башҡа төрки халыҡтарҙа осрамаған башҡорт һүҙҙәре һүҙлеге" бар. Ойошма ағзалары тарафынан тупланған башҡорт мәҡәлдәре йыйынтығы Мәскәүгә нәшергә тапшырыла. Халыҡ ижады буйынса 150 әкиәт, 50 йыр, 500 йомаҡ һәм башҡа материалдар туплана. Башҡорт теле һөйләше буйынса һорауҙар әҙерләнә. Башҡорт Үҙәк музейы китапханаһы тәртипкә килтерелә һәм асыла. Башҡа бихисап эштәр башҡарыла башҡорт зыялылары тарафынан.

Йәмғиәт ағзалары Академик үҙәктең, шулай уҡ Башҡорт телен тормошҡа ашырыу буйынса үҙәк комиссияның эшендә әүҙем ҡатнашҡан - пландар, күрһәтмәләр, ҡулланмалар, программалар төҙөгәндәр. Был эш Советтарҙың Икенсе Бөтә башҡорт съезында рус теле менән бер рәттән башҡорт теленә дәүләт статусы биреү тураһында ҡабул ителгән резолюцияға ярашлы башҡарылған.

"Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте" 1923 йылда Академик үҙәк менән берлектә Ағиҙел йылғаһы буйлап геологик экспедиция ойоштора. Һөҙөмтәләр буйынса докладтар, яҙма отчеттар әҙерләнә. Бар тупланған материал Үҙәк музейға тапшырыла. 1924 йылда эште яҡшыртыу маҡсатында йәмғиәт ағзалары тарихи-археология, этнография, әҙәби-фәлсәфәүи, иҡтисад һәм биология кеүек биш секцияға бүленә. Шулай уҡ заман талаптарына ярашлы, дингә ҡаршы бәләкәй бер секция ла барлыҡҡа килә. Ойошмала мәктәптә тыуған яҡты өйрәнеү программаһын тормошҡа ашырыу һәм урындарҙа тыуған яҡты өйрәнеү йәмғиәттәрен булдырыу буйынса ла эш алып барылған.

Йәмғиәтте күренекле дәүләт эшмәкәрҙәре, башҡорт милли хәрәкәте ағзалары Таһиров Нуриәғзәм менән Мерәҫев Сәғит һәм Бикбулатов Басир ойоштора. Башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү буйынса хеҙмәттәрен генә иҫәпкә алғанда, Таһиров менән Мерәҫовтың был ойошмалағы эшмәкәрлеге айырым өйрәнеүгә лайыҡ.

Йәмғиәткә алыныусылар Эске эштәр халыҡ комиссариаты (НКВД) өсөн автобиографияһын яҙып, адресын, иҡтисад хәлен, сәйәси ҡараштарын күрһәтеп, анкета тултырып, ғариза яҙырға тейеш булған. Йәмғиәт барлыҡҡа килгәндә өс кеше булһа, оҙаҡламай уларҙың һаны унға еткән. 1924 йылда ойошма ағзаларының һаны 45 кешегә етә. Өфөнән - 33, кантондарҙан - 7, Мәскәүҙән- 3 (Ҡаскин, Йомағужин, Воронцов), Ҡаҙандан - 1 (Сәғәҙиев), Ташкенттан - 1 (Диваев) ағза иҫәпләнгән. 1928 йылда был һан 187-гә етә. Шулай итеп, тыуған яҡты өйрәнеүселәр һаны артҡандан-арта барған.

"Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте"нең тәүге йылдарындағы эшмәкәрлеге ошолай башланған. Артабан маҡсаттар арта, мәсьәләләр күбәйә, өҫтәлә барған. Был инде ойошманың уставын ҡабул итеүгә, урындарҙа йәмғиәттәр ойоштороуға, хеҙмәттәр нәшер итеүгә, төрлө экспедицияларға сығыуға, Башҡортостандың күренекле эшмәкәрҙәренең тыуған яҡты өйрәнеү эшендә ҡатнашыуына булышлыҡ иткән. Иң мөһиме, бынан йөҙ йыл элек башҡорт халҡының рухи һәм матди ҡомартҡыларын өйрәнеүгә, туплауға башланғыс һалына, ул эш әле лә дауам иттерелә.

**Үҙәк дәүләт тарих архивы һәм Милли музей фондтары материалдарын файҙаланып,**
**Зилә НИҒМӘТЙӘНОВА әҙерләне.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1682 йылдың майы** - Башҡорттар Һамарға бәреп инә. Күп кешене әсирлеккә ала һәм мал-тыуары менән далаға ҡыуа. Рус ғәскәре уларҙы ҡыуып тотоп, әсирҙәрҙе азат итә, мал-тыуарын ҡайтара.

➔ **1694 йыл** - Амстердамда Н. Витсендың "Төньяҡ һәм Көнсығыш Татария" тигән китабының тәүге баҫмаһы сыға. Унда шул ваҡытҡа күрә Урал тауҙары тураһында иң тулы мәғлүмәттәр бирелә. Иң мөһиме - баҫма әҙәбиәттә был тауҙар башҡорт атамаһы - Урал тип күрһәтелә.

➔ **1695-1696 йылдар** - Башҡорттар Азов походында ҡатнаша.

➔ **1698 йыл** - С.У. Ремезов Урал һәм Себерҙең картаһын төҙөй башлай.

➔ **XVII б. аҙағы** - ХУШ б.тәүге яртыһы Ҡарас сәсән менән Ерәнсә сәсәндең ғүмер һәм ижад йылдары.

➔ **XVII б. аҙағы - XVIII б. урталары** - Аҡай Күсемовтың ғүмер йылдары. 1735 йылдың июнендә Бөтөн башҡорт йыйынында ҡоралды баш күтәреүгә саҡырыу ташлай һәм восстаниеға етәкселек итә.1735 йылда ҡулға алына һәм батша армияһы баш командующийы А.И. Румянцев ставкаһында әсирҙә була. 1738 йылда Санкт-Петербург төрмәһенә күсерелә. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

➔ **XVII б. һуңғы сиреге - 1766 йыл** - Ҡотломөхәмәт (суҡындырылғандан һуң Алексей Иванович) Тевкелевтың йәшәгән йылдары. Башҡорт һәм татарҙар тарафынан ҡарғыштар алған иң яһил палачтарҙың береһе. Үҙенең ҡанһыҙлығы менән рус армияһының генерал-майоры дәрәжәһенә күтәрелә. Ҡаҙағстандың Рус дәүләтенә ҡушылыуына ҡатнашлыҡ итә.

➔ **1699 йыл** - Петр Беренсе Тагил һәм Нейва ярҙары буйында тимер етештереү заводтары төҙөлөшө тураһында указ сығара.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Бөйөк Октябрь революцияһы  тыуҙырған совет социалистик ҡоролошоноң бөйөк еңеүҙәренең береһе булып башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының  социаль һәм рухи иҙеүҙән азат ителеүе, уларҙы дәүләт менән идара итеүгә, коммунистик йәмғиәт төҙөүгә ылыҡтырыу тора. Ғаилә-ырыу мөнәсәбәттәренә бәйле башҡорт-ҡатын ҡыҙы йөҙөн ҡайныһынан ғына түгел, иренең ағаларынан да, ғөмүмән, ирҙәрҙән йәшерергә тейеш була, хатта ҡайныһына исеме менән дә өндәшә алмай. Ҡатын-ҡыҙ ир-аттың юлын ҡыйып сыҡмай, уларҙың береһе лә баҙарға булмай. Ҡатын-ҡыҙ сит ир-ат менән бер табын артында ултырмай. Ислам уларҙы дөйөм  намаҙ уҡыу өсөн мәсеткә индермәгән. Әлеге ваҡытта ҡатын-ҡыҙ - Советтар Союзының ир-егет менән тиң хоҡуҡлы гражданы.

Ватан һуғышына һәм Совет армияһына, оборона сәнәғәтенә халыҡтың эшкә яраҡлы өлөшө алыныуы сәбәпле, эштең ҙур өлөшө башҡа милләт ҡатын-ҡыҙҙары кеүек үк, башҡорт ҡатын-ҡыҙы иңенә төшә. Уларҙы мал аҙбарында ла, һабан артында ла, трактор руле артында ла, комбайн штурвалы артында ла күрергә мөмкин. Колхоздар менән етәкселек итеү орагандарында ла ҡатын-ҡыҙҙың роле арта. Ҡатын-ҡыҙҙың колхоздарҙың производство тормошонда актив ҡатнашыуына ауылдарҙа балалар учреждениелары - ясли, балалар майҙансыҡтары һәм баҡсаларының барлыҡҡа килеүе булышлыҡ итә.

Хәҙерге ваҡытта башҡорт мөхитендә ҡатын-ҡыҙҙы ир-аттан айырыусы бөтөн сиктәр юйылған. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын  барлыҡ яуаплы урындарҙа - колхоз бригадалары бригадиры, ферма мөдирҙәре, колхоз һәм ауыл советы рәйесе, райондарҙың һәм министрлыҡтарҙың административ аппараттары һәм Юғары Совет депутаттары сифатында күрергә мөмкин.

Бай башҡорттар араһында күп ҡатынлылыҡ үҫеше, йәмәғәте вафат булғандан һуң ҡатын-ҡыҙ иренең ҡустыһына йәки башҡа туғанына, ҡайһы берҙә хатта балиғ булмаған туғанына тормошҡа сығырға тейешлеге, 12-13 йәшлек ҡыҙҙарҙы ҡарт кейәүгә биреү күренештәре иҫкелек ҡалдығы булып ҡала.

Дини кәртәләр ҙә емерелә: башҡорттар ауылда ла, ҡалала ла ирекле рәүештә рустар һәм башҡа милләт вәкилдәре менән никахлаша.

Баҫыу эштәре ваҡытында бик күп башҡорт ауылдарында яслиҙар эшләй. Ҙур ауылдарҙа Икенсе донъя һуғышы һөҙөмтәһендә етем ҡалған балалар тәрбиәләнгән балалар йорттары бар. Мотлаҡ дөйөм белем биреү тормошҡа ашырыла (**һүрәт**).





Күптәр урта мәктәпте тамамлағандан һуң юғары уҡыу йорттарында белем алыуын дауам итә (**һүрәт**). Күрше ауылдарҙан йөрөп уҡыусы мәктәп йәшендәге балалар өсөн интернаттар һалынған.

***✓ Беҙҙең етәкселәр тарафынан дөрөҫ милли сәйәсәт атҡарыла. Һәр милләттең үҫешен күҙ уңында тотоп, уның телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап ҡалыуға, мәртәбәһен арттырыуға йүнәлтелгән сәйәсәт ул.***

# ЭШТӘН КЕШЕ

## Йәки Ҡатын-ҡыҙ иңендәге

**Халҡыбыҙҙың милләт ҡотон һаҡлар арҙаҡлы улдары ла, һүҙе алтын, үҙе ялҡын булған ҡатын-ҡыҙҙары ла бихисап. Гүзәл заттарыбыҙ ир-егеттәр менән бер ҡатар халыҡ-ара сәйәси мәсьәләләрҙе хәл итә, ғилми китаптар яҙа, трибуналарҙан ялҡынлы телмәр тота һәм бер үк ваҡытта ғаилә усағын дөрләтеп, иренә тоғро ҡатын булыу, бала бағыу бурыстарын да үтәй. Республикабыҙҙың мәғариф, мәҙәниәт һәм фән өлкәһенә тырышып хеҙмәт иткән, йәш быуынды тәрбиәләүгә, халыҡтар дуҫлығын нығытыуға күп көс һалған арҙаҡлы сәйәсмән, РФ Дәүләт Думаһының Мәҙәниәт буйынса комитет рәйесе урынбаҫары, Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы рәйесе Зөһрә РӘХМӘТУЛЛИНАны ҡылыҡһырлайбыҙ ошо юлдар менән һәм гәзит уҡыусыларыбыҙға уның менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**



***Бына мин русса һөйләшергә ынтылған, русса уҡыған быуын вәкиле булып үҫтем, әммә әле һеҙҙең менән аралашҡанда русса берәй һүҙ ҡыҫтыраммы? Шулай уҡ ҡыҙым, ҡала балаһы, рус һәм инглиз телдәре менән бер рәттән, башҡортсаны ла һәйбәт белә. Мин башҡорт һәм бер телдән дә кәм булмаған телем бар икән, үҙем дә һөйләшәм һәм дауамым булып килгән балаларымды ла өйрәтәм, Алла бирһә, ейән-ейәнсәрҙәрем дә һөйләшәсәк. Был һәр кемдең үҙенә бәйле. Әгәр ҙә милләтебеҙ вәкилдәре туған телен һәм башҡа рухи ҡиммәттәрен һаҡламай икән, ниндәй генә алтын сәйәсәт алып барылмаһын, милләтте һаҡлау ауыр буласаҡ. Бөтөн сәйәсәттең башы ғаиләлә. Ә республикала дәүләт телдәренең береһе булған башҡорт телен өйрәнеүгә килгәндә, ығы-зығыны барыбер ҙә һанаулы ғына кешеләр ҡуптара икәнен, хатта ул кешеләрҙең кемдәр икәнен дә беләбеҙ. Ләкин закон бар икән, уны хөрмәт итергә, уны ғәмәлгә ашырырға кәрәк барыбер ҙә.***

**▶ Зөһрә Йыһанур ҡыҙы, әле күптән түгел генә Һеҙгә тағы бер яуаплы вазифа йөкмәттеләр - Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһының III съезында һеҙҙе Ассамблея Советы рәйесе итеп һайланылар. Һөйләшеүҙе ошо ойошманың эшмәкәрлеген барлауҙан башлайыҡ әле…**

- Белеүебеҙсә, республикабыҙ балға, майға, икмәккә, нефткә генә түгел, ә милләттәргә лә бай. Беҙҙә әлеге көндә үҙ дине, үҙ мәҙәниәте булған 100-ҙән ашыу милләт вәкиле йәшәй. "Күп милләтлелек коэффициенты" тигән төшөнсә бар, шул төшөнсә буйынса республикабыҙ Рәсәй кимәлендә Дағстандан ҡала икенсе урында тора. Ләкин беҙҙең республикала йәшәгән милләттәр барыбер ҙә татыу һәм берҙәм тормош алып барыуҙары менән башҡаларға өлгө булып тора.

Милләттәрҙең татыулығы, уйлап ҡараһаң, үҙенән-үҙе генә барлыҡҡа килмәгән, уны тотороҡло иткән ерлек бар республикала. Берҙән, беҙҙең етәкселәр тарафынан дөрөҫ милли сәйәсәт атҡарыла. Һәр милләттең үҫешен күҙ уңында тотоп, уның телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап ҡалыуға, мәртәбәһен арттырыуға йүнәлтелгән сәйәсәт ул. Башҡортостанда Кавказ, Урта Азия, Балтик буйы халыҡтарын туплаған ҡырҡҡа яҡын милли-мәҙәни ойошма эшләп килә. Ассамблея бына ошо ойошмаларҙы бер ҡорға йыйыусы, төрлө милләт халыҡтары мәҙәниәтен һаҡлаусы, яҡлаусы, ҡурсалаусы ижтимағи-мәҙәни үҙәк ул. Ассамблея сәйәсәт менән шөғөлләнмәй, әммә һәр сәйәсәттең нигеҙендә шул уҡ мәҙәниәт тә ята. Ә беҙҙәге диаспораларҙың мәҙәниәте йыр-бейеүгә генә ҡайтып ҡалмай, ул - йәшәйеш мәсьәләләре лә, һаулыҡ һаҡлау, эш менән тәьмин итеү, балаларҙы баҡсаһына һәм мәктәптәргә урынлаштырыу ҙа ул. Һәм Ассамблея, әлбиттә, ошондай мәсьәләләрҙә лә таяныс булыу бурысын атҡарырға тырыша.

**▶ Эйе, Һеҙ әйткәнсә, республика етәкселәре тарафынан дөрөҫ милли сәйәсәт атҡарыла һәм был хаҡта Рәсәй Президенты Владимир Путиндың да хуплау һүҙҙәрен ишетергә яҙҙы. Әммә беҙҙең республикалағы милләттәр дуҫлығы нигеҙендә аҫаба халыҡтың толерантлығы, йәғни башҡорттоң башҡаларға түҙемле мөнәсәбәте, ихтирамы, дуҫлыҡ баһаһын белеүе кеүек сифаттары сәбәпсе булып тора, тигән фекергә нисек ҡараһығыҙ?**

- Мин тап башҡорт менталитетын өйрәнгән ғалим булараҡ, уның толерантлығын яҡшы беләм. Биш быуат элек беҙҙең башҡорт ерҙәренә ашар икмәк, эсер һыу, һулар һауа эҙләп, Рәсәйҙең төрлө мөйөштәренән халыҡтар ағылған. Башҡорт сит динле, сит рухлы һәм менталитетлы халыҡты үҙ йортона һыйындырып, татыу бер ғаилә итеп туплаған. Тәбиғәт балаһы булған ҡунаҡсыл милләтебеҙ һәр килгәнде Хоҙай ҡунағы итеп ҡабул иткән. Бар булғаны менән бүлешкән, табындаш, ерҙәш иткән. Яйлап уларҙың берҙәм тарихы, берҙәм мәҙәниәте барлыҡҡа килгән. 17-18-се быуаттарҙа беҙҙең крайҙы өйрәнгән тарихсылар, ғалимдар башҡорттоң ғүмерендә беренсе һәм һуңғы тапҡыр күргән кешене лә оло ҡунаҡ итеп хөрмәтләүе тураһында яҙып ҡалдырған.

Ысынлап та, республикалағы милләт-ара татыулыҡтың нигеҙендә аҫаба халыҡтың ихлас ҡунаҡсыллығы, киң күңеллелеге, толерантлығы ла һалынған. Ер шарының төрлө мөйөштәрендә һуғыш уты тоҡанып-һүнеп торған әлеге заманда беҙгә ошо дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен күҙ ҡарашылай һаҡларға кәрәк.

**▶ Әлбиттә, дуҫлыҡ ҡәҙерен белә халҡыбыҙ. Тик ҡайһы саҡта уның был сифатын баһалап етмәү осраҡтары ла булғылай бит. Мәҫәлән, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу мәсьәләһендә тауыш күтәреүселәр табылып тора, тимәк, улар аҫаба халыҡтың законлы мәнфәғәттәрен һанламай булып сығамы? Хәйер, туған телебеҙҙе башҡаларға көсләп тағырға түгел, ә иң тәүҙә үҙебеҙ өйрәнергә тейешбеҙ инде ул…**

- Эйе, дөрөҫ. Бына мин русса һөйләшергә ынтылған, русса уҡыған быуын вәкиле булып үҫтем, әммә әле һеҙҙең менән аралашҡанда русса берәй һүҙ ҡыҫтыраммы? Шулай уҡ ҡыҙым, ҡала балаһы, рус һәм инглиз телдәре менән бер рәттән, башҡортсаны ла һәйбәт белә. Мин башҡорт һәм бер телдән дә кәм булмаған телем бар икән, үҙем дә һөйләшәм һәм дауамым булып килгән балаларымды ла өйрәтәм, Алла бирһә, ейән-ейәнсәрҙәрем дә һөйләшәсәк. Был һәр кемдең үҙенә бәйле. Әгәр ҙә милләтебеҙ вәкилдәре туған телен һәм башҡа рухи ҡиммәттәрен һаҡламай икән, ниндәй генә алтын сәйәсәт алып барылмаһын, милләтте һаҡлау ауыр буласаҡ. Бөтөн сәйәсәттең башы ғаиләлә. Ә республикала дәүләт телдәренең береһе булған башҡорт телен өйрәнеүгә килгәндә, ығы-зығыны барыбер ҙә һанаулы ғына кешеләр ҡуптара икәнен, хатта ул кешеләрҙең кемдәр икәнен дә беләбеҙ. Ләкин закон бар икән, уны хөрмәт итергә, уны ғәмәлгә ашырырға кәрәк барыбер ҙә. Тәү сиратта, башҡа милләт вәкилдәренә башҡорт теленең грамматикаһын һәм нескәлектәрен өйрәтергә түгел, ә һөйләү теле ҡанундарын аңлатырға кәрәк. Килеп сыҡҡан аңлашылмаусылыҡтар тап ана шундай маҡсатлы күҙҙә тотҡан дәреслектәр булмауҙа икәнен ҡат-ҡат тылҡыйбыҙ бит инде...

**▶ Глобаллашеү шауҡымы арыу ғына шаңҡытһа ла, халҡыбыҙ уның эҙемтәләренән бер аҙ арына башланы, буғай. Ә Һеҙ был хаҡта ни уйлайһығыҙ?**

- Эйе, һуңғы йылдарҙа милләтебеҙ үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алырға кәрәклеген аңлай башланы. Бигерәк тә йәштәребеҙ шатландыра: улар беҙҙең быуын кешеләре һымаҡ, әҙергә бәҙергә көтөп ултырмай, үҙ яҙмышын үҙе ҡорорға, үҙ эшен булдырырға тырыша. Улар араһында үҙ туған телен һанлағандар, урамдарҙа иркен итеп башҡортса һөйләшеп йөрөүселәр күбәйә. Милли парадокс тигән төшөнсә бар. Ҙур һынауҙар тыуған һайын, милләттәр үҙҙәренең милли йөҙөн һаҡлап ҡалырға тырыша. Мин мәғариф министры булып эшләгәндә лә, вице-премьер булғанда ла күп төбәктәрҙә булдым, төрлө милләттәр менән аралаштым. Марий Эл, Мордва республикаларында булғанда, мәҫәлән, Башҡортостандағы мариҙар һәм мордваларҙың да үҙ туған телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен белеү буйынса ундағы милләттәштәренән ҡалышмауына инандым. Архангел районының М. Горький исемендәге хужалығында, мәҫәлән, латыштар йәшәй. Уларҙың бер нисә бөртөк балаһын туған телгә уҡытыу өсөн беҙ йыл да Латвиянан уҡытыусы саҡыртабыҙ. Был ғаиләләр үҙ традицияларын нык тота, милли кейемдәрен тегеп кейә, байрамдарын уҙғара. Ошоларҙан сығып, беҙҙең милләт үҙ милләтен генә һаҡлап ҡалмай, башҡаларҙы ла һаҡлауға булышлыҡ итә, тигән ғорур фекер тыуа.

**▶ Һуңғы ваҡытта Дәүләт Думаһында ҡабул ителгән закондар иҫәбендә мәҙәни донъяны яҡлағандары бармы?**

-Һуңғы ҡабул ителгән закондар ысынлап та рухи-әхлаҡи юҫыҡта булды, тиһәк, һис арттырыу булмаҫ. Мәғариф, мәҙәниәт, социаль мәсьәләләр буйынса комитеттар балалыҡты, әсәлекте һәм ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлаусы ҡанундар индерҙе. Бигерәк тә балаларҙың күңел донъяһына, әхлаҡи төшөнсәләргә өҫтөнлөк бирелде. Мәҫәлән, интернет селтәрҙәренән балалар порнографияһын ғәҙәттәге күренеш итеп һүрәтләгән, үҫмерҙәргә үҙ-үҙенә ҡул һалыу ысулдарын аңлатҡан, наркотиктар яһарға өйрәткән сайттар юҡ ителде. Юғиһә, үҫмерлек осороноң һәр төрлө ҡатмарлыҡтарына дусар булған йәштәр, балалар ошондай сайттарҙың ҡапҡанына эләгеү осраҡтары йышайғайны бит. Бейек йорт баштарынан бергәләшеп һикереү, кейенеп-яһанып ятып үлеү, ниндәйҙер йолалар үтәп, теге донъяға юлланыу кеүек ҡот осҡос хәлдәр күҙәтелә башлағайны. Быларҙың барыһына ла ана шул сайттар ҙа сәбәпсе лә инде. Ундай аҡылһыҙлыҡҡа юл ҡуйылырға тейеш түгел, тигән саҡырыуҙар йыш яңғыраны беҙҙең депутаттар араһында.

Мәктәптәрҙә яҡшы уҡығандарға алтын һәм көмөш миҙалдар тапшырыу туҡтатылғайны. Дәүләт Думаһы был йоланы кире ҡайтарҙы. Бала йылдар һуҙымында тырышып белем эстәгән һәм ниндәйҙер уныштар яулаған икән, нинә уның күңелен үҫтермәҫкә? Яҡшы хеҙмәт өсөн эш хаҡы алған кеүек, уҡыусының да тырышлығы тейешенсә баһаланһын, әйҙә.

Мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың берҙәм формала булыуы ла закон тарафынан тәртипкә һалынды. Белем усағына балалар интеллектуаль мөмкинлектәре менән ярышһындар, ә кейем-һалым менән түгел. Кем нимә теләй һәм нимәгә аҡсаһы етә, шуны кейеп уҡыу мәктәптәрҙәге тәртипте лә аҡһатып ебәргәйне.

Дини ғаиләләрҙән булған уҡыусыларҙың форма мәсьәләһе лә ҡаралды. Был тәңгәлдә шуны әйтер инем. Борон-борондан

***✓ Мәҙәниәтле булыу - ул иң тәүҙә эске донъяң, телең күркәм булыу икәнде онотмаһаҡ ине. Юғиһә, әҙәпһеҙ һүҙҙәрҙе телмәр ялғау мөмкинлеге итеп алдылар.***

# ҠУРҠАМЫ?

## ил хәстәре тураһында бер кәлимә

башҡорт халҡы Ислам дине тотҡан һәм, күҙәтеүебеҙсә, яулыҡты уларҙа тик тормошҡа сыҡҡан ҡатын-ҡыҙ ғына ябынған. Йәш ҡыҙҙар сәс үреп, яулыҡһыҙ йөрөгән. Бөгөн беҙҙәге дини кейем көнсығыш мәҙәниәтенә эйәреп китте һәм хатта йәш балаларҙы ла баштан аяҡ сепрәккә урап ҡуйҙылар. Был дөрөҫ түгел, тип иҫәпләйбеҙ беҙ. Шунлыҡтан, дини ғаиләнән булған уҡыусылар ҙа дәүләт мәктәбенә яулыҡһыҙ йөрөйәсәк, йәғни берҙәм мәктәп формаһында буласаҡ.

Йәштәр, балалар араһында, ғөмүмән, йәмғиәттә оятһыҙ, әҙәпһеҙ һүҙҙәр ҡулланыу ҙа тыйылды закон тарафынан. Мәҙәниәтле булыу - ул иң тәүҙә эске донъяң, телең күркәм булыу икәнде онотмаһаҡ ине. Юғиһә, әҙәпһеҙ һүҙҙәрҙе телмәр ялғау мөмкинлеге итеп алдылар. Компьютерҙы, зәңгәр экрандарҙы асма, урамға сыҡма - әҙәпһеҙ телмәр. Был өлкәлә лә тәрбиә эштәре ғаиләнән, балалар баҡсаларынан башланырға тейеш.

Традицион ғаилә ҡиммәттәре лә ҡурсалауға мохтаж. Бала бәләкәйҙән традицион ғаиләлә үҫергә һәм үҙе лә шул йүнәлештә тәрбиә алырға тейеш тип иҫәпләйбеҙ. Ҡайһы бер сит илдәрҙәге кеүек, бер енесле ғаиләләр, традицион булмаған ориентациялар тигән төшөнсәләр беҙҙең халыҡ өсөн ят һәм оят булып ҡалһын ине. Ҡыҙ бала малайҙы, малайҙар ҡыҙҙарҙы хөрмәт итеп өйрәнһен, ваҡыты еткәс, ишен һайлап, бөтөн ғаилә ҡорһон һәм ҡатын кеше - әсәй, ир кеше атай ролен яуаплы башҡарып ғүмер итһен. Былар барыһы ла тәбиғәт закондары һәм уларҙан өҫтөн булыу кешелеккә файҙа килтергәне юҡ әле.

Әле әйтелгәндәр ҡабул ителгән закондарҙа сағылыш тапты. Былар барыһы ла йәш быуынды - балаларҙы һаҡлап ҡалыуға, тәрбиәләүгә ҡоролған. Әгәр балаларҙы икенсе ҡиммәттәр йоғонтоһона бирһәк, уларҙы ла, киләсәкте лә юғалттыҡ, тигән һүҙ. Быға юл ҡуйырға ярамай.

**Халыҡ араһында мәҙәниәт - ул йыр-бейеү, күңел асыу сараһы, тип кенә ҡабул ителә. Һәм уға, ғәҙәттә, етди иғтибар бирелмәй. Ошо ҡарашты нисек үҙгәртергә мөмкин?**

- Мәҙәниәттәге иң яҡлауға мохтаж өлкә ысынында мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре үҙҙәре ул. Бында арҙаҡлы энтузиастар ғына эшләй. Ғәм алдына сығарыр ун биш минутлыҡ байрам сараһы артында ярты айлыҡ тырыш хеҙмәт ятыуын мәҙәниәт өлкәһендә тир түгеүсенән башҡалар белмәйҙер ҙә.

Яңы индерелгән закондар араһында мәҙәниәт өлкәһен ҡайғыртыусылары ла байтаҡ ҡына. Мәҫәлән, меценатлыҡ тураһындағы, урындағы халыҡтың ризалығынан тыш ауыл китапханаларының ябылыуына юл ҡуймау тураһындағы закондар, һәм башҡалар. Иң беренсе сиратта мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы торһа, икенсе урында торлаҡ мәсьәләләре бик етди дәүләт яҡлауына мохтаж. Унан ҡала башҡа социаль яҡлау мәсьәләләре теҙелеп китә. Һәм был ҡуйылған мәсьәләләрҙең барыһы ла тиҙ арала хәл итеүҙе көтә.

Һеҙ телгә алған етди булмаған ҡараш ваҡыт үтеү менән үҙгәрә бара ул. Бөгөн мәҙәниәттең күп өлкәләре беҙҙең халыҡ өсөн дә асылды, йәштәр кино сәнғәте, рәссамлыҡ, этномәҙәниәт, сит илдәр, сит телдәр мәҙәниәте кеүек төрлөлөккә ынтыла. Киләсәктә мәҙәниәт сәйәсәт, иҡтисад кеүек башҡа мөһим өлкәләрелэй тәүгеләр рәтенә баҫасаҡ, тигән өмөтөм бар.

**Депутат булараҡ, кеше яҙмыштары, кеше факторҙары менән эш итеү, улар ағышына ниндәйҙер йоғонто яһауҙан да ҡасып булмайҙыр, шулай бит?**

- Әлбиттә, депутаттың төп эше кешеләр мәнфәғәтенә хеҙмәт итеү, файҙа килтереү. Мин республика кимәлендә әүҙем ҡулаҫала әйләнеүгә күнеккән кеше булараҡ, ҡапыл икенсе даирәгә килеп юлыҡҡас, бер аҙ баҙап ҡалдым. Үҙем үтә традицион тәбиғәтлемен, йәшәйешемде, ҡарашымды, ҡыҙыҡһыныуҙарымды үҙгәртергә яратмайым. Ваҡытында мәғариф министры вазифаһы тәҡдим ителгәс, шулай уҡ ҡаушап ҡалып, атайыма кәңәшкә ҡайтҡайным. Ул, үҙе ғүмере буйы етәксе вазифалар биләгән кеше, тыныс ҡына тыңланы ла: "Эй, ҡыҙым, кеше эштән ҡурҡамы?" - тип тынысландырҙы. Был юлы мин атайымдың ана шул һүҙҙәрен девиз итеп ҡуйҙым: кеше эштән ҡурҡамы! Башҡаларға ла йыш ҡына шулай тип ҡабатлайым.

Әйткәндәй, Дәүләт Думаһында ла бик ҡыҙыҡлы, хөрмәтле, абруйлы кешеләр араһында барып эләктем һәм һынатмаҫҡа тырышам. Быға са үткән хеҙмәт юлым, тәжрибәм, белемем һәм, әлбиттә, башҡорт ҡатындарына хас булғанса сая рухым миңә үҙ һүҙемде һәм урынымды булдырырға ярҙам итә.

Депутатҡа, ғәҙәттә, һуңғы өмөт менән киләләр. Шундай саҡтарҙа ярҙам итеп ебәреү, хәл итеү юлдарын табыу ҡәнәғәтлек тойғоһо уята. Минең өсөн бигерәк тә шундай мәлдәр ҡиммәтле. Күптән түгел бер йәш әсә үлем алдына килеп баҫҡайны. Өмөт өҙөлдө, тигән ерҙән ғүмерен һаҡлап алып ҡалдыҡ. Ҡатындың өс балаһы өсөн шатланғанда күҙ йәштәремә ирек ҡуйҙым. Ошондай ваҡиғалар аҙ түгел. Ҡыҙыҡтары ла булып ҡуя. Бер әбекәй килеп, ҡолаҡ аппараты һораны. Оло кешене мәхрүм итмәйек тип, һорағанын һатып алып бирҙек. Инәй бик ҡыуанып ҡайтып киткәйне, бер йылдан тағы ла килгән. "Ҡыҙым, һин биргән теге аппаратты урланылар ҙа, полицияға мөрәжәғәт иткәйнем, алып килеп, ишек төбөмә һалып киткәндәр, тик сихырлағандарҙыр тип ҡурҡам", - тимәһенме. Уйлай биргәс, уға: "Улай бик шикләнгәс, мәсеткә алып барып өшкөртөгөҙ ҙә, файҙаланығыҙ", - тип кәңәш иткәйнем, риза булды. Бына шулай, был тормошта кемдә ниндәй хәл, тигәндәй, һәр мәсьәләгә айырым ҡараш булдырырға тура килә.

**Һеҙ бер сығышығыҙҙа "XXI быуат Рәсәйҙә Азия быуаты" тигәйнегеҙ. Рәсәйҙең һәм шул иҫәптән Башҡортостандың Азия менән партнерлашыуы беҙгә ниндәй уңыштар һәм уңайлыҡтар вәғәҙә итә?**

- Төптән ҡарағанда, Азия беҙгә рухташ, ҡанундаш илдәр төбәге, тип әйтер инем. Улар үҙҙәренең борондан килгән традициялары, йолалары нигеҙендә йәшәп килә. Уларҙа намыҫлылыҡ, эшсәнлек, сифат кеүек төшөнсәләр алға ҡуйылған. Оҙаҡ йылдар беҙ Европаға эйәрҙек, улар менән әшнәлек иттек, уларға эйәрергә, оҡшарға тырыштыҡ. Һәм нимә килеп сыҡты? Бөгөн беҙ үҙебеҙҙең Европа өсөн, Америка сенаторы Джон Маккейн әйтмешләй, оло бер бензин заправкаһы ғына икәнлегебеҙҙе аңланыҡ. Миҫал өсөн алғанда, Европала аҙыҡ-түлек һәм башҡа тауар өс төркөмдә етештерелә. Беренсеһе, сифатлы һәм экологик таҙа булғаны - үҙҙәренә, икенсеһе, тәүгеһенән бер аҙ ҡайтышыраға - тиңдәш булған башҡа илдәр өсөн, ә иң түбән һәм сифатһыҙы - Рәсәй баҙарына. Нисә йылдар ошондай "дуҫлыҡта" көн иттек тә инде.

Һуңғы йылдарҙа Азия илдәре менән сәйәси, иҡтисади һәм мәҙәни юҫыҡтарҙағы партнерлыҡтар, аралашыуҙар, осрашыуҙар йышайҙы. Был дуҫлыҡ беҙҙең республика өсөн айырыуса файҙалы булыр, тип ышанам. Азия илдәренән өлгө алып, беҙ ҙә үҙебеҙҙең ҡаҙылма байлыҡтарҙы, етештергән продукцияны үҙебеҙ ҙә эш итергә, ҡуллана белергә өйрәнербеҙ, һатыуға сығарырбыҙ, тигән өмөт бар.

**Зөһрә Йыһанур ҡыҙы, һеҙ хеҙмәт юлығыҙҙы ғалимә булараҡ башлаған кеше. Этика, эстетика, әхлаҡ принциптары, милли менталитет, рухи үҫеш темаларын яҡтыртҡан ғилми эштәр, баҫмалар авторы булыуығыҙҙы беләбеҙ. Фәнни үрҙәр яулау менән бер рәттән, студенттарға белем бирҙегеҙ. Ә бөгөн һеҙ, ябай тел менән әйткәндә, чиновник. Уйлап ҡараһаң, былар бөтөнләй икеһе ике төрлө мөхит кеүек. Һеҙ үҙегеҙҙе кем итеп иҫәпләйһегеҙ: ғалимәме, әллә чиновникмы?**

- Мин бәләкәйҙән ғилемде яраттым. Китап уҡыу, нимәнәлер белергә, аңларға, өйрәнергә ынтылышым бик көслө булды. Ғөмүмән, беҙҙең ғаиләләге балаларҙың барыһы ла шулай ине. Ун биш йәшемдән Салауат педагогия училищеһына уҡырға китеп, үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫтым. Ул йәштә минең дә туңдырма ашап, кинолар ҡарап, урам ҡыҙырыу теләгем булғандыр инде ул. Ләкин белемгә ынтылышым барыбер быңдай мауығыуҙарҙан көслөрәк булды. Университетта уҡығанда ла үҙемдең ынтылыштарыма тоғро ҡалдым. Уҡый, белем ала торған ваҡыттың тап ошо мәл генә икәнен нисек төшөнгәнмендер. Һәр хәлдә, бөтә көсөмдө һалып уҡыным, яҙҙым, ижад иттем һәм былар үҙ емештәрен бирмәй ҡалманы.

Һеҙ биргән һорауға ошолай яуаплар инем: ғалим булмаһам, мин бөгөнгө вазифаларымды күтәрерҙәй чиновник була алмаҫ инем. Мин донъяны башта теоретик юҫыҡта өйрәндем һәм бөгөн ғилемемде ғәмәлдә ҡулланам. Тағы ла ғилемһеҙ, белемһеҙ һәм аҡылһыҙ эшләнгән эштең нигеҙе булмайҙыр, тип уйлайым. Һәм ошо инаныуым чиновник вазифаһын да уңышлы атҡарырға булышлыҡ итә.

**Ғалимә булараҡ, Һеҙҙең өсөн дини мәсьәләләр ҙә ят түгел. Бөгөн йәмғиәтебеҙҙә дингә ҡараш үҙгәрә, йәштәр ҙә эркелеп дингә килә. Белеүебеҙсә, башҡорттарҙа Ислам дине ҡанундары милли йолалар менән һәр саҡ йәнәш йәшәгән. Ләкин ҡайһы берәүҙәр ислам дине ҡанундарын ғына өҫтөн ҡуйып, борондан килгән ғөрөф-ғәҙәттәрҙе инҡар итә, халыҡты мәжүсилектә ғәйепләй. Был дөрөҫмө?**

- Башҡорт халҡының һәм, ғөмүмән, бөтә халыҡтарҙың да тиерлек беренсе дине - мәжүсилек. Ул йәшәйешкә лә, тәрбиәгә лә, аңға ла шул ҡәҙәре һеңешкән һәм бөгөн дә Ислам дине ҡанундары менән йәнәшә тотороҡло йәшәп килә. Улай ғына ла түгел, 18-19-сы быуатта йәшәгән крайҙы өйрәнеүселәр "Башҡортостанда мәжүсилек йолалары менән буталған үҙенсәлекле этнографик Ислам дине барлыҡҡа килгән", тигән фекер яҙып ҡалдырған. Минеңсә, мәжүсилектең йәшәргә хоҡуғы бар. Өләсәйҙәр тәрбиәһе беҙҙе "кешегә төртөп күрһәтмә, бармағың ҡорой", "аяғыңды һелтәп ултырма - шайтан бәүелә", "ауыҙыңды асып сәйнәмә, ризыҡтың ҡото китә", "икмәкте ташлама - Хоҙай башыңа һуға", тип өйрәтте. Балаларса бер ҡатлы, әммә үҙенә күрә тәрбиә, тәртипкә өйрәтеү сараһы булған былар. Һыуҙың, тауҙың, урмандың йәне бар тиеүҙәре лә ул күберәк ер-һыуҙы ҡурсалау, яҡлау маҡсатына хеҙмәт итәләр. Борон халыҡ йылғаның балығын тотҡан да, уға рәхмәтен белдергән, урмандың кейеген аулаған да, урман эйәһенә хәйер биргән. Эйәләрҙе асыуландырмау, уларҙың ҡарғышын алмау өсөн артығына һонолмаған, тәләфләмәгән. Был, минеңсә, тәбиғәт менән гармонияла йәшәүгә ынтылыу, уны аңлай һәм хөрмәт итә белеү.

Минең уйлауымса, илебеҙгә, бигерәк тә йәштәрҙең рухи донъяһына янаған "яңы диндәр", төрлө секталар, серле культтар ябырылып килгән бөгөнгө көндә беҙҙең тарихыбыҙға, тәбиғәтебеҙгә ярашлы барлыҡҡа килгән, тәрбиәлелеккә, камиллыҡҡа өндәгән мәжүсилек ҡанундары традицион Ислам талаптары менән бергә йәшәргә, бына ошо ят, балаларыбыҙҙы "зомби"ға әйләндерергә тырышҡан кире инаныстарға ҡаршы торорға тейеш. Һәм рухилыҡҡа алып барған юлда Ислам диненең һәм мәжүсилектең союздаш булыуы тик ыңғай һөҙөмтәләргә генә алып киләсәк.

**Һеҙ республикабыҙҙың күҙ өҫтөндәге ҡаш булған абруйлы, күркәм һәм һылыу ҡатын-ҡыҙҙарының береһе. Эш темпығыҙҙы, йәшәү рәүешегеҙҙе күҙ уңында тотоп, ошондай төҫ-ҡиәфәтте, йәш сырайҙы, сағыулыҡты һаҡлау өсөн ниндәй алымдар ҡулланаһағыҙ икән, тигән уй килә...**

- Иң беренсе, биргән зиннәттәре өсөн тәбиғәткә, икенсе сиратта ата-әсәмә рәхмәтлемен. Ә инде башҡаһына килгәндә, бер әйтемдәгесә, "йәмһеҙ ҡатындар юҡ, ялҡауҙары ғына бар". Беҙҙең йәштә ниндәйҙер кимәлдә үҙ-үҙеңә иғтибар кәрәк. Ҡайһы бер аҙыҡ-түлекте сикләү, биҙәнеп-төҙәнеүгә ваҡыт бүлеү, физик күнегеүҙәрҙән баш тартмау даими тәртипкә инергә тейеш. Мин, мәҫәлән, нисек кенә арыған булһам да, кистәрен ярты сәғәтләп ваҡытымды гимнастикаға бүләм. Эсеү-тартыу хаҡында һүҙ ҙә юҡ. Йәшәй бирә юҡ-барға ҡыҙмаҫҡа, бөтөрөнмәҫкә кәрәк икәнлекте төшөндөм. Сараһыҙ, самаһыҙ борсолоуҙар ҡартайыуға тура юл инде ул. Эске донъямды, эмоцияларымды ыңғай юҫыҡта тоторға тырышам, уйҙарымды таҙартам, барыһына ла яҡшылыҡ теләйем. Барына шөкөр итә белеү төшөнсәһе лә эстән яҡтырта, аса кешене. Берәй уңышһыҙлыҡҡа осраһам, үҙемде:"Оҙаҡ, ялҡытҡыс ҡыштан һуң наҙлы яҙ килә, ҡара болоттарҙы йырып, ҡояш сыға, бөтә проблемалар ҙа үтә ул", - тип йыуатам. Уҡытҡан саҡта студенттарымды ла эстән дә, тыштан да матур булыуға өндәй, өйрәтә инем. Ҡыҙымды ла шулай тәрбиәләнем. "Һин булдыраһың, һин һылыуһың, һин көслөһөң", тип ҡабатлай-ҡабатлай кешелә үҙенә ҡарата һөйөү, хөрмәт тойғолары уятырға була. Ә үҙен ҡарай, тәрбиәләй һәм ярата белгән кеше башҡаларға ла матур, йәш, уңышлы булып күренә.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмә ҡорҙо.**




-Әссәләмү ғәләйкүм! - тип сәләм бирҙе Салауат.

- Үә ғәләйкүм әссәләм! - тип яуапланы ағай һәм йәштәрҙе эскә инергә әйҙәне. - Никах мәсьәләһе менән йөрөйһөгөҙҙөр, моғайын?

- Юҡ, ағай, былай ғына инеп күреп сығайыҡ тигәйнек...

- Былай ғына тип ни, әйҙә, инеп намаҙ ҙа уҡып сығырға мөмкин. Тик, ҡыҙым, һин анау эленеп торған яулыҡты башыңа ябынып ал.

Башҡортса һөйләшкәндәрен аңламай, әллә индермәҫкә итәме икән, тип эстән уйлап торған торған ҡыҙға ағайҙың һүҙҙәрен Салауат тәржемә итеп бирҙе һәм:

- ...Беҙҙе өйләнешергә килгән йәштәр икән, тип уйлаған был ағай, - тип көлдө.

Оялышынан, әллә тулҡынланыуҙан биттәренә алһыулыҡ йүгергән Ай яулыҡ алып ябынғас, тағы ла нығыраҡ мөләйем башҡорт ҡыҙына оҡшай төштө... Аллаһ йортонан шундай ныҡ тәьҫирләнеп сыҡҡан япон ҡыҙының һорауҙары, әлбиттә, күп ине. Ҡыҙ башындағы яулығын сисеп элгәс, Салауат:

- Яулыҡ килешә икән үҙеңә, - тине.

- Ә ни өсөн мосолман ҡатын-ҡыҙҙары сәстәрен ҡаплап йөрөргә тейеш? - тип һораны Ай тротуар буйлап бер аҙ бара биргәс.

- Был һорауыңа яуапты төптәнерәк эҙләп табып бирергә тура килер, - тине егет. Нисегерәк башларға икән, тип бер аҙ уйланып алғас, дауам итте. - Ислам дине ир менән ҡатындың никахһыҙ бәйләнешен ҡәтғи тыя...

Егеттең һүҙҙе көтөлмәгән юҫыҡҡа алып китеүенә ғәжәпләнгән ҡыҙ иғтибарын уға тағы ла нығыраҡ йүнәлтте. "Нишләп ул тирәгә төшөп китте был егет?" тип уйлай биреп тә ҡуйҙы, әммә әҙәпле ҡыҙ булараҡ, уны бүлдермәне.

- Никахһыҙ бәйләнеште, йәғни зина ҡылыуҙы ғына түгел, ә уға этәреүсе шарттарҙы ла булдырмауҙы талап итә беҙҙең дин...

"Зина ҡылыу-ҡылмауҙа яулыҡтың ни ҡағылышы бар икән?" тип уйланы ҡыҙ тағы. Ә Салауат әкрен генә һөйләүен дауам итте.

- Ир-егеттәрҙән айырмалы, ҡатын-ҡыҙҙарҙа ҡапма-ҡаршы енес вәкилдәрен, йәғни, ир-атты йәлеп итә, уларҙың "күҙҙәрен ҡыҙҙыра" торған гүзәл сифаттар бихисап. Аллаһы Тәғәлә уларҙы шулай итеп яралтҡан. Шәриғәт талабы буйынса, ҡатын-ҡыҙға йөҙө, түштәре, буй-һындары, бот-янбаштар һымаҡ шундай матурлыҡтары менән бер рәттән, хатта уларҙың сәс толомон да үҙенең хәләл ефетенән башҡаларға күрһәтеү тыйыла. Диндең был талабы - әҙәм балаһын шундай оло гонаһтарҙың береһенән ҡурсалап алып ҡалыуҙың бер юлы. Ҡатын-ҡыҙҙың тәне ир-егеттәр өсөн һәр саҡ сер булырға тейеш...

- Ҡалай ҡыҙыҡ, - тине Ай уйланып. - Ә мин сепрәккә төрөнөп йөрөгән мосолман ҡатындарына ҡарап, уларҙы һәр саҡ ҡыҙғана инем. Ҡаты бәғерле ирҙәре уларҙы шулай кейенергә мәжбүр итәләрҙер, тип уйлай инем...

- Юҡ, әлбиттә, киреһенсә, был - Ислам динендәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың Аллаһы тарафынан бирелгән хоҡуғы! Хатта бына ошо хоҡуҡтарын яҡлап көрәшергә әҙер улар...

Ай ошо һөйләшеүҙән үҙе өсөн ниндәйҙер оло яңылыҡ асҡандай булды. Башҡорт егете менән булған ошо ҡыҫҡа ғына әңгәмә япон ҡыҙы өсөн ысынлап та бик ҙур асыш ине. Салауат бүләк иткән урыҫ телендәге "Шәриғәт закондары", "Пәйғәмбәрҙәр тарихы", "Ислам дине йолалары" китаптарын буш ваҡыттарында уҡыштыра ла башланы.

...Осрашыуға был юлы башына яулыҡ бәйләп килгән ҡыҙҙы күргәс, "Күптән түгел ваннанан сыҡҡан ахырыһы", тип уйланы Салауат. Ғәҙәттәгесә, парк буйлап бер килке һөйләшеп йөрөгәс:

- Ә һин, Ай, үҙең ниндәй дин тотаһың? Әллә бөтөнләйгә, элекке беҙҙекеләр әйтмешләй, коммунисмы? - тип шаяртып көлдө Салауат бер көн.

Һуңғы осорҙа дин хаҡында һүҙ йөрөтә башлау менән нисектер етди төҫ ала торған булып китте Ай.

- Ошоғаса бер дин менән дә яҡшылап ҡыҙыҡһынғаным булманы. Белеүемсә, беҙҙең халыҡ күбеһенсә синтоизм, буддизмды тота. Христиандар ни бары ике процент. Тағы күп кенә кешеләр синкретизм яҡлы. Улары - һәр бер динДән бер нисә йола алып, шуны тотоусылар.

Бала саҡтан дингә иғтибар бирмәгәс, мин был хаҡта әллә ни белмәйем. Шуғамылыр, Ислам дине тураһында хатта беҙҙә тотолған диндәргә ҡарағанда күберәк тә белә башлаған һымаҡ тоям үҙемде...

- Китаптар оҡшанымы?

- Эйе. Ә миңә иң оҡшағаны нимә тип уйлайһың?.

- ...

- Һеҙҙең динегеҙҙә миңә иң оҡшағаны - бөтә ғаләмдәрҙе барлыҡҡа килтереүсе һәм уларҙы тотоп тороусыға - тик бер Аллаһҡа ғына табыныу.

- Бик күптәр ғүмере буйына аңлай алмаған нәмәнең тап елегенә генә төшөнгәнһең бит, Ай! Был, ысынлап та, беҙҙең диндең нигеҙе!..

Ошо көндән алып ҡыҙ һәр ерҙә башына яулыҡ ябынған килеш кенә күренә башланы. Ни өсөн шулай икәнен берәү ҙә белмәй ине... Тик Салауат ҡына бының сәбәбен һиҙемләне.

- Ни өсөн яулыҡ ябынып йөрөргә булдың әле һин? - тип һораны бер көн егет шулай ҙа.

- Сәс толомдарымды тик үҙемдең буласаҡ хәләл ефетемә генә күрһәтәсәкмен, - тип уйынлы-ысынлы яуап бирҙе ҡыҙ. - Миңә Ислам диненең күп кенә яҡтары оҡшай башланы. Шул иҫәптән, ҡатын-ҡыҙҙың башҡалар өсөн сер булыуы.

Буласаҡ хәләл ефете... Бындай һылыу ҡыҙҙың хәләл ефете булырға бик күптәр теләр ине лә. Һап-һау буйҙаҡ йәш егеттең уйҙары ошо юҫыҡҡа йүнәлеүе бик тә тәбиғи ине.

* * *

Бер көн Салауатты дуҫы Айбулат ҡунаҡҡа саҡырҙы. Ҡорбан ашына.

- ...Мөхәббәтеңде лә алып кил, - тип шаяртты дуҫы. - Холостяк ашынан да ялҡып киткәнһеңдер инде...

- Эйе, Айбулат, беҙҙең йәштә буйҙаҡ йөрөү килешкән эш түгел, - тип уфтанды Салауат.

- Ә Мөхәббәтең менән һинең арала әле мөхәббәт күпере һалынманымы?

- Был хаҡта уйлағаным да юҡсы... Японка бит ул!

- Японка булһа ни...

- Сит милләт ҡыҙҙары менән никахҡа инеү хаҡында уйлап ҡарағаным да булманы бит әле. Икенсенән, беҙ һинең менән үлтерелмәгән айыуҙың тиреһен тунарға йыйынған кешеләр һымаҡ һөйләшә башланыҡ. Ай, әлбиттә, бик һылыу, аҡыллы ҡыҙ. Тик уға минең буйым етмәҫ һымаҡ тойола. Уның үҙенең тормош пландары ла барҙыр.

- Бына шуның өсөн дә, дуҫ, Мәрйәм менән икебеҙ һеҙҙе бөгөнгө мәжлескә саҡырырға булдыҡ. Мәрйәм һөнәре буйынса психолог та булараҡ, һинең Айыңды "тоғро юлға" йүнәлтергә сәбәп була алыр, тип уйлайым. Үҙең беләһең бит уның ниндәй ныҡышмал икәнлеген.

Айбулат менән Мәрйәм дүрт йыл элек кенә таныштылар. Төнгө дежурҙа булған йәш хирург ашығыс ярҙам машинаһы менән килтерелгән университет талибәһенә һуҡыр эсәккә операция яһағайны. Операциянан шәбәйеп килгән зәңгәр күҙле пациенткаһына үлеп ғашиҡ булмаһынмы! Мәрйәм дә ҡыйыу хирург егетте оҡшатты, буғай. Дауахананан сығырҙан алда Айбулаттың һорауы буйынса кеҫә телефонының номерын да һис ялындырып тормайынса бирҙе. Мәрйәмдең был ҡылығы, әлбиттә, артабан да егет менән элемтә тоторға ризалығын белдерә ине. Һәр саҡ хиджап кейеп йөрөгән ҡыҙ тәүҙәрәк сәйер һымаҡ тойолһа ла, быға иғтибар итмәҫкә тырышты Айбулат. Психология факультетының аҙаҡҡы курсында уҡыған был ҡыҙҙы иң күбендә ике-өс мәртәбә саҡырғандыр осрашыуға. Әммә һәр осрашыуға Мәрйәм дуҫ ҡыҙын эйәртеп килә торған булды. Ҡыҙ тәүҙән үк "Егет менән ҡыҙҙың аулаҡта осрашыуы - харам" тип әйткәйне. "Открой личико, Гюльчатай", тип алдараҡ бер-икене шаяртып та маташҡан "батыр егет" хатта уның ҡулына ҡағылырға ла баҙнат итмәне, әммә оҙаҡҡа һуҙмаҫтан, ҡыҙға өйләнешергә тәҡдим яһаны. Мәрйәм тәҡдимде кире ҡаҡманы. Мосолмандарса никах уҡытып, ыҡсым ғына туй яһап, йәшәп алды ла киттеләр.

"Ни өсөн һәр саҡ сепрәккә уранып йөрөүҙе хуп күрәһең?" тип хәләл ефетенән һорарға баҙнат итте өйләнешкәндең иртәгәнә Айбулат. "Башҡаларға күрһәтергә ярамаған тән өлөштәремде тик һиңә, буласаҡ хәләл ефетемә генә асыу бәхетенә ирешеүем менән бәхетлемен", тигән яуапты ишеткән Айбулатҡа Мәрйәме донъяла иң ҡәҙерле кешеһенә әйләнде. Бер йылға яҡын йәшәгәс, улдары тыуҙы. Ильяс тип исем ҡуштылар уға.

Ә аш-һыу әҙерләүгә килгәндә, Мәрйәменең донъяла тиңе юҡ. Бәләкәйҙән ауылда үҫкән был башҡорт ҡыҙы бишбармаҡты шундай тәмле итеп бешерә, уны ашағанда биш бармағың менән ҡушып телеңде йотоп ебәрмәҫмен тимә! Хатта ҡорот, эремсек яһау серҙәрен дә яҡшы белә ул. Ауылға ҡәйнәләренә ҡайтҡанда йәйге ихаталағы ҡаҙан тирәһенән китешмәй. Айбулаттың әсәһе Рәйфә апай эшһөйәр килененә ҡарап, ҡыуанып бөтә алмай. Дин өлкәһендә белемен һәр саҡ үҫтереү өҫтөндә эшләгән Мәрйәм хәҙер инде үҙе уҡытып йөрөгән университетта студенттарына ла шул хәҡиҡәтте еткерергә тырыша. Хәләл ефетен дә һәр саҡ иманға өндәй ул. Айбулат әлегә намаҙға баҫмаған, әммә бисмиллаһһыҙ операцияға тотонмай...

Бына шундай үҙенсәлекле дуҫтары бар Салауаттың. Бөгөн Ҡорбан ашына Айҙы ла үҙе менән бергә алып барасаҡ ул, иншаллаһ. Саҡырған хәләл мәжлестән баш тартыу ярамай...

Ҡорбан ашына башҡа кешеләр саҡырылмағайны. Хатта Айбулаттың яҡын ғына ауылда йәшәгән ата-әсәһенә лә өндәшмәгәндәр. Мәрйәм өҫтәлгә ни генә әҙерләмәгән! Тәмле бишбармаҡ менән башта ҡыҫтап-ҡыҫтап һыйланы ул ҡунаҡтарын. Унан ҡоротлап-борослап, һурпа бирҙе. Һәр төрлө тәм-том менән сәй эсеп алғас, Айбулат Салауаттың доға уҡыуын һораны. Моңло вәзенгә һалып, Салауат бер-нисә ҡыҫҡа сүрә уҡыны. Унан, Айбулаттарҙың ошо салған ҡорбандарының әжер-сауаптарын биреүен һорап, Аллаһы Тәғәләгә доға ҡылдылар. Барлыҡ уҡылған доғаларҙы Салауат Айға тәржемә итеп, аңлатып барырға тырышты.

Бындай мәжлестә Ай, әлбиттә, ғүмерендә тәүге тапҡыр ине. Доға ҡылынып бөткәс, Мәрйәм менән Ай аш бүлмәһенә сығып киттеләр.

- Башҡорттарҙың шундай ҡунаҡсыл халыҡ икәнен китаптан уҡығаным ғына бар ине, бөгөн үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, - тип ысын күңелдән ҡыуанып ихлас һөйләне Ай. - Ә ҡунаҡтарға ҡыҫтап ашатыу тигән нәмәне бер ҡасан да осратҡаным булманы. Уныһы ла йолаларығыҙҙың бер төрөләр инде?..

- Эйе, - тине Мәрйәм, -шундай йола бар башҡорттарҙа. Ҡунаҡ әҙәп һаҡлап, әллә ни ашамай, ас ҡайтып китһә, саҡырыусыға оят була бит. Борон хатта, кем-кемде яҡшыраҡ хөрмәт итә, һыйлай, тигән сәм дә булған. Ниндәй милләт кешеһе булыуға ҡарамаҫтан, ситтән килгәндәрҙе лә һыйхөрмәт менән ҡаршы алғандар. Ә хәмер-маҙар эсереү бөтөнләйгә булмаған.

- Ниндәй гүзәл һеҙҙең йолаларығыҙ, - тине Ай.

- Иғтибар итһәң, беҙҙең ҡалаларҙа ниндәй генә милләт кешеһен күрмәҫһең. Ә иң мөһиме - улар барыһы ла үҙҙәрен бында үҙ өйөндәге һымаҡ хис итә.Боронғо ата-бабаларыбыҙ үтә ҡунаҡсыллығы арҡаһында ҡомһоҙ кешеләрҙән зыян да күргеләгән. Күпләп килеп, алдаштырып, бәғзе ваҡытта хатта көс менән ҡурҡытып, ерҙәрен, урмандарын тартып алғылаған осраҡтар ҙа күп булған...

- Са-ла-уат Юлаев осоро?

- Эйе, - тине Мәрйәм. - Ул батыр хаҡында ишеткәнең бармы әллә?

- Әлбиттә. Уҡығаным да бар. Тағы Салауат миңә уның тураһында күп һөйләне. Мәрйәм, минең яҙып ятҡан диссертациямдың бер бүлеге - һеҙҙең динегеҙ хаҡында. Миңә белгәндәреңде һөйлә әле...

- Дин хаҡында бер ҡасан да барыһын да тулыһынса белеп бөтөү һәм һөйләп биреү мөмкин түгел, әммә хәлемдән килгәнсе тырышырмын. Һорауҙарың булған һайын миңә шылтырат. Хәйер, Салауаттың да дин өлкәһендә белеме яҡшы ғына.

- Уның менән осрашҡан һайын үҙемде уңайһыҙ тойған һымаҡмын. Тәүге осорҙа улай булмай торғайны... Әллә ни булды... Хатта унан ояла башлаған һымаҡмынсы...

- Беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарҙың ир-егеттәрҙән оялыуы - ифрат та һәйбәт сифаттарҙан һанала. Был хаҡта Бәйғәмбәребеҙҙең хәҙисе лә бар... Бына нимә, Ай, - тине Мәрйәм бер бик мөһим нәмә әйтергә йыйынғандай, - бөгөн һеҙҙе үҙебеҙгә саҡырыуҙың төп маҡсаттарының береһе - һиңә лә, Салауатҡа ла үтә лә мөһим бер кәңәш биреү. Айбулат менән беҙ уйлаштыҡ-уйлаштыҡ та, бына шундай ҡарарға килдек.

- Ниндәй мөһим кәңәш ул? - тип һораны ниҙер һиҙенә башлаған япон ҡыҙы.

- Салауат менән һеҙҙең сәстәрегеҙҙе бәйләүгә ирешһәк, беҙ үҙебеҙҙең дуҫлыҡ бурысын үтәгән итеп тойор инек.

- Быныһы ла башҡорттарҙың йолаһымы? - ярым шаяртып һораны Ай.

- Шулай тип ҡабул ит, - тип йылмайҙы Мәрйәм. - Йәштәрҙе бер-беренә димләү, ысынлап та, беҙҙең борондан килгән иң матур йолаларҙың береһе. Тик быны уларҙы көсләп ҡушыу менән бутарға һис ярамай. Әйткәндәй, бына шундай никахтар хәҙерге "мөхәббәт буйынса" ҡоролғандарынан бер ҙә насарыраҡ түгел, киреһенсә, борон беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың никахтары ныҡлы булған. Айырылышыу тигән нәмәләр бөтөнләйгә булмаған тиерлек...

**(Дауамы бар).**

КИТАБЕННАС

**Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын билдәләгән көндәрҙә үҙәк гәзиттәрҙең береһендә концлагерҙағы 4-5 йәшлек кенә белорус ҡыҙыҡайының 1944 йылда тотҡондарҙы азат иткән мәлдә төшөрөп алынған фотоһы баҫылды. Туңып үлмәһен, тип кемдер уның башына мәйеттән һалдырып алынған күлдәкте ураған: күҙҙәре генә күренә. Ҡыҙыҡай объективҡа ҡарап йылмая, әйтерһең дә, донъяла һуғыш та, аслыҡ та, үлем дә юҡ... Ҡырҡ беренсе йылда ауылдарына фашист баҫып ингәс, үҙенә төбәлгән автоматтан уны ана шул йылмайыуы ҡотҡара: шул тиклем дә эскерһеҙ, ихлас сабый йылмайыуы немец һалдаты йөрәген дә иретә - автоматын ситкә бороп, ул да йылмая һәм түш кеҫәһенән ирен гармунын сығарып, уйнап ебәрә лә ары китә...**

# ХӘТЕРГӘ УЙЫЛҒАНДАР...

## бөгөнгөләр өсөн тере шаһит



Һуғыш йылдары балаһының хәтеренә уйылып ҡалған бер генә кадр был. Ә күпме булған ул үлем менән йәшәү араһында өлкәндәр менән бергә ҡыйышҡан бала күнеләндә! Сабыйҙарҙың күпселеге әйләнә-тирәгә үҙҙәренең тап ана шул эскерһеҙ, яҡты донъяһы аша ҡарай алғанға күрә лә иҫән ҡалғандыр. Һуғышта ҡатнашҡан ветерандарыбыҙ аҙ ҡалды, тибеҙ. Улар түгел, бала саҡтары ана шул афәт йылдарына тап килгән кешеләр быуыны ла һирәгәйә бара. Улар кисергәндә Хоҙай инде бер ваҡытта ла күрһәтмәһен, ләкин шул уҡ ваҡытта киләсәк быуындар XX быуаттың иң ҙур фажиғәһе хаҡында ниндәйҙер сит сығанаҡтарҙан түгел, ә арабыҙҙа бөгөн йәшәп ятҡан тере шаһиттар ауыҙынан ишетеп белергә тейеш.

Һуғыштың үҙе хаҡында, әлбиттә, күп яҙылған, кинолар төшөрөлгән, ә бына тылдағы тормош хаҡында өҙөк-йыртыҡ ҡына ишетеп беләбеҙ. Йәшерәктәр иһә ул йылдарҙы күҙ алдына ла килтерә алмай. Ҡартатай-өләсәйҙәребеҙҙән, өлкәнерәк быуын иһә ата-әсәләренән был хаҡта йүнле-башлы һорашып-һөйләтеп ҡалмаған. Ғәфү иткеһеҙ битарафлыҡ был. Ә бит маңҡортлоҡ ана шунан башлана ла... Бәхеткә күрә, һуң булмаҫ борон был хатаны төҙәтеүселәр бар әлдә лә - шул ғына бер аҙ күнелде йыуандыра. Кемдәр улар, тиһегеҙме? Илебеҙ тарихы - тимәк, туған тамырҙарына битараф булмаған илһөйәрҙәр, тарихсылар, яҙыусылар, зәәрмәндәр. Ана шуларҙың береһе - билдәле яҙыусы һәм журналист Зәһрә Ҡотлогилдина. Әле генә Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына бағышлап, 70 тыл ветераны иҫтәлеген баҫтырып сығарыу ниәте менән янып йөрөгәйне ул, асылда, хәтирәләре менән уртаҡлашыусы геройҙары һаны 70-тән дә ашып киткән. Һуғыш йылдарында 3 йәштән 18 йәшкәсә булған балалар һәм үсмерҙәрҙең баштарынан үткәндәрҙе яҙып алып, З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә "Һуғыш яралаған бала саҡ" тигән йыйынтығын быйыл 9 май алдынан ғына баҫтырып та сығарҙы.

Зәһрә Ҡотлогилдинаның был ошо тематикаға тәүге китабы түгел. 2010 йылда Еңеүҙең 65 йыллығына бағышлап, 65 тыл ветеранының иҫтәлектәлектәренән тупланған "Һуғыш балалары - тарих яралары"тигән китабы сыҡҡайны. Ул уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы, сөнки ошоға тиклем Башҡортостанда бындай йыйынтыҡтың донъя күргәне юҡ ине. Китап авторы шул мәлдәрҙә был изге һәм кәрәкле эште дауам итеүҙе һораған бик күп хаттар алды. Шулай итеп, яҙыусы, журналист, ваҡыты тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, тағы ла ошо тынғыһыҙ эҙәрмәнлек эшмәкәрлегенә тотона. Ҡайҙаҙа ғына булмай, кемдәр менән генә осрашмай яҙыусы! Алдына алған ниәтен намыҫ менән башҡарып сығыу - ғүмүмән, һәр ваҡытта ла Зәһрә Сәлимйән ҡыҙының төп тормош принцибы булып ҡала. Был юлы ла ул йөҙгә яҡын респондентының өмөтөн, ышанысын аҡлап сыҡты. Был китабын яҙыусы һуғыш башланғанда ун өс кенә йәшлек үсмер булып, ун биш йәштән тракторҙа эшләгән, аҙаҡ шул ауыр йылдарҙа һалҡын тейҙереп, ике тиҫтә йылдан ашыу атлап йөрөүҙән мәхрүм ҡалып, түшәктә ятҡан әсәһе Миңһылыу Шәрифйән ҡыҙы менән илде дошмандан һаҡлап, фронтта алышҡан, яраланып, госпиталдә ятҡанда өс ҡалын дәфтәр шиғырҙар яҙып ҡалдырған, аҙаҡ һуғыш яраларынан мандый алмай, йәшләй генә яҡты донъянан киткән атаһы Сәлимйән Ноғман улы Ҡотлогилдиндарҙың изге рухтарына бағышлаған.

Китаптағы хәтирәләрҙең ҡайһыныһын асып уҡыһаң да, бер үк юлдар: аслыҡ-яланғаслыҡ, фронттан килгән "ҡара" ҡағыҙҙар хәсрәте, етемлек, үлем... Бына, мәҫәлән, Баймаҡ районы Ҡолсора ауылынан 1931 йылғы (һуғыш башланғанда уға 10 йәш була) Мәстүрә Ҡарасуринаның һөйләгәндәре: "1929-1931 йылғы ҡыҙҙарҙы утын эшенә ебәрҙеләр. Эткол леспромхозында урман ҡырҡыуҙа өс йыл буйы эшләнек. Аяҡта - сабата, барак тәҙрәләре ярыҡ, йоҡлағанда башты буран күмә. Норманды тултырмаһаң(көнөнә - өс кубометр), 600 урынына 300 грамм ғына икмәк эләгә...." Бына шундай балаларҙың артабанғы яҙмышы: кемдәр булып үҫеп етеүе, нисек итеп донъя көтөүе барыбыҙға ла мәғлүм инде, сөнки улар - беҙҙең бөгөнгөбөҙ - атай-әсәйҙәребеҙ, ҡартатай-өләсәйҙәребеҙ. Һуғыш ауырлыҡтарын күреп, үҙ иңдәрендә тыл үҫкәнгә күрә лә улар башҡаһына бирешмәне, сәмләнеп донъя көттө, илде аяҡҡа баҫтырышты, балалар үстерҙе. Беҙҙең яныбыҙҙа, беҙҙең менән бергә йәшәнеләр һәм әле лә йәшәйҙәр. Минниса Баһуманованың: "Тыуған илгә сикһеҙ бирелгәнлек, оптимизм, рух һәм ихтыяр көсөнөң ныҡлығы, үҙҙәрендә яҙмыш һынауына ҡаршы торорлоҡ көс тапҡан тыл ветерандары менән һуғыш осоро балалары бөгөнгө йәштәр өсөн тере өлгө ул," тигән юғары баһаға ҡушылмау мөмкин түгел. Уларҙың тиңһеҙ ҡаһарманлығын китап юлдарына төшөрөп, тарихта ҡалырлыҡ хеҙмәт күрһәткән яҙыусы Зәһрә Ҡотлогилдинаға бөгөнгө һәм киләсәк быуындарҙың рәхмәте яуһын.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ҮҘЕБЕҘ ХАҠЫНДА ҮҘЕБЕҘ

**Бөгөнгө ғәйәт тиҙ үҙгәреп торған, нанотехнологиялар, мәғлүмәт саралары үҫешкән шаулы заманда нәҡ журналист һөнәренең мөһимлеге, файҙаһы асыҡ күренә. Йәғни ул уҡыусыға, тамашасыға төрлө яҡлап ағылған мәғлүмәтте үҙләштерергә, дөрөҫ ҡарар ҡабул итергә ярҙам итә. Боронғо һөнәр эйәһе, йәмғиәттең социаль институты булып һаналған журналистикаға бына шундай оло бурыс йөкмәтелгән. Республикабыҙҙа журналистарҙың ижади эшмәкәрлеген дәртләндереү маҡсатында Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы булдырыу уларҙың ошо бурыстарҙы нисек үтәүен асыҡлау мөмкинлеге бирә лә инде. Лайыҡлы кандидаттар билдәләгәндә ҡәләм оҫталарының эшмәкәрлеген байҡау яһау төп баһаны ҡуйырға булышлыҡ итә. Ошо йәһәттән Белорет районының "Урал" гәзите хәбәрсеһе, республика баҫмаларының даими авторы, "Юлдаш" радиоһының штаттан тыш хәбәрсеһе Эльза Әнәс ҡыҙы Мөхәмәҙиеваның һөнәри оҫталығына баһа биреүем уның был абруйлы премияға лайыҡлы кандидат булыуын күрһәтә.**

# ҺҮҘ ҠӨҘРӘТЕН...

## яҙмаһында тоҡандыра белә

Эльза Мөхәмәҙиеваның "Киске Өфө", "Йәшлек", "Башҡортостан" гәзиттәрендә баҫылған мәҡәләләрен даими күҙәтеп барам. Иғтибарымды уның бар темаларҙы ла оҫта яҡтыртыуы, төрлө ҡатлам уҡыусылар аудиторияны менән иркен эш итә белеүе, киң фәлсәфәүи фекерле, тәрән ҡарашлы булыуы йәлеп итте. Уның журналистикаға мәғлүмәт биреү сығанағы итеп кенә ҡарамауы, тормоштағы мөһим мәсьәләләрҙә граждандарға үҙ йүнәлешен табырға, маҡсаттарын билдәләргә ярҙам итеүе лә иғтибарымдан ситтә ҡалманы. Яҙғандарына төплө анализ яһай, етешһеҙлектәрҙе, проблемаларҙы асыҡ билдәләп, унан сығыу юлдарын да күрһәтә белә. Ә инде өлгө итеп ҡуйырҙай ыңғай яҡтарҙы, был эште башҡалар ҙа күтәреп алырҙай итеп, сәмләндереп, дәртләндереп яҙа белә. Гәзит битендә ауыл тормошон бар матурлығы, проблемалары менән сағылдыра алыуы, милли әҙәбиәтебеҙҙең, мәҙәниәтебеҙҙең баһаһын күтәреүе, телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы ололауы, йәш быуында илһөйәрлек, телһөйәрлек тойғолары тәрбиәләүе менән дә Эльза һайлаған һөнәре буйынса үҙ бурысын тулыһынса үтәй, тиергә була.

Ҡәләме менән уйһыҙҙарҙа - уй, ғәмһеҙҙәрҙә - ғәм, дәртһеҙҙәрҙә дәрт уята алыуы Эльзаның мәҡәләләрен тағы ла уҡымлыраҡ, ҡыҙыҡлыраҡ итә. Уның "Киске Өфө" гәзитендә ҡорған диалогтарынан, бөгөнгө йәмғиәтте сағылдырған мәҡәләләрендә социаль-иктисади, көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәреүенән сығып, уның аналитик журналист булыуын аңлайһың. Фекерен асыҡ итеп, аныҡ факттарға таянып, дәлилләп яҙа белеүе менән уҡыусыларҙы төрлө иҗтимағи проблемаларҙы хәл итеү буйынса дискуссияға ла йәлеп итә белә ул.

Эльза туған теленең нескәлектәрен яҡшы төшөнгән журналист. Телебеҙҙе һаҡлауға, үҫтереүгә ҡоролған мәҡәләләре был хаҡта асыҡ һөйләй. Халҡыбыҙҙың оло аҡыл һәм хазина туплаған мәҡәләйтемдәрен урынлы файҙаланып, әйтергә теләгәнен ҡыҫҡа һәм тос итеп әйтеп биреү маһирлығы ла бар унда. Бөгөнгө һүҙ ҡөҙрәтен тойоп, ҡәләм менән эш итә белгән, тел ҡағиҙәләренең мәғәнәүи көсөн тәрән аңлаған журналистар әҙ заманда Эльзаның мәҡәләләре рухты нығытып, матди һәм рухи ҡиммәттәрҙе айырырға ла өйрәтә. Журналист ҡәләме менән генә түгел, һөйләгән һүҙе, холоҡ-ҡылығы менән дә башҡаларҙа ышаныс, үҙе эшләгән өлкәгә ҡарата хөрмәт, ихтирам уята белергә тейеш. Һүҙ байлығы һай, телмәре насар булғандар бер ваҡытта ла фекерен дөрөҫ һәм аныҡ итеп аңлата, әңгәмәсеһе менән уртаҡ тел таба алмай. Бынын өсөн һәләт тә, үҙ эшеңдең ысын оҫтаһы булып камиллашыу ҙа талап ителә. "Юлдаш" радиоһынан тапшырған мәғлүмәттәре аша Эльзала был сифаттарҙың да мул булыуын аңлайһың. Телмәр культураһына эйә булып, риторика нигеҙҙәрен тәрән аңлап, һәр һүҙҙең тәғәйенләнешен, маҡсатын яҡшы белеп эш итеүе уны үҙ һөнәренең оҫтаһы итеп күрһәтә.

Ысын журналист ниндәйҙер проблеманы шәхсән үҙе хәл итергә тейеш тигәндә аңлатмай. Ысынбарлыҡты дөрөҫ ҡарар ҡабул итерлек итеп сағылдыра, борсоған мәсьәләләргә ваҡытында иғтибарҙы йәлеп итә, дөрөҫ йүнәлеш бирә белә икән, тимәк, был ҡәләм оҫтаһы алдында ҡуйылған бурысты ла уңышлы үтәй тигән һүҙ. Эльза Мөхәмәҙиеваны ла хаҡлы рәүештә ошо исемлеккә индерергә, журналистикала үҙ урынын табып, ул нәҡ ошо өлкәлә халҡына, йәмғиәткә файҙа килтерә, тип ышаныслы әйтергә була. Ташҡа яҙылғандың баһаһын, көсөн тойған һәм ошоға халыҡты ла ышандыра белгән Эльза, һис шикһеҙ, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға лайыҡ.

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ, Сибай ҡалаһы "Атайсал" гәзитенең баш мөхәррире, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты.**

✓ Тәүлегенә алты сәғәт йоҡлағандар ете сәғәт йоҡлаусыларға ҡарағанда миҙгел сирҙәренә тиҙерәк бирешкән. Кем ялға биш сәғәттән аҙыраҡ ваҡыт бүлә, улар 4,5 тапҡырға йышыраҡ ауырыған.



ИНТЕРНЕТТАН



# КИНОЛА ИЛАУ ФАЙҘАЛЫ

■ Көндөҙ йоҡлап алһаң, йөрәк сирҙәре булмай, ти белгестәр. Бигерәк тә юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларға был кәңәште тоторға кәңәш итеlә. Греция ғалимдары үткәргән һынауҙарҙа 61 йәштәге 400 ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Көндөҙ йоҡлап алғандарҙың ҡан баҫымы яҡынса 5 процентҡа түбәнәйгән. Ошо проценттар ғына ла йөрәк өйәнәге һанына йоғонто яһай ала. Икенсе күрһәткестәр, анығыраҡ әйткәндә, пульс йышлығы ла башҡаларҙыҡына ҡарағанда яҡшыраҡ булған. Көндөҙгө йоҡо 1 сәғәт тирәһе булғанда һөҙөмтәләр ҙә юғары, ти белгестәр.

■ Антибактериаль һабынды йыш ҡулланырға ярамай, ти ғалимдар. Ул тире өсөн үҙенсәлекле антибиотик булып тора, шуға ла бындай һабын микробтар менән файҙалы микрофлораны ла юҡҡа сығара, етмәһә, тирене киптерә. Бындай һабын менән ҡулды баҡсала эшләгәндән һуң йә юлда йөрөгәндә йыуыныу ҡулайлыраҡ. Шулай уҡ шыйыҡ һабындар ҙа тирегә яҡшы тәьҫир итә, тире дымға туйынып ҡала, сөнки уларҙа йышыраҡ һелте булмай. Шулай ҙа бындай һабындың составындағы матдәләр күҙгә төшөп, уны әсеттереүе ихтимал, шуға уның менән бит йыумағыҙ. Йыуынғанда тирегә зыян иклтермәҫ өсөн йыуғыс ҡулланмағыҙ, һабын молекулалары йыуғысһыҙ ҙа бысраҡты таҙарта.

■ Кеше тәүлегенә алты сәғәттән кәм йоҡлаһа, һалҡын тейҙереп бара, уға башҡа төрлө вирустар ҙа тиҙ йоға икән. Тикшеренеүҙәрҙә 164 кеше ҡатнашҡан, белгестәр 2007 йылдан 2011 йылға тиклем уларҙың сәләмәтлеген күҙәткән. Тәүлегенә алты сәғәт йоҡлағандар ете сәғәт йоҡлаусыларға ҡарағанда миҙгел сирҙәренә тиҙерәк бирешкән. Кем ялға биш сәғәттән аҙыраҡ ваҡыт бүлә, улар 4,5 тапҡырға йышыраҡ ауырыған. Тикшеренеүҙәрҙең авторы Арик Пратер раҫлауынса, кешенең ауырыу-ауырымауына уның йәше лә, насар ғәҙәттәре лә, стрестар ҙа йоғонто яһамай. Йоҡоноң оҙайлығы иммунитет өсөн яуаплы күҙәнәктәр - Т-лимфоциттарҙың эшмәкәрлеген әүҙемләштерә.

■ Телевизорҙы күп ҡарау үлемесле сирҙәргә илтеүе бар. Телевизор алдында оҙаҡ ултырыусылар йыш ҡына үпкә эмболияһына, йәғни, үпкәнең ҡан тамырына эмбол тығылыуы дусар була, был турала Лондонда, кардиологтарҙың Европа йәмғиәте конференцияһында белдерҙеләр. Үпкә эмболияһы йөрәктән үпкәгә ҡан йөрөтөүсе артерияға эмболдар тығылыуы сире, унан Бөйөк Британияла ғына йыл һайын 60 мең кеше үлә. Көнөнә 5 сәғәт төрлө телешоуҙар ҡарау менән мауыҡҡан кешеләргә мотлаҡ профилактика менән шөғөлләнергә кәрәк, ти белгестәр.

■ Кино ҡарағанда уның күңелдең иң нескә ҡылдарына сирткән урындарында илап алырға була. Етмәһә, был файҙалы ла, ти Нидерландтар ғалимдары. Ғалимдар илата торған драмаларҙы "бәхеткә юл" тип атап йөрөтә, бындай киноны ҡарағандан һуң кешеләр үҙҙәрен күпкә уңышлыраҡ тоя, имеш. Эксперимент барышында 60 тамашасы "Тормош матур" һәм "Хатико" фильмдарын ҡараған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, сеанста илаған кешеләр кино тамамланғас та үҙҙәрен шундай бәхетле тойған, был кисерештәр тағы бер сәғәт тирәһе уларҙы ташламаған. Әйткәндәй, был ир-егеттәргә лә ҡағыла. Баҡтиһәң, сер химияла йәшеренгән - бындай хис-тойғолар окситоцин тигән матдә бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, тап ул бәхет һәм шатлыҡ тойғоһон бирә лә инде.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

**Йылан тураһында хикмәтле һүҙҙәр, легендалар күп инде ул. Уларҙың 1 йәштән 8 йәшкә тиклемгеләрен - "хыя", 90-да булғанын "әфғый", 100-ҙән үтеп, 1 мең йәшкә еткәнен "аждаһа", 2 мең йәшлегенә "юха" тиҙәр, тип әйтә ине боронғолар. Йылан был йәштән дә уҙһа, "хуб" - егет йә ҡыҙ һүрәтенә инә икән. Һылыу ҡыҙ йә егет булып, егет-ҡыҙҙарҙы үҙҙәренә ҡарата улар. Беҙ үҫкәндә Асылыкүлдә йыландың егеткә әйләнеп, бер ҡыҙҙы тотҡанын һөйләйҙәр ине.**



# ЙЫЛАНДАРҘЫҢ...

## ҡылыҡ-тәбиғәтен беләйек

Халыҡта йыланға мөнәсәбәт, ысынлап та, ҡыҙыҡ. Шулай ҙа унан күберәк ҡурҡалар, ахыры. Т. Ялсығолдоң "Рисаләй Ғәзизә" китабында әйтелә: йылан, Иблис менән дуҫ булып, Хоҙайға ҡаршы була. Шуның өсөн Хоҙай уны ҡәһәрләп, ожмахтан ҡыуып сығара. Ошо ҡәһәр йылан эсенә ағыу булып инеп ҡалған.

Үҙебеҙ ҙә бәләкәй саҡтан йыландар тураһындағы әкәмәттәрҙе ишетеп, күреп үҫтек. Әле лә Ағиҙелдең ҡамышы араһындағы, Һаҡмар буйындағы, Имсәктау итәгендәге соҡорҙа ҡайнаған тәңкәле, оҙон, йыуан йыландар күҙ алдында. Олотауҙа сейә йыйғанда аяғым өҫтөнән үтеп киткән йылан һыуығын әле лә тоям кеүек.

Беҙ йәш саҡта Мәләүез районының Шәрип ауылында йылға буйында йәшәмеш йыландың әрмәнделәрҙе, ҡаҙ-өйрәк себештәрен йотоуын да оҙаҡ һөйләнеләр. Йылан ҡояшҡа сығып һуҙылып ятһа, оҙон йыуан бүрәнә тип уйлаған халыҡ, йылан икәнен күреп ҡалғас, ҡасҡандар. Йомарланһа, К-700 тракторының тәгәрмәсе кеүек икән. Бала-сағаны йылғаға ебәрмәгәндәр, ололар ҙа һаҡланған. Ваҡиғаның аҙағы ни менән бөткәндер, хәтерләмәйем.

Йылан үҙен бимазалағанды ла яратмай, һөжүмгә күсә. Беҙ утын әҙерләгәндә Ағиҙел аша айыу артынан йөҙгәнен дә күрҙек. Айыу урманға инеп киткәс, йылан кире йөҙөп ары китте. Ағайымдар уның ҙурлығына хайран ҡалып һөйләнеләр, беҙҙе ҡыуышҡа ҡыуып индерҙеләр. Йылан йоҡлағанын күргәндә шым ғына кире китергә кәрәклеген дә әйттеләр.

Өләсәйем әйтеүенсә, йәш баланың көсө ҙур, ул йыланды ҡыҫып тотоп, үлтерә ала, имеш. Уның һуғыштан ҡайтмаған улы Закир ағай менән шундай хәл булыуын гел һөйләне. Күршеһенең бесәйе йыланды ҡойроғонан һөйрәп сәңгелдәккә ебәрмәүен, баланы ҡотҡарыуын да иҫкә ала ине.

Беҙ үҫкәндә аяҡ-ҡул бармаҡтары ҡап-ҡара күпереп шешә торғайны. Уны йыланғара, ҡара күпертке тиҙәр. Шуны дауалау өсөн өләсәйем йыл да йылан тотторop, тиреһен ала ине. Тире киҫәген эҫе һыуға һала ла, аяҡ-ҡулды шунда тыҡтыртһа, шештәр тиҙ уңала ла ҡуя.

Йәйгеһен һыйыр елененән ҡан килһә, йылан ҡойроғо менән һуҡҡан, тип, өләсәйҙән өшкөртәләр. Ул еленгә һары таш ҡайраҡ менән төртә-төртә доғалар уҡып өшкөрә. Килешә ине был дауа ла. Ә һыйыр елененән ҡан күп аҡһа, ялanғас таулы, һыуһыҙ ерҙәге йылан һыуһап, һыйырҙы имгән, тиҙәр ине беҙҙә. Ул ваҡытта өләсәй һыйыр елененә йылҡы майы һөртә, доғаларын уҡып өшкөрә, үҙе һауа ла, ҡанлы һөттө кешеғара баҫмаҫ ергә күмә торғайны. Хужалар уға әжерен бирә, рәхмәт уҡый.

Еләккәме, әллә башҡа сәбәп менән урманға барғанда йылан тертләп саҡмаһын өсөн, алыҫтан уҡ тауыш сығарып, Хоҙайҙан йыландың ташҡа әйләнеүен һорарға ҡуша ине өләсәй. Йортҡа эйәләгән йыланды ла, ҡырҙа күренгәнен дә үлтереүҙән тыйҙы, уларҙан һаҡланыу әмәлен өйрәтте, ҡарғышлы булыуҙан ҡурсаланы. Йылан ҡаршы осраһа, башыңдағы яулығыңды йә түбәтәйҙе уның өҫтөнә һалырға ла, ҡаршы йүнәлешкә китергә кәрәклеген дә әйтте. Йылан яулыҡ, түбәтәй аҫтынан сыҡҡанда кешене онота икән.

Үҙебеҙҙең йортта байтаҡ йылдар бер туҙбаш йылан йәшәне. Ҡошҡорт, мал-тыуарҙың уға иҫе лә китмәне. Эт, бесәй менән дуҫ булды, өшөһә, эттең йөнө араһына сумыр ине. Аҙаҡ юғалды, ҡош типкәндер, тинек.

Әбйәлил районы Байым ауылында Утарбаев Ғабдинур ғүмер буйы мал көттө. Ҡырҙа һыуыҡтан ышыҡланыр аласығы ла булды. Шунда бер йылан эйәләп йәшәүен, уға һөт, аҙыҡтар биреүен, йыландың көтөү аты яҡынлаһа, урындыҡ аҫтына йәшенеүен әле лә һөйләй. Ул йыланды терпе өҙгөләп киткән. Ғөмүмән, йыландар йылҡы тире, төтәтелгән кейеҙ, быйма еҫенән ҡурҡа, ҡаса. Бесәнде ҡуна ятып эшләгәндә ҡыуыш тирәләй ҡамыт-фәләнде ҡуйып йоҡлау, яҙғыһын йыландар терелгәндә баҙ, солан аҫтына, баҡсалағы ҡарағатлыҡтар араһына ат егеү өсөн ҡулланылған кәрәк-яраҡты ташлап сығыу ошоноң менән бәйле.

Йыландың ҡылығы, ағыуының көсө уларҙың ҡайһы ерҙә йәшәүенә бәйле: яланғас тауҙа, һыуһыҙ ерҙә көн күргәндәре оҙон нәҙек, асыулы, үткер ағыулы була. Ҡара урманлы, йылғалы урындағылар итләс, йыуан, йыуашыраҡ була, тип бәйән итә ине өләсәйем. Борон йылан саҡһа, әсе, тоҙло айран эскәндәр, сағылған урынға ат тирен һөрткәндәр, ҡан менән бергә ағыуҙы һығып сығарғандар. Йыландар төрлө була бит ул: ҡап-ҡара башлыһының ағыуы әллә ни көслө түгел, һары башлыһы үҙе уҫал, ағыуы ла көслө, баҡыр йыланда ағыу юҡҡа иҫәп. Шуға күрә ниндәй йылан күреүеңә ҡарап, һаҡлана белергә лә кәрәк.

Өләсәй йыланды доғалар менән арбап йоҡлатып үлтереүен дә, тиреһен нисек һыҙырып алыуын да, ҡалған кәүҙәһен ҡайҙа күмеүен дә һис күрһәтмәне. Ул шулай йыландар менән эш итһә лә, Аллаға шөкөр, бер кемдең дә йортона бәлә-ҡаза килмәне. Ауылда йылан сағып, ҡазаланғандар ҙа ишетелмәне. Тимәк, өләсәйҙең доғалары, йыландарға һаҡсыл ҡарауы ярҙам иткән.

Хәҙер йыландар юҡ бит ул. Бик төпкөл, тыныс урын эҙләп китеп бөткәндәрҙер, тим. Ҡыр-яландарҙа ниндәй генә техника йөрөмәй ҙә, машиналар, кешеләр ниндәй генә ергә барып етмәй. Ә күпме майҙандарҙы ут-ялҡын ялмап яндыра! Кешенең үҙенә яуап итеп, йыландар ҙа яраҡлаша баралыр инде. Шуға күрә йыландарға гел ҡурҡыныс йән эйәһе итеп ҡарамайыҡ. Һаҡланыу юлдарын өйрәнәйек, ҡылыҡ-тәбиғәтен беләйек. Шул мәлдә уның зыяндарынан алыҫ булырбыҙ. Ул меҫкендәр ҙә тәбиғәтебеҙҙең бер өлөшө бит. Халҡыбыҙ ғүмер буйы тотоп йәшәгән йолаларҙы, шул уҡ йылан арбау өсөн уҡылған доғаларҙы, бәлки, белеүселәр барҙыр арабыҙҙа?

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ҺУҒАН ҠАБЫҒЫ



**Һуған ҡабығы ҡайнатмаһы һалҡын тейҙергәндә ҡаҡырыҡ сығарырға ярҙам итеүсе, эсте йомшарта, һейҙек ҡыуҙырта торған витамин сығанағы, микробтарға ҡаршы, ҡан тамырҙарын нығытыусы сара булараҡ та билдәле.**

Ангина менән йыш яфаланһағыҙ, һуған ҡабығы өҫтөнә эҫе һыу ҡойоп ултыртығыҙ һәм һөҙөп алып, тамағығыҙҙы сайҡатығыҙ.

Һыуыҡ тейеүҙән йә аллергия сәбәбенән тымаулап торһағыҙ, ҡайнар һыуға дүрт ҡалаҡ ваҡланған һуған ҡабығын ташлап, быуын 3-5 минут тирәһе һулағыҙ.

Йүтәлләгәндә 2 ҡалаҡ һуған ҡабығына 2 стакан һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатығыҙ ҙа, һөҙөп алып, шул һыуҙы ашарҙан ярты сәғәт алда 1/4 стакан күләмендә көнөнә өс тапҡыр йылы көйөнсә эсегеҙ.

Бөйөр һәм һейҙек ҡыуығы ауыртҡанда ла һуған ҡабығы ярҙам итер. Бының өсөн 3 балғалаҡ ваҡланған һуған ҡабығына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә кәрәк. Цистит менән ҡаты ауырығанда был төнәтмәне 50 мл күләмендә көнөнә ике тапҡыр эсергә кәрәк. Ҡайтмалы цистит булған осраҡта көнөнә 3-4 тапҡыр икешәр ҡалаҡ эсергә. Был курсты 10 көн дауам итергә кәрәк.

Ҡан тамырҙары тыныcһыҙлаған осраҡта 2 ҡалаҡ һуған ҡабығын 400 мл ҡайнар һыу ҡойоп, алты сәғәт төнәтеп, 7-10 көн дауамында ашарҙан ярты сәғәт алда 1/4 стакан күләмендә көнөнә 3 тапҡыр эсергә кәрәк. Дауаланыу курсын бер аҙнаға туҡтатып, тағы дауам итегеҙ.

✓ *Кешене эскелеккә этәргән 31 фактор барлығын асыҡланым. Иң мөһимдәре: кеше организмында нейротрансмиттерҙар балансы боҙолоуы, шәкәрле ризыктың күп ашау, эскелектең гендар аша күсеүе, ғаиләләге ыҙғыштар, енси көсһөҙлөк.*



ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ЗЫЯРАТТАРЫҒЫҘҘЫ КИҢӘЙТЕГЕҘ...

## Эскелек беҙҙә еңә бара, еңә бара түгелме?



(Башы 6-сы биттә).

Спиртлы шыйыҡлыҡ - ул ризыҡ түгел, унда кешене туҡландырыусы бер генә элемент та, витамин да юҡ. Уны башҡа яныусы матдәләр кеүек, юғары энергияға эйә булған өсөн генә, бәлки, экстремаль хәлдә ҡулланғандарҙыр. Ә бит энергия аҙмы-күпме бөтә есемдәрҙә лә бар. Миненсә, бөтә хикмәт шунда: тәүҙә уйнап ҡына, байрамдарҙа тамшанып ҡына көтөп алынған эскелек культураһы йәйлап традицияға әйләнә - тән эскелекте үҙ итә башлай. Кеше тәнендәге биохимик процестар үҙҙәре үк ошо "доза"ны көтә, кеше алкоголгә күнегә, сәләмәтлеге, йәне, рухы емерелә башлай. Ҡытай философы, табибы Конфуций "Һин үҙең һымаҡтарҙы магнит кеүек үҙенә тартаһың..." тигән. Ысынлап та, алкоголь яратыусылар бер-береһенә бер туғандар һымаҡ оҡшап бөткән, биттәрендәге һырҙары, еҫтәре, донъяға ҡараштары, кейемдәренең торошо ла, һаулыҡ хәле лә оҡшаш. Улар бер-береһен тиҙ таба, тиҙ уртаҡ фекергә килә. Улар өсөн иң юғары байлыҡ - бер ярты араҡы. Эскелек кешене күҙ менән ҡаш араһында үҙгәртә, ғәмһеҙ, моңһоҙ һәм ҡаты бәгерле яһай. Шуғамылыр, һәр икенсе енәйәт эскелек арҡаһында эшләнә. Эскелек әҙәм балаһын ҡаты бәгерле итеп кенә ҡалмай, көнсөл дә яһай. Тормоштарҙың төрлә кимәлдә булыуы, йәмғиәттәге контраст та уларға оҡшамай. Ғаиләлә лә параллель донъяла кеүек йәшәйҙәр. Телдәр ҙә төрләсә. Аңлашыу, килешеү ҙә мөмкин түгел...

Ғалимдар 70-се йылдарҙа ҡомаҡ менән бер тәжрибә үткәрә. Ата ҡомаҡҡа электродҡа башы менән ҡағылыу аша ғына енси ҡәнәғәтләнеү юлын күрһәтеп бирәләр. Ҡомаҡ электродҡа барып ҡағыла ла барып ята, һыу эсә лә тағы электродҡа... Артабан уның ғаиләһенә ҡурҡыныс янағанда ла ярҙамға килмәгәнен күҙәткәндәр. Ҡомаҡ тәжрибәнең 17-се көнөндә үлә. Эскән кешене ошо йән эйәһе менән сағыштыра ла инде ғалимдар.

Алкоголь аҡылды ла яулап ала. 80-се йылдарҙа ғалимдар фәнни эш менән шөғөлләнгән 17 аспирантҡа икешәр йөҙ грамм араҡы эсереп ҡараған. Ошонан һуң улар тик 23 көндән генә эшләп алып китә алған. Тимәк, алкоголь кешенең аҡыллы фекерҙәрен, һәр төрлә асыштарҙы, алдынғы технологияларҙың үҫешен, цивилизацияның алға китеүен тотҡарлай.

Мин кешене эскелеккә этәргән 31 фактор барлығын асыҡланым. Бына иң мөһимдәре: кеше организмында нейротрансмиттерҙар балансы боҙолоуы, шәкәрле ризыҡты күп ашау, эскелектең гендар аша күсеүе, балансы туҡланмау, ғаиләләге ыҙғыштар, енси көсһөҙлөк. Шулай уҡ бер-беренә ҡаты бәгерлелек, баш, тән, йән яралары, ил ағаларының халыҡ яҙмышына ғәмһеҙ ҡарашы, экрандар аша аҫтыртын өгөтләү, рухи яҡтан ярлылыҡ. Эскесе дуҫтар ҙа көсһөҙ, ихтыярһыҙ кешене эскелеккә этәрә. Быларҙың барыһына ла нимә ҡаршы тора ала һуң? Тик иң көслө контраргумент ҡына. Ул - аҡыл.

Алкоголизм - ул ауырыу, көслө интеграль сир генә түгел, ғаилә ағзаларына, туғандарға, йәмғәтселеккә яза ла. Ә ауырыған кеше һәр саҡ хатаһын аңларға, тәүбәгә килергә, ярҙам эҙләргә тейеш. Алкоголизм дауалап була торған ауырыу. Эҙләгәндәр ҡасан да булһа үҙ табибын, яҙмышын төҙәтеп ебәрер кешеһен таба. Уның өсөн иң беренсе гәйебендә таныу, аҙаҡ ярҙам эҙләү дөрөҫ була.

Кемдәрҙер ауылда эш юҡлыҡҡа һылтана. Рәсәйгә әллә ҡайҙарҙан: Ҡытайҙан, Вьетнамдан, һәр төрлә дәүләттәрҙән килеп эшләп яталар, документһыҙ, урыҫ телен дә белмәйенсә. Ә баш, аяҡ, ҡул нимәгә? Әйтәйек, тиҙәктән кирбес эшләп, киптереп, эзбизгә буяп, ҡалаға сығарып һатһаң да алалар ҙа баһа!

Борон бер аҡыл эйәһенән урамда эсеп, аңҡы-тиңке булып йөрөгән бер әҙәм аҡса һорай: "Ярай, аҡса бирермен, тик һин минә ҡулдарыңды һат", - ти. "Юҡ, ҡулдарым үҙемә кәрәк", - ти был әҙәм. "Улай булғас, һин минә аяҡтарыңды һат", - ти аҡыл эйәһе. "Юҡ, аяҡтарым да үҙемә кәрәк", - ти эскесе. "Улай ҡулдарың да, аяҡтарың да үҙеңә кәрәк булғас, һин эшләп аша", - тигән дә аҡыл эйәһе юлын дауам иткән.

Мәскәүҙәге наркология үҙәгендә бер ғалимға тағы шундай һорау бирҙем: "... йәштәргә һыра эсерәләр, был ниндәй һөҙөмтәгә килтерергә мөмкин?" "... Һыра алкоголизмға илтә торған юл, ул йәш организмды тиҙ алкоголгә өйрәтә торған сара ғына түгел, ул бауыр сире менән үлеүселәр һаны артыуға сәбәпсе лә. Унан һуң, һыра ирҙәрҙең енесен алмаштыра торған клиникалар менән ярыша ала..." - тип яуап ҡайтарҙы. Эйе ләбаһа, һыра составына ингән ҡатын-ҡыҙҙар гормоны - эстроген, ҡомалаҡ, этанол, трансген есемдәр, бояусы, канцероген матдәләр ирҙәр потенцияһын көсһөҙләтә. Хәҙер инде аңлашылалыр утыҙҙы үткән һәр икенсе ҡатын-ҡыҙҙың ни өсөн яман шеш, алама сирҙәр менән ауырығаны...

Һуңғараҡ мин Дәүләт Думаһында эшләгән бер "ағай"ға һорау бирҙем: "Рәсәй үҙаң, рух потенциалы менән генә яҡын арала күтәрелә алырмы?" Ул шулай тип яуап бирҙе: "Һуңғы арала Рәсәй дәүләтенә 20 миллиондан артыҡ сит ил граждандары күсеп килде, улар бында ғаилә ҡорҙо, һәм бына ошо халыҡтарҙан тыуған быуын ғына күтәрергә тейеш тип уйлайым Рәсәй дәүләтен. Ә эсеп өйрәнгән беҙҙең халыҡ ҡырылып бөтәсәк..."

"Кешене ҡамаған бөтә есем - ул ағыу, тәбиғәттә ағыулы булмаған бер генә нәмә лә юҡ, тик кеше ағыуланырмы, юҡмы - быныһы иһә ағыулаусы матдәнең күләменә бәйле", - тигән боронғо табип Әбуғалисина. Эйе, шулайҙыр. Ә һәр нәмәнең, норманан үтһә, ағыу икәнен кем өйрәтергә тейеш? Атай менән әсәйме? Уραммы? Уҡытыусымы? Юҡ! Тәжрибә күрһәтеүенсә, һеҙ күпме генә балағыҙға дөрөҫ тәрбиә бирергә тырышып, "эсмә инде, балаҡайым" тип аяҡтарына ятып инәлһәгеҙ ҙә, һөҙөмтә булмаясаҡ. Балаларығыҙҙың яҙмышы ил хужалары ҡулында.

"... Йәмғиәттә йәш быуын өсөн рухи мөхит булырға тейеш", ти В.В. Путин. Ҡайҙа ул мөхит? Уны кем булдырырға тейеш? Вольтерҙың һүҙе менән урыҫсалап әйткәндә: "Изменять нравы и возвышать или унижать нацию, это дело правительства". Кемдер әйтмешләй, иҡтисадты кем өсөн ҡотҡарырға һуң, милләт һәләк булып бара бит? Балалар табыуҙы финанслап ҡына киләсәк быуынды ҡотҡарып булмай ул. Тыуып, үҫеп, үҙ аллы тормош юлына аяҡ баҫырға торған балаларҙы ла, йәштәрҙе лә ҡайғыртырға кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эскелектең, рухи ярлылыҡтың глобаль киңлектә йәйелә, күрәләтә йәмғиәттең һәләкәткә тәгәрәй барыуы, балалар яҙмышы, киләсәге борсой мине. "Ҡараңғыла йәшәгәнен аңламаған яҡтыға ынтылмаҫ булыр", ти халыҡ мәҡәле. Йәнлектәр, ҡоштар ғына түгел, иң примитив бөжәктәр, микроорганизмдар донъяла үҙҙәренә ҡурҡыныс янағанда һаҡлана белә. Берәй ҡасан уянырмы икән кешелә лә үҙ-үҙен һаҡлау аҡылы, аңы? Уяныр, тик беҙҙең быуында түгел. Беҙ әлегә әҙер түгелбеҙҙер, ахыры... Шулай ҙа, киңәйтегеҙ әлегә зыяраттарығыҙҙы...**

Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

### Аҡыллы, сәләмәт һәм бай булығыҙ!

Беҙ бер нисә бик етди теманы ҡараныҡ һәм, дөрөҫөн әйткәндә, өҫтән генә ҡарап сыҡтыҡ. Һеҙҙең бурыс - төбөнә төшөнөп, күберәк белеү, һәр саҡ үҙ инаныуҙарығыҙға ҡаршы килеү, сөнки бары тик шул торошта ғына ысын һынылыш буласаҡ. Тәнҡит фекерләүе һәм үҫешкән зирәклегегеҙ һеҙҙе көндәлек ығы-зығынан арындырып, үҙегеҙҙе раҫлау батшалығының иҫерткес мөмкинлектәренә килтереүе бар.

Был китапты мин саҡырыу ташлап, һеҙҙе ҡурҡытыу һәм, иң мөһиме, уйланырға мәжбүр итеү өсөн яҙҙым! Барыһын да ысынға алырһығыҙ тип уйламайым. Әммә реаль, тәнҡит фекерләүен эшкә ҡушып, үҙегеҙгә шәхсән нәмә тура килә икәнлеген хәл итһәгеҙ - тимәк, мин маҡсатыма өлгәшкәнмен.

Тормош мәғәнәгә эйә булһын, ҡәнәғәтлек һәм уңыш килтерһен өсөн һеҙ бөтөн нәмәлә, бигерәк тә ныҡ көслө һәм тамыр йәйгән инаныуҙарығыҙҙа, шикләнергә әҙер булырға тейешһегеҙ. Әгәр ошонда уҡыған нимәнәндер башығыҙ әйләнеп китә икән, тимәк, нимәлер өҫтөндә ныҡлы эшләргә кәрәк. Теләһә ниндәй психотерапевт һеҙгә, ныҡ хис-тойғоға бирелгәндә нимәлер һеҙҙе ҡурҡыта һәм яҡланмаулыҡ хисе тыуҙыра, тип әйтәсәк. Беҙ күрнештәрҙе көҙгө кеүек сағылдырабыҙ. Ғәҙәттә, ҡағыҙа булараҡ, икенсе кешелә асыу тыуҙырған нәмә беҙҙең ҡурҡҡан һәм үҙебеҙҙә булған нәмә ул.

Үҙегеҙҙе тикшереп, бөтөн нәмәне тәнҡит күҙлегенән баһалаһағыҙ, шундай һорау бирегеҙ: уңышлы булыуыма ҡамасаулыҡ иткән тәртибемде аҡлау мөмкинлеге биргән өсөн генә билдәле бер инаныуҙарыма тоғромонмо?

Моғайын, был үҙегеҙгә биргән иң мөһим һорау булыр, шуға күрә уға ихтирамлы булығыҙ. Мин һеҙ үҙегеҙҙең ҡиммәтегеҙҙе аңлаһын өсөн ошо китапты яҙҙым. Һеҙ мине үҙегеҙҙең уңыш донъяһына юл күрһәтеүсе итеп һайлап, ихтирам күрһәттегеҙ; мин был бурысҡа бик яуаплы ҡарайым.

Дуҫығыҙ һеҙ ишеткегеҙ килгән яуапты әйтәсәк, әммә ысын дуҫ йәки остаз ишетергә кәрәк нәмәне әйтәсәк. Был китап һеҙҙең тормошоғоҙҙо тамырынан үҙгәртеп, күп кеше хыялланған, әммә бер ваҡытта ла тормошҡа ашыра алмаған тормош рәүешенә барып етергә ярҙам итәсәк.

Һеҙ сәләмәт, бәхетле, уңышлы булыр өсөн тыуғанһығыҙ. Мин һеҙҙә шул идеяны үҫтерергә теләнем, сөнки ул - аңдың төп ҡоралы. Сәләмәтлегегеҙ, бәхетегеҙ, мөнәсәбәттәрегеҙ, финанс хәл-торошоғоҙ, интеллектуаль үҫешегеҙ һеҙ өҫтөнлөк биргән уй-фекерҙәр һәм аңығыҙ тыуҙырған идеялар менән билдәләнә. Үҙ идеяларығыҙҙың хаҡлығына инаныу - берҙәнбер иң кәрәк инаныу ул. Теләһә ниндәй эштең нигеҙе - идея. Инаныу ошо идеяны тормошҡа ашыра ала. Һеҙ үҙегеҙгә маҡсат ҡуйып һәм уны хуплап торған философия буйынса йәшәй алаһығыҙ. Аҡыллы, сәләмәт һәм бай булыуҙы һайлағыҙ.

Рэнди ГЕЙДЖ.

(Аҙағы).



## 14 СЕНТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 04.00 "Мужское/Женское" (16+)
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Лучше не бывает". Сериал. 9-я и 10-я серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.20 "Код 100".
03.00 Новости.
03.05 "Мотель Бейтс" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Выбор оружия". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Неподкупный". 11-13-я серии. Детективный сериал (12+).
23.50 "Честный детектив" (16+).
00.45 "Три дня в Москве". Комедия.
02.15 "Чокнутая". Детект. сериал (16+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Автограф" (12+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Башҡорт йыры" представляет…**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (12+).**
**15.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**16.00 "Книга сказок" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!"**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!"**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.00 "Сыны Отечества" (12+).**
**19.00 "Телецентр" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Асыҡ дәрес" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (0+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Серьезный человек". Худ. фильм**
**По окончании: Новости (на башк. яз.)**
**01.15 "Дети мои" (12+).**

## 15 СЕНТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Лучше не бывает". Сериал (12+)
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Лучше не бывает". 11-я и 12-я, заключительные, серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Структура момента" (16+).
01.25, 03.05 "Мой кусок пирога" (16+).
03.00 Новости.
03.40 "Мотель Бейтс". Худ. фильм
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Поклонники". Детективный сериал
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский". Сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Неподкупный". 14-16-я, заключительная, серии (12+).
23.50 "Вести.doc" (16+).
01.00 "Три дня в Москве". Комедия.
02.30 "Чокнутая" (16+).
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык"**
**11.15, 17.45 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". (16+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Шәп арба" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Асыҡ дәрес" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**23.00 "Свадебная вечеринка" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.)**
**01.15 "Счастье с неба". (12+).**

## 16 СЕНТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Лучше не бывает". Сериал (16+)
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Танкисты своих не бросают". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Политика".
01.25, 03.05 "Кагемуша". Драма (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Кто есть кто". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Чужая милая". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
22.55 "Специальный корреспондент"
00.35 "Труффальдино из Бергамо". Музыкальная комедия. 1-я серия.
02.00 "Чокнутая". Сериал (16+).
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык"**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 20.15 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Башҡорт йыры" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора"**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**18.45, 01.00 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Барыс" (Астана) (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Сыщик" (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 17 СЕНТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.20 "Танкисты своих не бросают". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00"Мужское/Женское (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Танкисты своих не бросают". 3-я и 4-я, заключительная, серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Круговорот Башмета" (12+).
01.20, 03.05 "В поисках Ричарда". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.
03.40 "Мотель Бейтс". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Фотограф". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Чужая милая". 3я и 4-я серии
22.55 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
00.35 "Труффальдино из Бергамо". Музыкальная комедия. 2-я серия.
02.00 "Чокнутая". Сериал (16+).
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Царь горы" (0+).**
**11.00 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Худ. фильм**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Шәхес" (6+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". (16+).**
**15.45 "Шәп арба" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (0+).**
**17.15 "История признания" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Историческая среда" (12+).**
**18.15 "Позывной "Барс" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Башҡорттар" (6+).**
**20.45 "Точка зрения ЛДПР" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Инспектор Беллами". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Тамарис" (12+).**

## 18 СЕНТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.20 "Танкисты своих не бросают". Мелодраматический сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости.
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Муз. конкурс (12+).
23.50 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.45 "20000 дней на Земле" (16+).
02.40 "Голубая волна". Худ. фильм
04.35 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Приличные люди". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский". Сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Кривое зеркало". Театр Евгения Петросяна (16+).
22.50 "Молодожены". Мелодрама
00.45 "Люблю, потому что люблю". Мелодрама (12+).
02.45 "Горячая десятка" (12+).
03.50 "Тайная власть генов" (12+).

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 24.00 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Худ. фильм**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Күңелем моңдары" (6+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (6+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.15 "Байтус" (6+).**
**16.45 "Наука 102" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Орнамент" (6+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**18.45, 01.00 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург Нк." (Новокузнецк) (12+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!"**
**23.00 "Четверо похорон и одна свадьба". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 19 СЕНТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.30, 06.15 "Мой ласковый и нежный зверь". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
07.45 "Лист ожидания". Сериал (16+).
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Вера Васильева. Нечаянная радость". Док. фильм (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Опекун". Комедия (12+).
15.45 "Голос" (12+).
18.00 Вечерние новости.
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.10 "ДОстояние РЕспублики". Михаил Боярский.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Хоть раз в жизни". Драма (6+).
01.00 "Хищники". Худ. фильм (18+).
03.00 "Джек-медвежонок" (16+).
04.50 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.50 "Перехват". Худ. фильм (12+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.20 "Вести-Башкортостан".
08.30 "Военная программа" Александра Сладкова.
09.00 "Танковый биатлон".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Моя жизнь сделана в России".
12.00 "Не уходи". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Не уходи". Сериал (12+).
16.20 "Субботний вечер".
17.15 "Весомое чувство". Мелодрама
19.10 "Знание - сила". Телевикторина.
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Холодное блюдо". Драма (12+).
00.35 "Кружева". Худ. фильм (12+).
02.45 "Пристань на том берегу". Худ. фильм (12+).
04.15 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05, 12.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Мой друг Бернард" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2015" (12+).**
**17.00 "Судьба, выбранная мной" (12+).**
**19.00 "Дарман" (12+).**
**19.45 "Замандаш" (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Шәмбе кис" (12+).**
**21.00 "Бай" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Легенды спорта" (12+).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 Театральная ночь на БСТ. Кен Кизи. "Пролетая над гнездом кукушки"**
**01.45 "В ночь лунного затмения" (12+).**

## 20 СЕНТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.25, 06.10 "Храбрая сердцем". Худ. фильм (6+).
06.00 Новости.
07.05 "Лист ожидания". Сериал (16+).
08.10 "Служу Отчизне!"
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора" (16+).
13.10 "Суета сует". Комедия.
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Люди, сделавшие Землю круглой" (16+).
17.20 "Время покажет". Темы недели
19.00 "Точь-в-точь". Шоу пародий
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Точь-в-точь" (16+).
23.40 "Сказки Пушкина. Версия авангардиста".
00.45 "Восход Меркурия". Боевик
02.50 "Домашняя работа". Худ. фильм
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.30 "Одиноким предоставляется общежитие". Худ. фильм (12+).
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
13.25 "Время любить". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 " Время любить". Сериал (16+).
17.30 "Главная сцена". Муз. конкурс.
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "От праздника к празднику". Мелодрама (12+).
02.30 "Стаханов. Забытый герой"
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан" (12+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Алиса знает, что делать!" (0+).**
**09.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**09.30 "Легенды спорта" (12+).**
**10.00 "Профессия журналист" (0+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.30 "Байтус" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**15.00, 19.15 "Автограф" (12+).**
**15.30 "Дорога к храму" (6+).**
**16.00 "История признания" (12+).**
**16.15, 03.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск)**
**19.00 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.45 "Мир настоящих мужчин" (6+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Любимое дело" (12+).**
**20.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (0+).**
**22.30 "Байыҡ-2015" (0+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.15 "Человек года". Худ. фильм**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# ХУШ КИЛӘҺЕҢ...




**9-12 декабрҙә Өфөлә "Көмөш Аҡбуҙат" II Халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале үтә. Сара Евразия гуманистик форумы сиктәрендә ойоштороло.**

"Башҡортостан" киностудияһы фестивалдә ҡатнашырға теләүселәрҙән ғаризалар ҡабул итеү менән мәшғүл: әлегә 34 документаль, 45 ҡыҫҡа метрлы уйын фильмы һәм 25 тулы метрлы уйын фильмы тәҡдим ителгән. Улар Иран, Мысыр, Ҡырғыҙстан, Латвия, Әрмәнстан, Бөйөк Британия, Эстония, АҠШ һәм Рәсәй кинематографистарының эштәре. Фестиваль барышында ШОС һәм БРИКС илдәре киноларын да ҡарарға мөмкин буласаҡ.

Фестивалдең ойоштороусылары - БР Хөкүмәте, Мәҙәниәт министрлығы, Өфө ҡала округы хакимиәте, "Башҡортостан" киностудияһы. Былтыр үткән беренсе фестиваль кеүек үк, "Көмөш Аҡбуҙат" кинофестивале быйыл да Республика Башлығы грантына үткәрелә. Донъя халыҡтарының рухи һәм мәҙәни ҡиммәттәрен пропагандалаған, милли һәм этник йүнәлештә ижад итеүсе кинематографистарҙың ижады менән таныштырған был күркәм фестиваль быйыл да яңы исемдәр асыр, тип көтәбеҙ.

# ТӨНДӘ... ТЕАТРҒА!



**19 сентябрҙә республикала тағы ла "Театр төнө" уҙасаҡ. Мәҫәлән, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры алдындағы майҙанда әкиәт персонаждары балалар өсөн төрлө уйындар һәм конкурстар ойошторасаҡ.**

"Нур" Өфө дәүләт татар театры алдында театрҙың йондоҙҙары ҡыҙыл балаҫтан үтәсәк, театр эсендә симфоник музыка уйнаясаҡ һәм костюмлаштырылған карнавал буласаҡ. Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрында ҡурсаҡтарҙы нисек йөрөтөргә өйрәнергә мөмкин булһа, опера һәм балет театры грим нигеҙҙәренә төшөндөрәсәк. Рус дәүләт драма театрында һәм Милли йәштәр театрында шулай уҡ күңелле тамашалар ҡаралған.

"Театр төнө" акцияһы өсөнсө тапҡыр үткәрелә. Быйыл ул Еңеүҙең 70 йыллығына һәм Әҙәбиәт йылына бағышлана. Унда театрҙар ғына түгел, театраль студиялар, мәҙәниәт йорттары, китапханалар, ҡала һәм райондарҙың мәҙәни үҙәктәре ҡатнашасаҡ. Бөтөн саралар бушлай, тик төп сәхнәләрҙә барғандарына саҡырыу билеттары менән генә үтеп буласаҡ.

# БЕҘҘЕКЕЛӘР ЕҢДЕ



**Ҡытайҙа "Азияның супер моделе - 2015" X Халыҡ-ара реалити-шоуҙы төшөрөү тамамланды. Башҡортостандан унда "Һылыуҡай - Bashkirian Beauty" студияһы моделе Диана Зөбәйерова ҡатнашҡайны.**

Өс аҙна дауамында Япония, Малайзия, Корея, Таиланд, Ҡытай, Яңы Зеландия, Һиндостан, Монголия, Рәсәйҙән 20 модель төрлө ярыштарҙа көс һынашты. Конкурстың финалы Гуанси-ТВ студияһында үтте. Бәйгенең еңеүселәре тип Ҡытай менән Һиндостан табылды. Башҡортостан командаһы иһә махсус номинацияларға лайыҡ булған. Дианаға ярҙам итеүсе Тимур Сәхәүетдинов "Шоуҙың иң әүҙем ҡатнашыусыһы" номинацияһы дипломы менән бүләкләнһә, Диана Зөбәйерова үҙе "Азияның камиллыҡ миссы - 2015" титулына эйә булды. Дианаға Ҡытайҙың модель агентлыҡтары контракт төҙөргә тәҡдим итә.

✓ *Ярлы менән ҡоҙа булғансы, бай менән барымталы бул.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТ ИҠТИСАДСЫЛАРЫ




## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (1) дүшәмбе | 5:17 | 6:47 | 13:30 | 18:04 | 19:34 | 21:04 |
| 15 (2) шишәмбе | 5:19 | 6:49 | 13:30 | 18:02 | 19:32 | 21:02 |
| 16 (3) шаршамбы | 5:21 | 6:51 | 13:30 | 17:59 | 19:29 | 20:59 |
| 17 (4) кесе йома | 5:23 | 6:53 | 13:30 | 17:57 | 19:27 | 20:57 |
| 18 (5) йома | 5:24 | 6:54 | 13:30 | 17:54 | 19:24 | 20:54 |
| 19 (6) шәмбе | 5:26 | 6:56 | 13:30 | 17:52 | 19:22 | 20:52 |
| 20 (7) йәкшәмбе | 5:28 | 6:58 | 13:30 | 17:49 | 19:19 | 20:49 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

**36-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Тасимов. Есаул. Моталов. Тәкә. Алтмыш. Бампер. Опал. Рив. Оҫтаһы. Алғыш. Сыҙам. Ювелир. Рәсем. Киреһе. Раса. Әмер. Игеҙ. Ирис. Мәле. Вервье.

**Вертикаль буйынса:** Бураҡаев. Тимерғазин. Шарик. Мәғрип. Идиома. Сос. Скейтбордсы. Мәһәҙиев. Ливер. Ем. Виловатово. Юлбарисов. Тремор. Мулла. Шыршы. Руда.

Әсәҙуллин Филүс Фәнил улының һөйөклө
**әсәһе**
вафаты сәбәпле, уның һәм туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

**Дуҫтары.**

*БАҠСА*



# ҠЫШҠА ӘҘЕРЛӘЙБЕҘ

**Ҡурай еләге ҡыуағын сентябрь аҙағында йәки октябрь башында, йәғни һауа температураһы нулдән түбән төшкәс, ҡышҡылыҡҡа ергә эйеп ҡуялар. Тик бынан алда ҡыуаҡлыҡты әҙерләргә кәрәк.**

Һәр ҡыуаҡтың ҡороған, шулай уҡ йәш үҫентеләрен тамыры менән йолҡоп алабыҙ. Ярайһы йыуан ғына үҫентеләр тороп ҡалырға тейеш, уларҙы өҫтән 10-20 см-ға ҡыҫҡартаһың. Һәр ҡыуаҡ араһы 60 см тирәһе булырға тейеш, әгәр ҙә ҡурай еләге ныҡ ҡуйырып киткән икән, уларҙың кәрәкмәгәнен көрәк менән ҡырҡып сығаһың. Ошо ябай ғына кәңәштәр уңышты күтәрә һәм еләктәрҙең ҙурлығына йоғонто яһай.

Көҙ ҡурай еләге ҡыуағындағы япраҡтарҙы ла йыялар, тик бөрөләрҙе зарарландырып ҡуймағыҙ, һаҡ ҡыланығыҙ. Бейәләй йәки бирсәткә кейеп, үҫентене аҫтан өҫкә ҡарай иплә кенә һыпыра алаһығыҙ. Япраҡтар ҡалһа, күгәрә, серей һәм бөрөнө яндыра. Шуға ла был эшкә ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ. Бынан һуң ҡыуаҡтарҙы ергә ҡарай бөгөп, тимерсыбыҡ менән бәйләргә була. Ҡурай еләге ҡыуағын ҡар аҫтында ҡалырлыҡ итеп, 50 см-ҙан да аҫҡараҡ бөгөргә тырышығыҙ. Ҡыш ҡыуаҡтар тулыһынса ҡар менән ҡапланырға тейеш. Яҙын, башҡаларын зарарламаһын өсөн, өшөгән үҫентеләрҙе ҡырҡалар.

# ҠЫУАҠТАРҘЫ ТУҠЛАНДЫРЫУ

**Көҙгә ҡарай еләк-емеш ҡыуаҡлыҡтары тупраҡта булған бөтөн файҙалы матдәләрҙе алып бөтә тиерлек. Шуға ла әле уларҙы фосфор һәм калий ашламалары менән туҡландырыу мәле лә. Азотты көҙөн индермәйҙәр, сөнки ул яңы япраҡтар барлыҡҡа килтерәсәк һәм тамыр системаһының көсөн аласаҡ. Һатыуҙа емеш культуралары өсөн тәғәйенләнгән ашламалар бар. Органик ашламалар ҙа артыҡ булмаясаҡ.**

Туҡландырыусы матдәләр ни тиклем өҫтәрәк, шул тиклем яҡшыраҡ була. Ҡарағат һәм крыжовниктың төбөнән 40 см алыҫлыҡта көрәкте артыҡ батырмай ғына ерҙе ҡаҙығыҙ. Унда 1 ҡалаҡ суперфосфат һәм сульфатакалий, шулай уҡ янған тиҙәк һәм торф һалып болғатығыҙ. Әгәр ҙә ашламаларҙы тәрәнерәк һалһаң, кислород етерлек үтеп инә алмай ҙа, ашлама үҫемлеккә тәьҫир итмәй.

Ҡарағат менән крыжовниктың япраҡтарына баҡыр купоросы һибергә һәм улар ергә ҡойолоп бөткәс, ҡыуаҡтарҙың эргәһенә күмеп ҡуйырға. Ҡурай еләгенең тамырҙары өҫтә була, уның төбөн иплә кенә йомшартыу кәрәк. Ҡарағат менән крыжовниктың ҡороған, һынған, ауырыған, ерҙә ятҡан, насар уңыш биргән ботаҡтарын ҡырҡып ташларға. Ҡара ҡарағаттың - 4-6, ҡыҙыл ҡарағаттың - 8-9, крыжовниктың 7-10 йылдан өлкән ботаҡтарын ҡырҡығыҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✔ *Кешенең тыуыу әйләнеше сикһеҙ, камиллыҡҡа өлгәшкәнгәсә дауам итә. Үҙ күкрәгендә рухи тойғолар тулы сәскә-йөрәк йөрөтөүселәр Аллаға оҡшаш була һәм иң юғары баҫҡысҡа күтәрелә...*



ӘЙТЕШ

# КӘМӘЛӘ ЛӘ ИШКӘК ИКӘҮ БИТ,

## Ике яҡлап кәрәк ишергә!

**Рөстәм Нурыев атлы уҙаман гәзитебеҙҙең 34-се һанында ағинәйҙәр йыйыны тураһында "Донъя дилбегәһен... аҡһаҡалдарға тапшырырға әҙерҙәр" мәҡәләһен уҡығандан һуң тыуған фекерҙәрен шиғри юлдарға һалып яҙып ебәргәйне. Ул юлдар 35-се һанда баҫылып сыҡты. Авторҙы шиғыр яҙырға мәжбүр иткән фекер ошо булды:**

**- Ағинәйҙәр, һеҙгә әйтәм,**
**Ил тотҡаһы ирҙәр ҡайҙа?**
**Донъя ҡалһа ҡатын-ҡыҙға,**
**Яңып әйләнмәҫме ҡуҙға?**
**Дилбегәне тотһа улар,**
**Кәрәк саҡта ҡаҡһа ҡулдар,**
**Ил намыҫы - ир намыҫы,**
**Ирһеҙ ҡалһаҡ, Алла ҡарғар!**

**Был юлдарҙың авторы - Әбйәлил районы Һәйетҡол ауылында йәшәүсе ағинәй Вәсилә Садиҡова ла яуапһыҙ ҡалманы. Шулай итеп, яңы әйтеш башланырға тора. Һеү мәҙәт, афарин!**



**Вәсилә Садиҡованың әйткәне:**

- Һай, афарин егет, Нурлыбай,
Нисә йәштер һинә, белмәйем,
Сәсән һүҙе сыҡты күңелеңдән,
Ишетһендәр егет, ҡыҙ-ҡырҡын.

Осмаҫ элек елгә ул ҡырын,
Тараһһана Урал буйлатып.
Иман нурын яғып йөҙҙәргә,
Дуҫлыҡ сазын йырлат сыңлатып.
Үлгәндәрҙе булмаҫ терелтеп,
Тереләрен һаҡлап ҡалһана.
Илем, халҡым йәшәр, иншаллаһ,
Ҡот бар ергә килмәҫ нишана.

Ниәттәрең изге, егетем,
Юлдар асыҡ - тотон дәртләнеп,
Оранынды сәс һин орлоҡтай,
Күтәреп алһын һүҙең Ҡоролтай.
Башҡорт йәшәр мәңге ҡоромай.

Ағинәйҙәр һеҙгә ҙур терәк,
Ҡамғаҡлайҙар именлек теләп,
Башҡорт бар ул, бар ул - үлмәгән,
Аҡһаҡалдар ҙа күп, меңләгән.
Тик күптәрҙең юҡ бит иманы,
Аллаһыға етмәй инаныу.

Кәмәлә лә ишкәк икәү бит,
Ике яҡлап кәрәк ишергә,
Беҙ һул яҡты ғына көҫәйбеҙ,
Уның ҡуша нинә ишмәйбеҙ?
Батырға мәл етте, нишләйбеҙ?

Иң әүәле аҡбаш ҡороһон,
Һин таҙарып ҡарап торорһоң,
Ҡорҙаштарың килер "өмөгә",
Нигеҙ ҡорайыҡ, тип, һәммәгә.
Нигеҙегеҙ булыр ҡоростан,
Йәшәүегеҙ күркәм Гөлбостан.
Һеү мәҙәт, афарин!

**Рөстәм Нурыевтың әйткәне:**

Кәмәлә лә ишкәк икәү бит,
Ике яҡлап кәрәк ишәргә!
Сәсәниә инәй һүҙен йығып,
Мөмкин түгел ташлап китергә!
Мәҙәт барҙа, телмәр тотоп,
Сығайыҡ беҙ халыҡ алдына.
Ишәйек һуң бергә алға табан,
Артта ҡалһын зарлы замана.

Замананы кеше үҙе яһай,
Кәрәк, йәштәр, шуны аңларға.
Киләсәген һинен үҙ ҡулыңда,
Зарланмағыҙ, зинһар, ҡарттарға.
Кәңәштәрен, әммә, тыңлау зарур,
Әйтеп торһон улар белгәнен.
Быуындарҙы ялғау ошо булыр,
Бөгөн белһен үткән күргәнен.

Икәү, тигәс, тағы иҫкә төшә,
Һәр нәмәнең ишле булыуы.
Донъяларҙы яҡты нурлы итә,
Шул иштәрҙең тигеҙ тороуы.
Оран һалам инде нисә йылдар:
Ярыштырман, зинһар, уларҙы.
Донъя дауылында батмай бара,
Яратышҡан иштәр карабы.

Аҡһаҡалдар илдә ҡалмаған, тип,
Кинәйле уйҙар уйланым.
Яңы фекер китәйемсе сиртеп,
Тиҫкәрегә, зинһар, юрамаң.
Үткән быуат касафаты, бәлки:
Ҡатындарҙы үтә ҙурланыҡ.
Ир хәстәрен элеп иңдәренә,
Дивандарға барып ауланыҡ.

Тигеҙ ишле нигеҙ ташы
Эпостарҙа күптән һалынған,
Ир һәм ҡатын, милләт башы,
Мәңге арыҫланға атланған.
Гөлбостандың сәскә атыу серен
Асайымсы уйын-ысынлы:
Күп балалы атай күкрәгенә лә,
Тағайыҡсы Герой миҙалы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәйгелә әйтеш ҡорорға теләүсе яңы авторҙарҙы ла көтәбеҙ. Улар ҡарамағында - СМС өсөн +7-937-835-34-74 телефоны, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы kiskeufa@mail.ru. Бәйге барышын "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бите"нда күҙәтеп барыу мөмкинлеге лә бар.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һыйымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙЫҒЫЛҺАҢ...

## бейек ағастан йығыл

Ярлы менән ҡоҙа булғансы, бай менән барымталы бул.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Аҡыл эйәһенә бер кеше мөрәжәғәт итә: "Һин һәр күренешкә аңлатма бирә алаһың, минең хәлемде лә төшөндөр әле, - ти ул һәм үҙе тураһында һөйләй башлай. - Мин элек бер нигә борсолмай, типтереп йәшәнем. Ләкин берҙән-бер көндө мин үҙемдең йөрәгемдең тибешен ишеттем. Тибешен генә түгел, йөрәгемдән ниҙер өҙөлөп төшөп тора кеүек тойолдо миңә. Ниндәйҙер алама һүҙ әйтһәм, насар ҡылыҡ ҡылһам, хатта насар уй ғына уйлаһам да йөрәгемдең бер ситенән ниҙер кителә лә, урынында яра ҡала кеүек. Был нимә - аңлатһаңсы..."**

**- Мин һиңә бер риүәйәт һөйләйем, тыңла, - тигән аҡһаҡал. - Кешене яралтҡас, Хоҙай уның тәнен дә, йөҙөн дә матур итеп эшләгән. Тик уның эске ағзаларын ғына хайуандарҙыҡы һымаҡ уҡ күрмәләкһеҙ итеп ҡалдырған. Ә шулай ҙа бер аҙҙан кешенең йөрәген матурыраҡ итеп эшләргә ҡарар ҡылған. "Кеше йөрәге хайуандарҙа булмаған тойғоларҙы үҙендә туплаясаҡ, - тип уйлаған Ул. - Аҡыл менән тулы йөрәк ҡан йөрөтөүсе тоҡ һымаҡ булырға тейеш түгел. Мин уны рауза сәскәһе кеүек итеп эшләйем һәм уның һәр тажына бер төрлө тойғо һалып, уны бер матур гөлләмәгә әйләндерәм. Күкрәгендә сәскә-йөрәк йөрөткән кеше хайуандарға ҡарағанда матурыраҡ та, аҡыллыраҡ та, бөйөгөрәк тә, камилыраҡ та буласаҡ".**

**Шулай итеп, Хоҙай кешенең күкрәгенә рауза сәскәһелөй йөрәк урынлаштырған. Ләкин кеше үҙенең был гүзәл арғаһын Хоҙай күҙаллағанса файҙаланмай. Насар ҡылыҡтар ҡылған һайын, уның сәскә йөрәгендәге таждар һулып, өҙөлөп төшөп тора. Кешеләрҙең бик аҙҙары ғына ғүмере ахырына матур гөлләмәле сәскә-йөрәк менән барып етә. Ә күптәренең күкрәгендә сәскә урынына йолҡҡоланып, ялангасланып бөткән сәскә һабағылай йөрәк тороп ҡала һәм унда өҙөлмәй торған бер генә Йән тажы елберләй. Был Йән тажы бер ғүмерҙән икенсеһенә күсә, яңы тормош башлаған кешенең күкрәгендә яңы сәскә бөрөләндерә. Кешенең тыуыу әйләнеше сикһеҙ, камиллыҡҡа өлгәшкәнгәсә дауам итә. Үҙ күкрәгендә рухи тойғолар тулы сәскә-йөрәк йөрөтөүселәр Аллаға оҡшаш була һәм иң юғары баҫҡысҡа күтәрелә..."**

**- Мин үҙемдең күпме таждар юғалтыуымды һәм уларҙы бер ваҡытта ла ҡайтарып булмай икәнде аңланым, шуның өсөн миңә бик ҡыйын, - тигән тәрән ҡайғыға батҡан кеше.**

**- Тормошоңдо яңынан башла, - тигән уға Аҡыл эйәһе. - Һәр изге эшең, матур һүҙең, матур уйҙарыңа яуап итеп сәскә-йөрәгеңдә яңы таждар бөрөләнер..."**

**Шулай итеп, был кешегә бөйөк тәбиғәт сере асылған. Аҡыл эйәһенә рәхмәт әйтеп, күкрәгендә Алла сәскәһе үстерер уйҙарында ғы оло хыял менән кеше ауыр һәм яуаплы юлдан ары киткән..."**

ХАЗИНАЛАРЫБЫҘ

# КҮНДӘН ҠЫМЫҘ ҺАУЫТТАРЫ



**Борон халҡыбыҙ һауыт-һаба етештереү өсөн урындағы сеймалды киң ҡулланған. Ағастан, шулай уҡ күндән дә һауыт-һаба эшләгәндәр.**

Башҡорт аты элек-электән халҡыбыҙҙың тоғро юлдашы, дуҫы һәм ярҙамсыһы булған. Үҙ сиратында кеше лә был хайуанҡайға иғтибарлы, ихтирамлы мөнәсәбәт һаҡлаған. Ир-егет бәләкәйҙән атта йөрөргә өйрәнгән. Уны маҡтау ашатып, хатта үҙенсә серләшеп тә, яуға, ярыштарға әҙерләгән. Йылҡы - халҡыбыҙ тарихының айырылғыһыҙ бер өлөшө ул. Атта башҡорттоң хатта Парижға ла барып етеүен беләбеҙ. Ул кешене туҡландырыусы ла. Хәҙер инде бар донъяға үҙенең шифаһы, дауалау сифаттары менән билдәле эсемлек - ҡымыҙҙы ла әлеге лә баяғы бейә һөтөнән эшләйҙәр бит. Йылҡы ите лә юғары баһалана. Борон аттың тиреһен дә әрәм-шәрәм итмәгәндәр, ҡымыҙ өсөн унайлы һауыттар теккәндәр.

Тиренең йөнө алынып, билдәле ваҡытта ыҫлыҡҡа ҡуйылған. Ыҫлыҡ - ул ыҫ, төтөн менән күндә эшкәртә торған махсус ҡоролма. Ыҫлағанда тиреләге барлыҡ зыянлы матдәләр юҡҡа сыҡҡан, күн ныҡыған. Йөйҙәрҙе ял һәм ҡойроҡ ҡылы менән теккәндәр.

Һауытҡа исем аттың тән өлөшөнә ҡарап бирелгән. Иң ҙуры һаба тип атала. Һаба ҡымыҙы, тигән һүҙ ҙә бар. "Табындағы ит ашалып, һабалағы ҡымыҙ эселеп бөткәс, хан көрәш башларға әмер бирә", - тиелә "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" эпосында.

Һаба теккәндә ҡалған ҡырҡындыларҙан муртай, турһыҡ тегелгән. Муртай, турһыҡ - ыҫланған мал тиреһенән тар ауыҙлы, ялпаҡ итеп тегелгән бәләкәй һауыттар. Йылҡының бот тиреһенән тегелгән ҙурыраҡ һауыт дөмбәй, арҡһы бот тиреһенән яһалған бәләкәйе ботлоҡ тип атала. Ҡуллыҡ - йылҡы малының алғы аяҡ тиреһенән яһалған тар ауыҙлы ҡымыҙ һауыты, икенсе төрлө ҡулсаҡ. Ҡисҡәләмәйенсә баш һәм муйын тиреһенән башҡынаҡ һәм көрәгә теккәндәр.

Башҡынаҡ - йылҡының баш тиреһенән яһалған һауыт. "Йәйләүҙәргә барҙыҡ, бейәләр һауҙыҡ, башҡынаҡҡайҙарҙы ҡулға алып",- тигән һүҙҙәр бар халыҡ йырында.

Бейә һөтө башҡынаҡҡа һауып алына, һабаларға һалынып әсетелә, әҙер ҡымыҙ көрәгәлә табынға бирелә инде...

Бөгөн ат тиреһенән һауыт-һаба эшләүселәр юҡлығы бындай әйберҙәргә ихтыяж булмау менән аңлатылыр. Шулай ҙа халҡыбыҙҙың элек ҡулланған көнкүреш әйберҙәренең тәғәйенләнешен, яңғырашлы атамаларын белеү зыян итмәҫ.

**Миңзәлә ФӘСИМОВА.**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 11 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 4174